ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 май (һабанай) 2026

№ 18 (1213)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ һАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тағы ла һәйкәл тураһында



3

Еңеүсе булғанбыҙ. Еңеүсе булырбыҙ...



7,9

"Ҡыҙыл атлылар" гәзите...

һулар һауа, тылдан килгән хат һымаҡ була



8-9

Йәшәүгә ынтылыш булғас...



12-13

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районтарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

## Һуғыш тарихы һеҙҙең ғаиләлә лә ҡабатланамы?

***Илдус РӘХМӘТУЛЛИН, Өфө ҡалаһы Сипайлово биҫтәһе мәктәбе уҡытыусыһы:*** Тарих ҡабатланмай, тиҙәр... Нисек ҡабатлана әле ул! 1941 йылдың 22 июнендә фашистик Германияға ҡаршы илебеҙ азатлығы өсөн ҡупҡан оло яу - Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға 85 йыл тулған көндәрҙә лә ана шул фашизм ҡалдыҡтары - украин нацистарына ҡаршы дүрт йыл инде хәҙер 1941-1945 йылдарҙағы Ватан һуғышында ҡатнашҡан олатай-ҡартатайҙарҙың ейәндәре көрәшә бөгөн Махсус хәрби операцияла. Ана шул егеттәрҙе баш ҡалабыҙ Өфөләге Рәсәй Геройы, Донбасс ерен азат иткәндә ҡаһармандарса һәләк булған генерал Шайморатов һәйкәле янында - Совет майҙанында яуға оҙатҡан бер тантаналы сарала эргәмдә улы менән хушлашырға килгән аҡ яулыҡлы апайҙың, күҙ йәштәрен тыя алмайынса, әрнеп әйткән һүҙҙәре иҫемдә ҡалған: "Бынан 85 йыл элек әсәйем Әлкә станцияһында атайымды - улымдың ҡартатаһын яуға оҙатҡан. Бөгөн ғаилә тарихыбыҙ ҡабатланыр, әсәйем кисергән яҙмыштың ошондай уҡ әсе өлөшө минең иңемә лә төшөр, тип кем уйлаған... "- тип һыҡраныуы әле булһа күҙ алдынан китмәй... Ул саҡта мин әсә хәсрәтен йыуатырлыҡ һүҙ таба алманым, фәҡәт улдарыбыҙ, ағай-энеләребеҙҙең еңеү менән тиҙерәк иҫән ҡайтыуҙарын ғына теләнем.

Эйе, ил тераге булған, ирмен, тигән ир-егет яуҙан ҡасып, ситкә сығып китмәй, өйҙә боҫоп та ултыра алмай. РФ Президенты Владимир Путиндың Башҡортостанға бер килгәнендә әйткәне гел тел осонда: "Башҡорттар һәр даим, Рәсәй империяһы замандарында уҡ, ҡыйыу һәм дәһшәтле яугирҙар булған. Бөйөк Ватан һуғышында ла улар Ватаныбыҙ азатлығын лайыҡлы яҡланылар, бөгөн дә уның тыныслығын ышаныслы һаҡлайҙар". Һәм, ысынлап та, Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандары Минлеғәли Шайморатов, Таһир Күсимов, Даян Мурзин, Миңлеғәли Ғөбәйҙуллин, Мөғин Нагаев, Сергей Зорин, Алексей Сухоруков исемдәре менән аталған хәрби батальондар составында бөгөн ошо геройҙарҙың ейәндәре нацизмға ҡаршы көрәшә. Был, бер яҡтан, тәрән символик мәғәнәгә эйә булһа, икенсе яҡтан, илһөйәр быуындар күсәгилешлеген, ил яҙмышының ышанысл ҡулдарҙа булыуын күрһәтә. Киң билдәле "Офицеры" фильмындағы йырҙа йырланғанса, Рәсәйҙә яуҙа баш һалған үҙенең батыр улдары иҫтәлеген йөрәк түрендә һаҡламаған, улар ҡайғыһын күтәрмәгән ғаилә юҡтыр. Һуғыш һағышы ҡағылмаған, төн йоҡоларын йоҡламай, улдары, ирҙәре өсөн ғибәҙәттә ултырмаған әсәләр, кәләштәр юҡтыр ул. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, Еңеү менән ҡайтҡан, ҡайта алмай, сит тупраҡта ятып ҡалған батырҙарыбыҙҙың таушала төшкән фотоһүрәттәре һәр ғаилә түрендә рамлап эленгән һәм ҡәҙерле реликвия итеп һаҡлана. Алыҫ йылдарҙан беҙҙе яҡын итеп, туғандарса йылылыҡ менән ҡарай улар аҡлы-ҡаралы фотоһүрәттәрҙән; ейәндәре - бөгөнгө МХО яугирҙарын дошманға ирешмәҫкә өндәй, 1945 йылғы кеүек, Еңеү менән иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын көтәләр төҫлө улар. Шулай ғына була күрһен! Илебеҙгә тиҙерәк именлек килеп, улдарыбыҙға ата-бабалары кеүек, яуҙан Еңеү менән ҡайтырға насип булһын!




ИҒТИБАР!

# ЕҢЕҮ ПАРАДЫ НИСЕК ҮТӘ?



**9 майҙа Башҡортостандың баш ҡалаһында 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 81 йыллығына арналған еңеү парады үтәсәк. Дүшәмбе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Хөкүмәт вице-премьеры Ирек Сәғитов был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәт бирҙе.**

- Октябрь проспектында көндөҙгө 12-нән 1-гә тиклем Өфө гарнизоны хәрбиҙәренең тантаналы үтеүе Төп сараларҙың береһе буласаҡ, - тип белдерҙе Ирек Сәғитов. - Унда Өфө территориаль гарнизоны хәрбиҙәре, федераль башҡарма власть органдарының территориаль органдары хеҙмәткәрҙәре, "Башҡортостан" полкы һәм С.Юлаев исемендәге батальондың МХО-ла ҡатнашыусылары, хәрби хәрәкәттәр һәм хәрби хеҙмәт ветерандары, уҡыу йорттары курсанттары һәм кадеттарынан 2 мең самаһы кеше ҡатнашасаҡ.

Уның һүҙҙәренсә, хәрбиҙәрҙән һуң Муса Гәрәев исемендәге тәүге осоу әҙерлеге мәктәп-интернаты кадеттары, "Шайморатов" класы уҡыусылары, юнармеецтар һәм диңгеҙ пехотасылары кадет кластарының (60-ар кеше) Еңеү байрағы күсермәләрен, Рәсәй Федерацияһы, Башҡортостан Республикаһы һәм Өфө ҡалаһы флагтарын күтәреп үтеүе планлаштырыла.

Парад командующийы итеп хәрби комиссар урынбаҫары полковник Ринат Латипов тәғәйенләнгән. Парадты республиканың хәрби комиссары полковник Михаил Блажевич ҡабул итә.

Артабан 16 берәмек хәрби техника үтергә тейеш, шуларҙың дүртәүһе - Бөйөк Ватан һуғышы осоронан. Парад Рәсәй һәм Башҡортостан флагтарын күтәргән Ка-32, Ка-26, Ми-8 вертолеттары һәм 5 бәләкәй авиация самолеты осошо менән тамамлана.

Тантаналы йөрөш буйынса иң яҡшы парад расчеттары билдәләнә. Еңеүселәргә Башҡортостан Республикаһы Башлығының күсмә Кубогы һәм дипломдар тапшырыла.

12+

ҠЫҪҠАСА

# ТУРИСТАР КҮБӘЙӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Дәүләт Думаһының профилле комитет рәйестәре менән эшлекле осрашыу үткәрҙе.** Кәңәшмәлә бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ буйынса комитет етәксеһе Александр Дёмин, туризм һәм туристик инфраструктураны үҫтереү буйынса комитет рәйесе Сангаджи Тарбаев ҡатнашты. Республикала ҡунаҡсыллыҡ индустрияһын үҫтереү һөйләшеүҙең төп темаһы булды. Яҡтар эске һәм тышҡы туризмды киңәйтеү, республиканың туристик ҡеүәтен нығытыу буйынса сараларҙы, шулай уҡ ошо өлкәгә йәлеп ителгән бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа дәүләт ярҙамы механизмдарын тикшерҙе. Әйткәндәй, 2025 йылда Башҡортостанға 1,9 миллиондан ашыу турист килгән. Бынан тыш, республика шифахана-курорт йүнәлешен үҫтереү буйынса Волга буйы федераль округында лидер статусын раҫланы.

✓**Башҡортостандың 43 районы игенселәре яҙғы культуралар сәсеүгә төштө, тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһы вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.** Республикала тәүлегенә уртаса 25-27 мең гектар сәселә, технологик мөмкинлек - 100 мең гектарға тиклем, тип билдәләне Илшат Фәзрахманов. 3 майға ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, республикала 214 мең гектар йәғни пландың 11 проценты сәселгән. 124 мең гектарҙы - яҙғы иген һәм ҡуҙаҡлы иген культуралары, 79 меңдән ашыу гектарҙы - май бирә торған культуралар, 7 мең гектарҙы - шәкәр сөгөлдөрө, яҡынса 5 мең гектарҙы мал азығы культуралары биләй. Стәрлетамаҡ, Ауырғазы, Әлшәй һәм Мәләүез райондары аграрийҙары яҙғы культуралар сәсеү майҙаны буйынса алдынғы урында килә.

✓**Башҡортостан шифаханалары республика милкендә ҡала. Уларҙы һатырға тигән пландар юҡ. Был хаҡта Дәүләт Йыйылышының 32-се ултырышында республика вице-премьеры - ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская белдерҙе.** Бынан алдараҡ "Танып" һәм "Асы" шифаханалары 2026 йылға дәүләт милкен хосусилаштырыу планына индерелгәйне. "Бөтә шифаханаларыбыҙ ҙа табышлы эшләй, улар социаль яҡтан ғына түгел, республика өсөн стратегик бурыстарҙы ла үтәй. Төрлө райондарҙағы ике ҙур булмаған шифахана хосусилаштырыу планына уларҙың йәлеп итеүсәнлеген баһалау өсөн индерелде. Ләкин республиканың дәүләт милкендәге һигеҙ шифахананың береһен дә һатырға йыйынмайбыҙ. Шифахана-курорт комплексы республикала ҡалырға тейеш, тип иҫәпләй Башҡортостан Башлығы", - тип белдерҙе ул.

✓**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2026 йылда республика уҡытыусыларының август кәңәшмәһен Ишембай районында уҙғарыу тәҡдимен хупланы. Ул муниципалитет етәкселегенә ҡаланы ошо сараға әҙерләргә ҡушты.** "Шундай традиция бар: уҡытыусылар кәңәшмәһен һеҙҙә үткәрәбеҙ икән, тимәк, ҡала балҡып торорға тейеш", - тип күрһәтмә бирҙе Радий Хәбиров. Ишембай районы хакимиәте башлығы Азат Ишемғолов билдәләүенсә, районда уҡытыусыларҙың ҙур кәңәшмәһенә әҙерлек башланған. Капиталь ремонтлау федераль программаһы сиктәрендә әлеге ваҡытта районда 4 мәктәптә (икеүһе ауылда һәм икеүһе ҡалала), шулай уҡ Ишембайҙа бер балалар баҡсаһы төҙөкләндерелә, тип өҫтәне ул.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БЕЛАРУСТАР КИЛДЕ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Белоруссияның Рәсәйҙәге ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Юрий Селиверстов менән осрашты. Сарала Беларусь Республикаһының Өфөләге генераль консулы Александр Ковалёв ҡатнашты. Яҡтар иҡтисадтың һәм социаль өлкәнең төрлө тармаҡтарында үҙ-ара хеҙмәттәшлекте нығытыу мәсьәләләрен тикшерҙе.**

"Беҙҙең республика өсөн Беларусь - туғандаш төбәк, тышҡы иҡтисади эшмәкәрлектә төп партнерҙарҙың береһе. Беҙҙең сәнәғәт кооперацияһы өлкәһендә хеҙмәттәшлектең бер нисә уңышлы миҫалы бар. Мәҫәлән, МАЗ-дың Өфө трамвай-троллейбус заводы менән электр транспортын үҫтереү буйынса проекты. Ауыл хужалығы машиналарын төҙөүҙә лә уртаҡ башланғыстар бар. Былтыр көҙ "Белоруссия машиналары" мультибренд етештереү-сервис үҙәген сафҡа индерҙек. Беҙҙең төбәктә Белоруссияла сығарылған техниканың ҙур паркы эшләй, - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. - Республикаларыбыҙ араһында мәҙәни-гуманитар тректа ла хеҙмәттәшлек алып барыла. Туризмды үҫтереүгә лә иғтибар бүләбеҙ. 2023 йылдан оло быуын өсөн "Башҡортостан-Белоруссия оҙон ғүмерлелеге" проектын тормошҡа ашырабыҙ. Өфөнән Минскиға тура авиабәйләнеш асылды".

Белоруссияның Рәсәйҙәге илсеһе Башҡортостан Башлығына хеҙмәттәшлекте үҫтереүгә ынтылышы өсөн рәхмәт әйтте. Яҡтар шулай уҡ Рәсәй-Белоруссия инвестиция кластерын булдырыуҙы, туризм өлкәһендәге, агросәнәғәт комплексындағы проекттарҙы һәм башҡа мәсьәләләрҙе тикшерҙе.

# АУЫР ТУПРАҒЫ ЕҢЕЛ БУЛҺЫН!

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев оҙаҡ ауырығандан һуң 74-се йәшендә арабыҙҙан китте. Ҡайғылы хәбәрҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә хәбәр итте. Һуңғы ваҡытта Толкачев Мәскәүҙә дауалана ине.**

"Константин Борисович һуңғы йылдарҙа ҡаты сир менән көрәште. Үҙен ҡыйыу, ысын офицерҙарса, генералдарса тотто. Бер ҡасан да зарланманы. Ваҡыты менән дауаланырға барып ҡайта торғайны. Хәле насарланғас, ул ауыр операция яһатырға тигән ҡарар ҡабул итте. Уны Мәскәүҙә, Бурназян клиникаһында эшләнеләр. Беҙҙең идара итеү командаһында өлкән иптәшебеҙҙе йыйы һүҙ менән иҫкә алмаған кеше юҡтыр, моғайын. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы уның етәкселегендә һөҙөмтәле эшләне. Бергәләп ижтимағи-сәйәси көрсөктә, ковидты, Махсус хәрби операцияны, санкция баҫымын үттек. Константин Толкачев беҙҙең өсөн өлкән ағай булды, шәхсән үҙем шулай тип ҡабул итәм. Бик ауыр юғалтыу", - тине Радий Хәбиров.

Константин Борисович 1953 йылдың 1 мартында Кемерово өлкәһендә тыуған. Рәсәй Федерацияһы Эске эштәр министрлығының Рязань юғары мәктәбен, СССР Эске эштәр министрлығы академияһын тамамлаған. Хеҙмәт юлын 1970 йылда Кузнецк металлургия комбинатында торба иретеп йәбештереүсе ярҙамсыһы булып башлай. 1971 йылдан 1973 йылға тиклем Совет Армияһы сафтарында хеҙмәт итә. 1977-1996 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһы Эске эштәр министрлығы системаһында етәксе вазифалар биләй. 1996-1999 йылдарҙа - Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институты начальнигы. Отставкалағы эске хеҙмәт генерал-майоры.

# ҺӨНӘРМӘНДӘР, БӘЙГЕГӘ!

**Башҡортостанда "Икенсе старт" номинацияһы буйынса "Һөнәре буйынса иң яҡшыһы" Бөтә Рәсәй һөнәри оҫталыҡ конкурсының төбәк этабы уҙғарыла. МХО ветерандарына ярҙам итеүгә йүнәлтелгән сара 15 майҙа була, тип асыҡлыҡ индерҙеләр республика Хөкүмәтендә.**

Конкурс "Кадрҙар" милли проекты булышлығында уҙғарыла. Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ольга Кабанова билдәләүенсә, "Икенсе старт" күңеленә оҡшаған эш менән шөғөлләнгән һәм һөнәри ҡаҙаныштары хаҡында һөйләй алған кешеләр өсөн яҡшы стимул булып тора.

Көҙ көнө конкурстың төбәк этабында еңеүсе беренселек һәм төп аҡсалата приз - 1 миллион һум өсөн федераль этапта көрәшә. Конкурсҡа Махсус хәрби операция ветерандарын һәм ҡатнашыусыларын (21 йәштән өлкәнерәк) саҡыралар. Һынауҙар ярыш майҙансығында, шулай уҡ ситтән тороп үткәрелә (ҡатнашыусылар видеоролик йәки электрон презентация күрһәтә). "Һөнәре буйынса иң яҡшыһы" конкурсының "Икенсе старт" номинацияһында еңеүсе октябрь айында Һамар өлкәһендә Башҡортостан исеменән сығыш яһай.

# ҠЫРҒЫҘ МӘКТӘПТӘРЕ АСЫЛА

**Өфөлә Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов һәм Ҡырғыҙстандың мәғариф министры Догдуркул Кендирбаева уртаҡ мәктәптәр төҙөү мәсьәләһе буйынса ике яҡлы кәңәшмә үткәрҙе. Фекер алышыуҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылда Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте һәм Ҡырғыҙстан Республикаһының Министрҙар кабинеты Ҡырғыҙстанда рус телле тулыҡ дөйөм белем биреү ойошмаһын асыу тураһында килешеү төҙөгәйне. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты дәүләт заказы буйынса ошо мәктәптәр өсөн педагогик состав, уҡыу пландары һәм методик әсбаптар әҙерләй. Кәңәшмәне асып, Сергей Кравцов Башҡортостан һәм Аҡмулла университеты етәкселегенә халыҡ-ара проекттарҙы тормошҡа ашырғандары өсөн рәхмәт белдерҙе, шулай уҡ 2027 йылдың 1 сентябренә тиклем уҡ өс уртаҡ мәктәпте асырға йыйыныуҙары тураһында әйтте.

Республика етәксеһе Радий Хәбиров һыҙҙаренсә, Ҡырғыҙстан Республикаһы - Башҡортостандың төп ун партнеры иҫәбендә: "Беҙҙе уртаҡ мәҙәниәт, тел, рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр, берлектәге гуманитар проекттар бәйләй. Беҙҙең вуздарҙа Ҡырғыҙстандан 200-ҙән ашыу студент белем ала, - тип билдәләне республика Башлығы. - Ҡырғыҙстанда рус телле мәктәптәр асыу проекты, һис шикһеҙ, илдәребеҙҙең стратегик партнерлығын нығытыу өсөн оло әһәмиәткә эйә. Беҙ белем биреү өлкәһендәге асыштар һәм инновациялар менән уртаҡлашасаҡбыҙ. Шул рәүешле үҙ-ара дуҫлыҡ һәм тығыҙ хеҙмәттәшлек традицияларын дауам итербеҙ тип ышанам".

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Быйыл Өфөлә һәм республика ҡалаларында "Үлемһеҙ полк" акцияһы үткәрелмәй. Хәүефһеҙлек өсөн акция тулыһынса онлайн-форматҡа һәм башҡа формаларға күсерелде, тип иҫкә төшөрҙө Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм республика халҡын онлайн-йөрөштә ҡатнашырға саҡырҙы. "Үлемһеҙ полк" - Ватанды һаҡлаусылар алдында түбәнселек менән баш эйеү өсөн тағы бер мөмкинлек. Ҡушылығыҙ", - тине Радий Хәбиров. Акция 9 майҙа урынданғы ваҡыт буйынса көндөҙгө сәғәт 12-лә 2026.polkrf.ru сайтында башлана.

✓Ошо көндәрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин Нефтекаманан Анжелика Шуматбаеваға "Герой-әсә" тигән маҡтаулы исем бирҙе. Башҡортостанда бындай наград 12-се тапҡыр тапшырылды, тип билдәләне республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров һәм республикала 2026 йылдың Ҙур һәм татыу ғаилә йылы тип иғлан ителеүен иҫкә төшөрҙө. "Ғаилә" яңы милли проекты ғаиләгә, әсәлеккә һәм атайлыҡҡа ярҙам итеүгә йүнәлтелгән, - тине ул. - Беҙҙең яңы ярҙам саралары - күп балалылар өсөн транспортта бушлай йөрөү, колледжда уҡыған студенттар өсөн компенсация".

✓Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһе Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәм һуғыш инвалидтарына 9 май унайынан 10 мең һум аҡса күсерҙе. Республикала йәшәгән 68 ветеран түләү алды, тип хәбәр иттеләр ведомствонан. Йыл һайын түләү Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында хәрәкәттәге армияла хеҙмәт иткән йәки хәрби хәрәкәттәр барған төбәктәрҙә яраланыу, контузия, имгәнеү йәки ауырыу сәбәпле инвалид булып ҡалған ветерандарға бирелә. Аҡса Бөйөк Ватан һуғышы барышында хәрби операцияларҙа ҡатнашҡан, ғәмәлдәге армияның хәрби частарында һәм дошман тылында йәки сит ил дәүләттәре биләмәләрендә махсус заданиелар үтәгән өсөн дә түләнә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Өфө мэры вазифаһын башҡарыусы менән таныштырҙы. Өфө ҡала советы Сергей Петрович Кожевниковҡа баш ҡала башлығы вазифаһын башҡарыу бурысын йөкмәтте, тип иҫкә төшөрҙө ул. Билдәле булыуынса, Өфө мэры Ратмир Мәүлиев ике айға Тәфтиш изоляторына оҙатылды. Ул вазифа вәкәләттәрен артыҡ файҙаланыуҙа һәм айырыуса ҙур күләмдә ришүәт алыуҙа ғәйепләнә. Унан тыш, хакимиәт башлығы урынбаҫары, хакимиәттең ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре идаралығы начальнигы урынбаҫары һәм "Радуга" шифаханаһы директоры "вазифа вәкәләттәрен арттырыу" статьяһында ҡаралған енәйәттәр ҡылыуҙа ғәйепләнә.

КӨН ТЕМАҺЫ

# ТАҒЫ ЛА ҺӘЙКӘЛ ТУРАҺЫНДА

**Башҡортостандың баш ҡалаһы символы - Ағиҙел йылғаһы ярында урынлашҡан Салауат Юлаев һәйкәле ярты быуаттан ашыу ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарын ҡаршы алып, оҙатып ҡала ине. Хәҙер Өфөнөң Черниковка биҫтәһендәге махсус цехта һүтеп алынған һәйкәлде реставрациялау эштәре бара.**



Башҡортостандың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралығы ҡарамағындағы Күҙәтеү советының "Салауат Юлаев һәйкәле" федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объектын һаҡлау (реставрациялау) мәсьәләһе буйынса сираттағы ултырышы реставрациялау оҫтаханаһында үтте. Билдәле мәҙәниәт эшмәкәрҙәренән, йәмәғәтселәрҙән торған совет вәкилдәре өсөн цех буйлап экскурсия ойошторолдо.

Реставраторҙар әлеге ваҡытта тикшереү эштәре алып бара. Улар һәйкәлде буяуҙан таҙартҡан һәм быҫаса күҙгә салынмаған етешһеҙлектәрҙе тапҡан. Һәйкәлдең торошо ҡәнәғәтләнерлек түгел, ҙур ярыҡтар барлыҡҡа килгән. "Салауат Юлаев һәйкәлен буяуҙан таҙартҡас, ҡойолған металдың ниндәй хәлдә икәнен күрҙек. Һәйкәлдең торошо беҙ уйлағандан насарыраҡ, - тип билдәләне Башҡортостандың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралығы етәксеһе, Күҙәтеү советы рәйесе Салауат Ҡолбахтин. - Ысынлап та, республика етәксеһе Радий Фәрит улы Хәбировтың һәйкәлде тиҙерәк яңыртырға тигән ҡарары ни тиклем мөһим икәне бөгөн йәнә раҫлана. Эксперт әйтеүенсә, металдың сифаты ҙур шик тыуҙыра. Унда ҡойоу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән бушлыҡтар, шлак күп, ә ошо шлак тулған бушлыҡтар эшкәртелмәгән. Салауат Юлаев һәйкәленә бәйле күңелһеҙ асыштар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп. Тәүҙән үк сифатлыраҡ металл, сифатлыраҡ ҡойолған суйын булһа, тейешенсә хеҙмәтләндерҙән осраҡта һәйкәл оҙағыраҡ торор ине".

Реставрация төркөмө етәксеһе урынбаҫары Пётр Волков әйтеүенсә, эштәрҙең күләменә ҡарап, теге йәки был белгестәр йәлеп ителә, әлеге мәлдә алты кеше эшләй. Цех махсус техник ҡулайламалар менән йыһазландырылған. Һәр кәмселекте компьютер программаһы анализлаясаҡ. Һунынан артабан нисек эшләү тураһында ҡарар ҡабул итеү өсөн белгестәр советы йыйыласаҡ.

***Рәсәй һынлы сәнғәт, һәйкәл ҡойоу һәм төҙөлөш академияһы скульптура факультетының скульптура кафедраһы мөдире, профессор, Рәсәй художество академияһының мөхбир ағзаһы, Мәскәү Рәссамдар союзы ағзаһы, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы, Салауат Юлаев һәйкәлен һаҡлау мәсьәләһе буйынса Күҙәтеү советы ағзаһы Салауат Щербаков та үҙенең фекерҙәре менән уртаҡлашты.***

- Башҡортостанда тарихи экспонаттар, милли башҡорт кейемдәре, кәсептәре, шул иҫәптән ҡамыт-дуғалар кеүек башҡорт аты кәрәк-яраҡтары менән Салауат Юлаев музейын ойоштороорға була. Унда үҙенең тарихы булған ошо суйын һәйкәл лайыҡлы урын биләр ине. Әллә нисәмә быуын башҡорттар уны күреп үҫте. Уны быуаттар буйына һаҡлау өсөн Салауат Юлаев үҙәге булдырылырға һәм төп урында, бина эсендә, ошо һәйкәл торорға мөмкин.

Донъяла тотош халыҡ өсөн әһәмиәтле булған ҡиммәтле шедеврҙың музейға әүерелгән осраҡтары етерлек тип уйлайым. Бындай миҫалдар бар. Мәҫәлән, бар донъяға билдәле Давид статуяһы. Майҙанда уның аныҡ күсермәһе ҡуйылған, ә ысыны Флоренция академияһында көмбәҙ аҫтында урынлашҡан, барыһы ла Микеланджело яһаған ысын скульптураны ҡарарға килә. Өҫтәүенә, Давидтың бронзанан ҡойолған өсөнсө скульптураһы бар, ул йылғаның икенсе ярында тора. Петербургтың Йәйге баҡсаһында ла шундай уҡ хәл. Ысынлап та, Хрущёв һәм Брежнев ваҡытында һәйкәлдәрҙе суйындан яһағандар - ул заман билдәһе. Хатта Донбасстағы Саур-Могила ла суйындан ҡойолған.

Башлыса һәйкәлдәр бронзанан ҡойола, сөнки бронза яҡшыраҡ, уға атмосфера йоғонто яһамай. Гөмүмән, бронза ваҡытҡа бирешмәй. Салауат Юлаев һәйкәлен бронзанан эшләү идеяһы булған, скульптор Тавасиев үҙе лә уны бронзанан ҡойорға теләгән. Мин шул һәйкәлде күрҙем. Уның гипстан яһалған моделе Мәскәү өлкәһендәге элекке сиркәүҙә урынлашҡан цехта оҙаҡ торҙо. Беҙ уны ҡарарға барҙыҡ, ошо моделде - сиркәү эсендәге гәйәт ҙур һыбайлыны иҫләйбеҙ.

Шуға күрә һәйкәлде бронзанан ҡойоу идеяһын дөрөҫ тип уйлайым, бынан һуң ул Ағиҙел ярында мәңге торасаҡ. Белеүемсә, Башҡортостан Башлығы ла был идеяны хуплай, әлбиттә, халыҡ менән дә кәңәшләшергә теләй. Минеңсә, был дөрөҫ, яҡшы башланғысты хупларға кәрәк.

**"БАШИНФОРМ".**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

## МИНИСТРЛЫҠ АҢЛАТА



**Пилотһыҙ системалар бөгөн ҡоралды конфликттарҙа мөһим роль уйнай. МХО биләмәһендә, мәҫәлән, дрондар ярҙамында ҡуйылған хәрби бурыстарҙың 80 проценты үтәлә. Ошоға бәйле бөгөн яңы төр ғәскәрҙәр сафын тулыландырыу эше һәр төбәктә киң йәйелдерелгән.**

Мәғариф һәм фән министрлығы вәкилдәре, юғары уҡыу йорттары һәм дөйөм белем биреү ойошмалары етәкселәре ҡатнашлығында үткән ведомство-ара кәңәшмәлә Рәсәй оборона министры урынбаҫары - РФ Ҡораллы көстәренең баш хәрби-сәйәси идаралығы начальнигы, армия генералы Виктор Горемыкин, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә йыйыуҙың төп принцибы - ирекле һайлау, тип билдерҙе. Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә хеҙмәткә ингән граждандар менән контракт кандидаттың ҡарарына ярашлы, бер, ике йәки өс йылға төҙөлә.

"РФ Оборона министрлығы хәрби хеҙмәткәрҙе контракт ваҡыты тамамланғандан һуң хеҙмәттән ҡайтара. Быны ваҡытында атҡарыу өсөн яуаплылыҡ командирҙарға һәм кадрҙар органдарына, шулай уҡ хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе ваҡытында хеҙмәттән бушатыуҙың шәхси иҫәбен һәм контролен тормошҡа ашырыусы Кадрҙар буйынса баш идаралыҡҡа йөкмәтелә. Шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алыу мөһим: пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хәрби вазифаларҙа хеҙмәт үткән хәрбиҙәрҙе контракт ваҡыты тамамланған көндә уҡ хәрби частың шәхси составы исемлегенән сығарыу РФ Президенты указдары менән регламентланған", - тип билдәләне Виктор Горемыкин. Контракт положениеһына туҡталып, был юҫыҡта мәжбүрләүҙең булмауын тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрҙә ул.

Контракт нигеҙендә ирекле принцибы ята, студенттарҙы МХО-ла ҡатнашырға мәжбүр итеү ниәтен тотмайбыҙ, тине генерал. Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре хәрби хеҙмәткәрҙәре башҡа подразделениеларға һәм ғәскәрҙәр төрөнә үҙенең шәхси ризалығынан тыш күсерелергә тейеш түгел. Тимәк, ул фәҡәт үҙе һайлаған ошо ғәскәрҙәр системаһында ҡала. Был положениены нығытыу маҡсатында һәм командирҙарҙың яуаплылығын арттырыу йәһәтенән Рәсәй Оборона министрлығының өҫтәмә күрһәтмәләре әҙерләнгән, һәм улар быйыл апрель аҙағында частарға еткерелгән.

БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин. Шулай уҡ быны йәшәгән урын буйынса хәрби комиссариатта, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталында ҡалдырырға ла мөмкин.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров янғын һүндереүселәргә 25 берәмек янғын-ҡотҡарыу техникаһы асҡыстарын, шулай уҡ республиканың янғын һағы хеҙмәтенең иң яҡшы хеҙмәткәрҙәренә Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы. Бүләкләү тантанаһынан һуң республика етәксеһе яңы техниканы ҡараны. Улар янғындар, шул иҫәптән ландшафт һәм урман янғындары менән һөҙөмтәле көрәшергә ярҙам итәсәк. Бер нисә берәмек тағылмалы янғын һүндереү техникаһы райондарҙың ирекле янғын һүндереү командаларына тәғәйенләнгән.

✓ Башҡортостанда 2026 йылда педагогик хеҙмәтендә уңышҡа өлгәшкән иң яҡшы уҡытыусыларға премиялар биреү буйынса конкурсҡа документтар ҡабул ителә башланы. Сара "Йәштәр һәм балалар" милли проектының "Педагогтар һәм остаздар" федераль проекты сиктәрендә уҙғарыла. Премияға стажы 3 йылдан кәм, эш йөкләмәһе аҙнаһына 18 сәғәттән аҙ булмаған педагогтар дәғүә итергә мөмкин (төп эш урыны - мәктәп). Административ йәки ойоштороу эштәрен башҡарған уҡытыусылар ҡатнаша алмай. Документтар 12 майға тиклем ҡабул ителә.

✓ Парижда ЮНЕСКО башҡарма комитетының 224-се сессияһында "Торатау" геопаркы ЮНЕСКО-ның глобаль паркы статусында раҫланды. Был турала Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә геопарк директоры Зaһир Хәмиҙуллин хәбәр итте һәм тейешле документты Башҡортостан Башлығына тапшырҙы. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев белдереүенсә, 2026 йылдың июлендә башҡорт шихандарын ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя тәбиғәт мираҫы селтәренә индереү тураһында ғариза ла ҡараласаҡ.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Үзбәкстандың Ташкент өлкәһе хакимы Зойир Мирзаев менән "Бекабад" индустриаль технопаркын булдырыу мәсьәләһен ҡараны. Бөгөндән күп кенә республика компаниялары уның резиденты булырға әҙер. Яҡын арала технопарктың мастер-планы һәм төҙөлөш проекты әҙерләнәсәк.

✓ Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Ишембай ҡалаһында "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһын ҡуйырға тигән күрһәтмә бирҙе. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, уҙған йылдың ғинуарында ҡала маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. Был исем илдең халҡы Бөйөк Ватан һуғышында еңеүгә тос өлөш индергән, тылда хәрби һәм граждандар производстволарында эшләгән, шул уҡ ваҡытта фиҙаҡәрлек һәм хеҙмәт батырлығы күрһәткән ҡалаларына бирелә.

ИРЕКМӘН

# ЙӨРӘК ҠУШЫУЫ БУЙЫНСА




**Мин инде ике йылдан ашыу, ирекмән булараҡ, "Көслө рухлылар. Үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ" командаһы менән бергә Курск, Белгород, Липецк, Донецк халыҡ республикалары, Херсон, Запорожье яҡтарына гуманитар ылау оҙатыуҙа ҡатнашам.**

Ирекмәнлек юлы нисек башланып китте? Башта миңә таныштарым: "Егеттәргә кейем кәрәк-яраҡтары менән ярҙам итергә ине", - тип мөрәжәғәт иткәйне. Шундуҡ кәрәкле кейемдәр һатып алып тапшырҙым. Унан инде һаҡ селтәрҙәре үреүҙә ҡатнаша башланыҡ. "Башҡортостандың ышаныслы тылы" тип аталған фондтың "Башҡортостан аш-һыуы. Беҙ һеҙҙең менән Еңеүгәсә бергә" тигән айырым бер төркөмө бар. Мин унда ла ағза булып торам. Беҙ киптерелгән борщ, рассольник, туҡмас ризыҡтарҙы әҙерләйбеҙ, йәшелсә-емештәрҙе киптерәбеҙ, йә иһә быҡтырабыҙ, консервалайбыҙ. Ике аҙнаға бер тапҡыр йыйылып, уларҙы тейешле урынға матур килеш барып етерлек итеп төрөп әҙерләйбеҙ.

"Беренсе тирмә" төбәк проекты асылғас, йөрәк ҡушыуы буйынса Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларындағы госпиталдәрҙә ятҡан яралы хәрбиҙәргә ярҙам итеүселәр төркөмөнә ҡушылып киттем. Яңы йылды Луганск госпиталендә ҡаршыланыҡ. Ул беренсел госпиталь, йәғни яралыларҙы эвакуациялау урыны. Бахмуттан яраланып ҡайтҡандарҙы алып киләләр ине. Госпиталгә барып инәһең, иң тәүҙә ҡан, эрен, тир еҫе танауға бәрелә. Башлыса ауыр яралылар, аяҡһыҙ-ҡулһыҙ ҡалғандары ла бар. Башта юғалып ҡалғандай булаһың, сөнки был хәлдәрҙе кисереүе ныҡ ауыр. Ике-өс көндән өйрәнеп китәһең инде. Бөтөн эштәрҙе бүлешәбеҙ, кем укол һала, кем яраланы бәйләй һ.б. Ашатабыҙ-эсерәбеҙ, эвакуацияға әҙерләйбеҙ. Мин микрохирургияла эшләнем. Беҙ иртәнге һигеҙҙән киске етегә тиклем эшләй инек. Ялһыҙ эшләргә тура килде.

Төрлө милләт вәкилдәре йыйылған госпиталдә башҡортса һөйләшеп йөрөй торғайныҡ. "О, Башҡортостан ҡыҙҙары!" - тип рәхмәт әйтәләр, "Телегеҙ шундай йомшаҡ, моңло, йыр һымаҡ", - тип маҡтап ебәрәләр.

Үҙебеҙҙең милләттәштәрҙе лә осраттыҡ. Бер яҡташыбыҙ алғы һыҙыҡта урманда ашамай-эсмәй ете көн ятҡан, бирешмәгән. Рух ныҡлығы ярҙам иткән. Алғы һыҙыҡта булған тағы бер егетебеҙ ике аҙна ризыҡ ҡапманым, тип һөйләгәйне. "Үлән тамырҙарын, хатта тупраҡты ашарға тура килде", - тине. Бына шундай һынауҙар үтә ундағы егеттәр. Шундай шәп яҡташтарыбыҙ менән ғорурланып ҡайттыҡ.

"Ҡулдан - ҡулға" тип аталған гуманитар ылау менән Луганск, Донецк, Белгород, Курск һәм башҡа ҡалаларҙа ун биш тапҡыр булырға тура килде. Ылауҙар ҙа төрлө була. Уларҙың ҡайһыларын складта ғына ҡалдырып китергә була. Ә беҙ алып бара торған ылауҙы ата-әсәләр ебәрә, шуға ла ул һәр ваҡыт адреслы. Посылкаларҙы мотлаҡ егеттәрҙең ҡулына тотторабыҙ. Артабан да уларҙың һәр береһе менән бәйләнештә торорға тырышабыҙ. Шылтыратышып, хәл белешәбеҙ. Бер-ике һүҙ ишетһәләр ҙә ҡыуанып китәләр. Бер барғанда Иглин районынан киткән башҡорт ағайы менән тап булыштыҡ. "Тағы ла бер минут ҡына һөйләш, башҡортса һөйләшкәнде ишеткем килә", - тигән була. Беҙҙең менән һөйләшеү улар өсөн ҙур бер ваҡиға һымаҡ ҡабул ителә бит инде.

Яңы йылда гуманитар ылау менән - 110, мартта 146 урында булдыҡ. Мариуполдә инвалидтар йәмғиәтендә осраштыҡ, балаларға бүләктәр алып барҙыҡ. Бына ошондай ирекмәнлек эше йәшәү, кешелеклек, мәрхәмәтлек, теләктәшлек кеүек төшөнсәләргә тәрәнерәк мәғәнә бирә һәм тормоштоң ҡәҙерен нығыраҡ аңларға, баһаларға ярҙам итә.

**Зөһрә БҮЛӘКОВА.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Һуғыш тарихы һеҙҙең ғаиләлә лә ҡабатланамы?

***Мәрзиә МАЛИКОВА, Благовар районы, Мирный ҡасабаһы:*** Мин Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылы киленемен. Миңә унда йәшәргә тура килмәһә лә, шул ауылда ғүмер итеп, балалар үҫтереп, тормоштоң әсеһе-сөсөһөн бергә татып донъя ҡуйған ҡайным менән ҡәйнәмдең яҡты иҫтәлектәрен күңелем түрендә һаҡлайым. Еңеү көнө айҡанлы һәм һеҙҙең рубрика һорауына яуап итеп, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, иҫән-һау тыуған ауылына әйләнеп ҡайтыу бәхетенә өлгәшкән ҡайным Зәки Әбүталип улы Маликов тураһында иҫкә алып киткем килә. Ул 1942 йылдың декабрендә, 17 йәше тулыр-тулмаҫтан һуғышҡа алына һәм Белоруссия фронтында тәүҙә - артиллерист, аҙаҡ элемтәсе булып хеҙмәт итә. Гомель, Брест, Бобруйск, артабан Ҡыҙыл Армияның әүҙем һөжүм маршрутындағы Варшава, Прага ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнаша. Висла йылғаһын кисеп сығып, Лодзь ҡалаһы өсөн барған тиңһеҙ һуғышта батырлыҡ күрһәтә һәм шунда ҡаты яралана. Өс ай буйы госпиталдә ятып дауаланып сыҡҡас, хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип, тыуған яғына ҡайтарыла. Һуғышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары юғары баһаланып, СССР Оборона министрлығы тарафынан 1-се дәрәжә Ватан һуғышы ордены һәм Европа ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнашҡаны өсөн миҙалдар менән наградлана. Тыныс хеҙмәттә лә Зәки Әбүталип улы һуғышта алған тәжрибәһе һәм һөнәрмәнлегенә таянып, эште еренә еткереп, намыҫлы башҡарыуы менән ауылдаштарының лайыҡлы ихтирамын яулай.

Өфөлә йәшәүсе ҡыҙым Сәриә ҡартатаһының портретын ҙурайтып эшләтеп алды һәм, уны ғорур күтәреп, "Үлемһеҙ полк" парадында ҡатнашабыҙ. Мәғлүмәт сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, был акция быйыл да үткәрелә. Мин, ошо ил һаҡлаусы батыр яугирҙарыбыҙ иҫтәлегенә тулҡынландырғыс парадта Махсус хәрби операция яуында баштарын һалған уландар һәм ейәндәрҙең яҡындары ла ҡатнашырға тейеш, тип иҫәпләйем. Был бик дөрөҫ ҡарар булыр ине, сөнки Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ветерандарҙың бөгөнгө быуын вариҫтары ла ил азатлығы һәм хәүефһеҙлеге өсөн яуҙа көрәшәләр. Мәҫәлән, ҡайным Зәки Әбүталип улының ике ейәне - Нуриман менән Ирек Маликовтар ҡартаталары өлгөһөндә Махсус хәрби операция яуына ил һаҡларға киткәйнеләр. Бөтөн ауыл халҡы ейәндәрҙең иҫән-һау ҡайтыуҙарын теләп ҡалғайны. Баш ҡалабыҙ Өфөлә шулай уҡ буласаҡ яугирҙарыбыҙҙы тантаналы парад менән оҙаттылар. Ҡайтырбыҙ, көтөгөҙ, тип киткәйнеләр ҙә бит... Үкенескә, Бөйөк Ватан һуғышы ветеранының ике ейәне лә Украина конфликтында батырҙарса һәләк булды.

Ә бит илебеҙҙә генә түгел, шул уҡ Ишбирҙе ауылында ғына ла һуғыш тарихы ғаилә быуынында ҡабатланған бындай хәлдәр байтаҡ булып сыҡты, үкенескә. Мәҫәлән, шул уҡ Ирektең әсәһе яғынан ҡартатаһы Ибраһим олатай Аҡсыуашов та Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. Ватан һуғышы яугирҙары Илбулов Төхвәт олатайҙың ейәне Илнар, Миңлебай Дәүләтбирҙиндың ейәне Ғаяз, Сәғәҙәт Юнысовтың ейәне Әхсән... Һәм, бәлки, мин белеп бөтмәгән башҡалар ҙа күптер. Бындай ғаиләләр яҙмышы онотолорға тейеш түгел. Кем белә, уларҙың тағы ла төпкөлөрәк тамырҙары 1812 йылғы Ватан һуғышы тарихына ла барып тоташалыр. Илгә батыр яугирҙар тәрбиәләп үҫтергән ғаиләләр тарихын өйрәнәйек, уларҙың абруйҙарын һаҡлайыҡ, данлайыҡ, сөнки ғаилә даны - ил абруйы, ватаныбыҙ ныҡлығы бит ул.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺАБАНТУЙҘАР ҠАСАН, ҠАЙҘА?



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала һабантуйҙар үткәреү графигын раҫлаған указға ҡул ҡуйҙы.**

Билдәле булыуынса, **30 майҙа** Әбйәлил, Ғафури, Йылайыр, Ҡалтасы һәм Күгәрсен райондарында һабантуй ойошторола. **6 июндә** "эстафета"ны Әлшәй, Архангел, Аҫҡын, Ауырғазы, Баҡалы, Бишбүләк, Бүздәк, Бөрйән, Йәрмәкәй, Ейәнсура, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Мәләүез, Миәкә, Өфө, Учалы, Хәйбулла, Саҡмағош, Шишмә райондары һәм Яңауыл ҡабул итә. **11 июндә** - Баймаҡ районы, **12 июндә** Балтас, Балаҡатай, Благовар, Благовещен, Борай, Дәүләкән, Дыуан, Иглин, Илеш, Ишембай, Ҡыйғы, Краснокама, Мишкә, Нуриман, Салауат, Стәрлебаш, Тәтешле, Туймазы, Федоровка һәм Шаран райондары һабан байрамын билдәләй. **13 июндә** - Бөрө, Ҡариҙел, Мәсетле һәм Стәрлетамаҡ райондарында, ә **20 июндә** Бәләбәй һәм Көйөргәҙе райондарында һабантуй була. Һабантуйҙар июлдә генә тамамлана: **4 июлдә** - Дүртөйлө районында, ә **18 июлдә** - Белорет районында.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе хәбәр итеүенсә, республикала ауыл хужалығында оҙайлы эш стажы булған 37 меңдән ашыу кеше юғары страховка пенсияһы ала. Ул пенсияға билдәләнгән аныҡ өҫтәмә түләүҙең 25 процентын тәшкил итә. 2026 йылда сумма 9584,69 һум иҫәбенән индексациялана, тимәк, өҫтәмә түләүҙең күләме айына 2396,17 һум тәшкил итә. Был социаль ярҙам сараһына ауыл хужалығында 30 йылдан кәм булмаған стажы булған ауыл ерендә йәшәгәндәр хоҡуҡлы.

✓Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусыларға - 114, уларҙың ғаилә ағзаларына 324 ер участкаһы бирелгән. Был турала республиканың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығынан хәбәр иттеләр. Герой исемен йөрөтөүселәргә һәм орден кавалерҙарына ер участкаһы алыу өсөн урындағы хакимиәткә мөрәжәғәт итеү ҙә етә. Уларға хатта ҡағиҙәлә ҡаралған был районда өс йыл йәшәү талабы ла ҡуйылмай.

✓Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусыларҙың күп балалы ғаиләләре тураһында ижади конкурс иғлан ителде. Темаһы - ишле ғаилә тормошо, ғаилә ҡиммәттәре. Ижади эште ye02@yandex.ru һәм r.ahmetvanova@fzo.gov.ru электрон почта аша йәки Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 8-се ҡат адресы буйынса 2026 йылдың 26 июненә тиклем ебәрергә кәрәк. Ойоштороусылар булып Рәсәй халыҡтары ассамблеяһының Башҡортостандағы бүлексәһе, "Ватанды һаҡлаусылар" фонды филиалы, "Йәшлек" гәзите редакцияһы сығыш яһай.

✓Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара кампусында йәштәр сәйәсәте һәм тәрбиә эшмәкәрлеге буйынса федераль кимәлдәге семинар уҙҙы. Сараны Рәсәйҙең Фән һәм юғары белем биреү министрлығы булышлығында ӨДНТУ-ның Йәштәр сәйәсәте буйынса идаралығы ойошторҙо. Семинарҙа Мәскәүҙән, Ҡаҙандан, Екатеринбургтан, Ханты-Мансиҙан, Нижневартовскиҙан, Калининградтан һәм башҡа ҡалаларҙан 45 вәкил - проректорҙар, профилле бүлексә етәкселәре һәм йәштәр сәйәсәте өлкәһендә эшләүсе эксперттар ҡатнашты.

✓18 - 28 майҙа Башҡортостанда ауыҙтел ижадын һаҡлауға һәм популярлаштырыуға арналған республика халыҡтары әкиәттәренең онлайн декадаһы үтә. Унда айырым кешеләр ҙә, коллективтар ҙа ҡатнаша ала. Әкиәтте театрлаштырып йәки ҡурсаҡ менән күрһәтеү; әкиәтте ҡысҡырып уҡыу; ирекле техникала әкиәт сюжетына мультипликация; эпик жанрҙағы әҫәрҙе вокаль башҡарыу; композиторҙарҙың әкиәт темаһына инструменталь әҫәрен башҡарыу һәм башҡа форматтар рөхсәт ителгән. Ойоштороусыһы - Республика халыҡ ижады үҙәге.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## Һуғыш тарихы һеҙҙең ғаиләлә лә ҡабатланамы?

***Әхмәт МОНАСИПОВ, хеҙмәт ветераны, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:*** Һуғыш тарихы ул - мәңге онотолмай торған фажиғә. Бындай афәттәр илебеҙ яҙмышында бик күп булған. Уларҙы беҙ мәктәп йылдарынан алып Ватан тарихы дәрестәренән дә, кинофильмдарҙан да беләбеҙ. Ә инде халҡыбыҙ яҙмышына тиҫтәләгән миллионлап ҡорбандар килтергән иң ҙур, хәсрәтле һәм аяуһыҙ һуғыш - 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан яуы яралары һаман булһа уңалмай әле. Илде яуыҙ гитлерсылар баҫҡынсылығынан йолоп ҡалыу өсөн үҙ теләктәре менән янып-ярһып ут эсенә ташланған арыҫландай ир-егеттәребеҙҙең күбеһе, айырыуса һуғыштың тәүге ауыр мәлдәрендә эләккәндәре, Еңеү көнөн күрә алмай һәләк булған. Ә инде яраланып йәки фашисты өңөндә дөмөктөрөп ҡайтҡандарын тағы бер фронт - ярым емерек илде аяҡҡа баҫтырыу булып көткән. Тап һуғыштың ана шул тере шаһиттары һөйләүенән дә күпте белеп ҡалдыҡ беҙ - атайҙары, ағайҙары, ҡартатайҙарының балалары һәм ейәндәре. Мин дә шул ваҡыттағы йәш быуын иҫәбендә атайым һөйләгәндәрҙе ауыҙ асып тыңлай торғайным. Тик был йәһәттән атайым әллә ни һөйләргә яратманы: күңеле тула йә ҡан баҫымы күтәрелеп китер ине... Яраларынан һыҙлана барып, 72 йәшендә вафат булды. Хәҙер мин унең йәшен уҙып киткән ветеранмын - хеҙмәт ветераны. Ә Ватан һуғышында ҡатнашҡан яу ветерандары ҡалманы ла инде арабыҙҙа.

Украина хәрби конфликты беҙҙең ғаиләне лә урап үтмәне: кесе ҡыҙымдың кейәүе был һуғыштан яраланып, һул ҡулын юғалтып ҡайтты. Ярай әле, башы иҫән-һау, үҙ аяҡтарында ҡайтып килде, тип ҡыуандыҡ ҡына инде... Ғаиләләрендә өс бала үҫә, улар атайһыҙ - уң ҡанатһыҙ, арҡа терәкһеҙ ҡалыр ине бит. Ә ундай балалар бөгөн бик күп илдә. Дөрөҫ, хөкүмәт уларҙы ҡарауһыҙ ҡалдырмаҫ, ләкин атай - атай инде ул.

Ил күләмендә һуғыш тарихы ҡартатаһы, атаһы һәм ейәне яҙмыштарында ҡабатланыуҙы ғаиләләр бик күп икән ул. Улар хаҡында гәзиттәрҙә, интернет сайттарында йыш яҙыла, телевидение тапшырыуҙарында күрһәтелә. Мин ике ейәнем менән шул хаҡта уҡырға яратабыҙ, сөнки улар икеһе лә хәрби хеҙмәткәр булырға хыяллана. Яңыраҡ ҡына беҙ шундай бер тарихҡа юлыҡтыҡ. 1945 йылдың 30 апрелендә фронтташтары Михаил Егоров һәм Алексей Берест менән Рейхстаг башына Еңеү байрағын элгән Мелитон Кантария хаҡында ине ул. Иптәштәре арҙамында Кантария Рейхстаг көмбәҙенең башына уҡ менеп етә һәм үҙенең һалдат ҡайышы менән байраҡты нығытып, ҡаҙап төшөү бәхетенә эйә була. 8 майҙа Кантария менән Егоровҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Бөгөн шул асыҡлана: ҡартатаһына тамсы һыу кеүек оҡшаған Георгий Кантария 2023 йылдан бирле украин боевиктарына ҡаршы көрәшә. Һөнәре буйынса һанлы программа менән идара ителеүсе станок операторы булараҡ, һәйбәт эш хаҡы алып эшләүенә ҡарамаҫтан, бөтәһен дә ташлап, егет үҙ теләге менән МХО-ға яҙыла. Хәбәрсенең һорауына ҡарашына кесе Кантария, ҡартатаһының данлы фамилияһы ил яҙмышынан ситтә тороп ҡалырға ҡушманы, тип яуаплай. Бында уны ҡайҙа яуаплы һәм хәүефле - шунда ебәрәләр: тәүҙә - штурмлаусылар бригадаһында, шунан артиллерия дивизионында, аҙаҡ яралыларҙы эвакуациялау медицина взводында хеҙмәт итә. Унан ут расчетына телефонист итеп тәғәйенләнә. Һәм бөтөн был еңелдән булмаған хәрби бурыстарҙы ла һалҡын аҡыл, аныҡ иҫәп һәм ҡыйыулыҡ менән башҡара Герой Кантария ейәне. Өҫтәүенә, халыҡ яратып "Еңеү маршалы" тип атаған мәшһүр полководец Жуковтың аҙашы булыуы ла символик мәғәнәгә эйә. Тимәк, Мелитон Кантария, Георгий Жуков һәм башҡа миллионлаған данлы яугирҙар быуынының ҡаһарманлыҡ сифаттары уларҙың ейәндәренә, һалдаттарына күсә килеп, лайыҡлы дауам итә.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ҺУҢҒЫ ТАМСЫ

**Тыныслыҡ, хеҙмәт, еңеү символы булып күңелгә һеңгән май айын яҡшы хәбәрҙәр көтөп ҡаршылау үҙен аҡламаны: ил-ара ҡапма-ҡаршылыҡтар, үлем сәсеүсе һуғыштар дауам итә.**

1 һәм 2 майҙа Украина Ҡоралды көстәре Рәсәй өҫтөнә хаттин ашып йөҙәрләгән дрон яуҙырҙы, ләкин беҙҙең Һауа һөжүменә ҡаршы оборона саралары (ПВО) ошо ике тәүлек эсендә 600-ҙән ашыу пилотһыҙ осоусы дошман аппаратын бәреп төшөрҙө. Дошман был ике көндә Брянск, Курск, Белгород, Запорожье, Херсон өлкәләренән алып, Мәскәү, Новгород, Ленинград һәм Свердловск төбәктәренең тыныс халыҡ йәшәгән биләмәләренә, аэропорттарға, энергетика объекттарына тоҫҡап һөжүм итте. 3 май кис Мәскәүгә һөжүм иткән ете дрондың берәүһе баш ҡаланың Мосфильм урамындағы торлаҡ комплексына төшөп шартлаған. Байрам көндәрендә бигерәк тә Туапсе ҡалаһы ҙур хәүеф аҫтында ҡалды: һуңғы аҙна эсендә дошман был ҡалаға дүртенсе тапҡыр шартлатҡыстары менән һөжүм итте һәм был осраҡлы түгел ине: Туапсе нефть эшкәртеү заводы - Ҡара диңгеҙ ярындағы йылына 12 млн тонна нефть эшкәртеүсе мөһим объект булараҡ, диңгеҙ терминалы менән берлектә эшләй һәм 90 процент продукцияһын сит илдәргә оҙата. Завод территорияһы һәм диңгеҙ терминалына ҡабынған янғын өйөрмәһе дөйөм көстәр менән тулыһынса һүндерелгән.

Дошман үҙенең яуыҙ ниәттәрен балалар уйынсыҡтары һәм туп эсенә миналар итеп һалып китә, ләкин беҙҙең саперҙар уларҙың бындай ғәҙәтен яҡшы белгәнлектән, "тоҙаҡҡа" эләкмәй һәм алыҫ аралыҡтан уҡ шартлата бара. Әйткәндәй, "Көньяҡ" ғәскәр төркөмөнөң 238-се артиллерия бригадаһы саперҙары ошо көндәрҙә Донецкиҙағы граждандар объекты өҫтөнә төшөп, шартламай ҡалған самолет рәүешендәге FP-1дронын торлаҡ йортҡа һис бер зыянһыҙ зарарһыҙландырыуға өлгәште. Ә "Көнсығыш" төркөмөнөң пилотһыҙ осоусы аппараттар операторҙары һауа разведкаһы үткәреп, дошман дрондары маршруттарын асыҡлағас, уларға ҡаршы истребитель дрондар ебәреп, Запорожье өлкәһенә яуҙырыласаҡ дошман шартлатҡыстарының юлын бүлде. Яугирҙарыбыҙҙың хәрби осталыҡ күнекмәләре күптән көндәлек батырлыҡ өлгөһөнә әүерелде инде. Хәҙер беҙҙең егеттәр Донбасс күгеен контролдә тотоуҙа ҡеүәтле "Мерлин" разведдронын файҙалана. Был аппарат сәғәттәр буйына Украина Ҡоралды көстәре позициялары өҫтөндә "эленеп" тора ала һәм дошмандың теләһә ниндәй йәшерен объекттарына хәтлем күҙәтергә һәләтле.

Халыҡ-ара хәлдәргә килгәндә, Яҡын Көнсығыш буйынса ыңғай хәбәр ишетелә биреп ҡуйғайны, унаһы ла ялғанлау һәм ике йөҙлөлөк һөҙөмтәһе булып сыҡты. АҠШ президенты Дональд Трамп тәүҙә үҙенә хас тотороҡһоҙлоҡ һәм ҡапма-ҡаршылыҡ менән ил Конгресына Иранға ҡаршы һуғыштың туҡтатылыуы хаҡында хәбәр итте, ләкин хәүефһеҙлек маҡсаттарында Ҡушма Штаттар ғәскәре Иран биләмәһендә ҡалдырыла, тип өҫтәне. АҠШ сенатындағы демократтар партияһы вәкилдәре Аҡ йорт хужаһының был хәбәрен "буш һүҙ бутҡаһы" тип атаны һәм һуғыштың дауам ителеүендә, шул арҡала илдәге тәртипһеҙлек, хаҡтар артыуында республикасыларҙы ғәйепләне. Әлеге ваҡытта десант кораблдәре төркөмө, 2 меңләп десантсы, шулай уҡ самолет, вертолет һәм башҡа саралар Иранға табан юл тотто. Трамптың төп маҡсаты - Иран уранын ҡулға төшөрөү. Үҙ сиратында ул Ирандың һуғышты туҡтатыу тураһындағы 14 пункттан торған документын һанға ла һуҡмай, уны ҡарап та сыҡмаған әле һәм шул уҡ ваҡытта әлегә хәрби хәрәкәттәр тынып торған арала ла Ормуз боғаҙын биктә тотоуҙы дауам итә.

Иран менән һуғыш Ҡушма Штаттарҙың үҙе өсөн дә юғалтыуҙарһыҙ үтмәне: CNN тикшереүҙәре буйынса Яҡын Көнсығыштағы 16 америка хәрби объекты ярайһы ныҡ зыян күргән, ҡиммәтле системалар - ПВО радарҙары, радиолокация станциялары эштән сыҡҡан. Тегерандың тыныслыҡҡа аҙымын һанламайынса, Вашингтон был конфликттан үҙенә отошлораҡ шарттар көҫәй, ул ғына етмәгән, Кубаға яҫҡыныуын дауам итә. Аҡ йорт лидерының энергияһы Германия канцлеры Фридрих Мерцтан үс алыуға ла етә хатта: канцлерҙың Вашингтонды Иранға ҡарата стратегияһы юҡлыҡта ғәйепләүенән һуң Трамп Германияла урынлашҡан ғәскәрҙәре составынан 5 мең хәрбиҙе был илдән сығарырға ҡарар иткән.

Ә бит һуңғы ваҡыт Мерцтың да шашыныуҙары сиктән аша бара. Етенсе тиҫтәһен ҡыуған был әҙәмде былтыр уҡ әле "ГФР-ҙы дүртенсе рейх итеп тергеҙмәксе Мерц Гитлерҙы ҡабатларға маташа һәм Европаны Рәсәйгә ҡаршы ҡоторта" тип яҙып сыҡҡайнылар инде. Ваҡытында экс-канцлер Ангела Меркель дә уның кем икәнен үтәнән-үтә күреп, "яман әҙәм" тип ҡылыҡһырлама биргәйне. Һәм, ысынлап та, ул Германияны баштан-аяҡ ҡоралланыу һәм оборона йүнәлешенә бороп, иҡтисади-социаль мәсьәләләрҙе икенсе планға күсерҙе. Илдә ризаһыҙлыҡ арта, меңәрләгән халыҡ урамдарға сыға һәм Мерцтың отставкаға китеүен талап итә.

Үткән аҙналағы тағы бер яңылыҡ: Әзербайжан Исламға ҡаршы йүнәлеш тотҡан, сикләнгән һәм бер яҡлы ҡараштағы Европарламент менән хеҙмәттәшлекте өҙөргә ҡарар итте. Европарламенттың күрәләтә Әрмәнстан яҡлы булып, Әзербайжанға, кирегенсә, нигеҙһеҙ ғәйепләүҙәр ташлауы мөнәсәбәттәр ахырына һуңғы тамсы булды.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө предприятиеһы Сербияға 20,3 тонна бал һатҡан. Продукция 70 мискәгә тултырылған һәм фураға тейәлгән. Йыл башынан дуҫтарса мөнәсәбәттәге Балҡан иленә татлы ризыҡ өсөнсө тапҡыр оҙатыла, бөтәһе 81 тонна ебәрелгән. Уҙған йылда Сербияға 101,5 тонна бал һатылған. Шулай уҡ Ҡытайға 1,6 мең тонна етен оҙатылған - был 62 тимер юл вагоны. Әбйәлил һәм Хәйбулла районлдарынан Ҡаҙағстанға 1,2 мең тонна арпа ебәрелгән.

✓Өфөнөң Октябрь революцияһы урамы 19-сы һанлы йорттан алып Цюрупа урамы менән киҫешкән урынға тиклемге участкала 5 майҙан 21 июнгә тиклем ябылды. Унда төҙөкләндереү эштәре башлана - тарихи урамды реконструкциялау сиктәрендә күләмле проект тормошҡа ашырыла. Ябылған участканы 6-сы һанлы ҡала автобусы, Педагогия университеты - Цюрупа урамы - Пушкин урамы - Яңы түшәмә урамы схемаһы буйынса урап үтеп, артабан "Сәнғәт училищеһы" туҡталышынан ҡәҙимге маршрут буйынса китә.

✓Өфө урмансылығы биләмәһендә "Напитки Вместе" компанияһының Өфө филиалы хеҙмәткәрҙәре урман хужалығы инженерҙары менән берлектә 4 гектар майҙанда 16 000 ҡарағай үҫентеһе ултыртты. "Компанияның Өфө филиалы даими рәүештә ҡала экопроекттарында ҡатнаша. Мәҫәлән, быйыл яҙ хеҙмәткәрҙәр предприятие эргәһендәге скверҙы тәртипкә килтерҙе, ул ҡала хакимиәте менән берлектә төҙөкләндерелде", - ти компанияның Өфө филиалы башҡарма директоры Аделина Кузьмина.

✓Рәсәй Гидрометүҙәге Башҡортостанда яҙҙың һуңғы айына яҡынса фараз бирҙе. Метеорологтар мәғлүмәттәренә ярашлы, майҙа уртаса айлыҡ һауа температураһының норма тирәһендә (+13°С) булыуы көтөлә. Яуым-төшөм күләме лә нормаға ярашлы фаразлана. Беҙҙең төбәк өсөн был күрһәткес 35-55 миллиметр тәшкил итә.

✓Өфө ҡала советы депутаттары бер тауыштан скверға Мостай Кәрим исемен биреү тураһында ҡарар ҡабул итте. Был мәсьәлә комиссияларҙа тикшерелде. Өфө ҡала советы рәйесе Марат Вәсимов әйтеүенсә, ҡала халҡы был скверҙы күптән шулай тип атап йөрөтә. Хәҙер уға рәсми исем бирелде.

✓24 майҙан SCAT авиакомпанияһы эре туроператорҙар менән Өфөнән Актауға (Ҡаҙағстан) тура рейс асырға әҙерләнә. Был хаҡта "Өфө" халыҡ-ара аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Рейс йәкшәмбе көндәрендә Boeing-737-300 самолеттарында башҡарыла. Осоу ваҡыты - 2 сәғәт 05 минут.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Ата (әре, һоро) ҡорттар саҡмай, уларҙың ағыу эшләү биҙе лә, ҡаяуы (уғы ла тиҙәр) ла юҡ. Улар эшсе ҡорттарҙа һәм инә ҡортта ғына була. Ҡаяу - эшсе ҡорттарҙың ояны бур бөжәктәрҙән, ҡорттарҙан, дошмандарҙан һаҡлау ҡоралы.*



*ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ*



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Бал ҡорто ағыуы

Бал ҡорттары балауыҙ, кәрәҙ ҙә яһай, һеркә ташып һитә, һут килтереп бал да әҙерләй, прополис та, һөт тә етештерә, ағыу эшләп сығарып, ояларын бурҙарҙан да һаҡлай, уҫаллығын да таныта... Атайым ҡорт ҡарар алдынан тәүҙә кейәгә төтөн өрҙөрөр, шунан бәрмәй-һуҡмай ғына умарта ҡапҡасын асыр ине. "Ҡорттар шаҡ та шоҡ килеүҙе, тауышланыуҙы өнәмәй, улым, улай ҡылანһаң, яратмайҙар, сағалар", - ти. Умарта ябыуын асҡанда ла төтөн бирәбеҙ, бал ҡорттарының уҫаллашыуына юл ҡуймайбыҙ. Шунан ғына рамдарҙы берәм-берәм ҡалҡытып, күтәреп ҡарайбыҙ, бал булһа, ҡорттарҙы умарта эсенә ҡағып, төшмәй ҡалғандарын кишер һабағы менән һыпырып, балын һурҙыртырға өйгә кертәбеҙ. Шулай ҙа бәғзе бал ҡорттары ҡуҙғып, безелдәп, беҙҙең тирәләй оса, ояларын, ризыҡтарын һаҡларға тырыша, һөжүм итә. Өҫкә халат, салбар, башҡа күҙелдерек кейгәс, саға алмайҙар. Еңдәр асыҡ булһа, эскә лә инеп киткеләйҙәр. Атайым абайламай ҡортто тотһа, "ыһ" тип ҡуя, бармағын ҡорт саҡҡанын шунан ғына беләм. Ул өндәшмәй генә эшен дауам итә. Бал килеме ҡыҙыу мәлдә ҡорттар эҙләнеп йөрөмәй, әллә ни сағышмай. Ҡорт сағыуға ололар түҙә, бала-саға ғына зыу килеп илай.

Инәйем бал ҡорттары осҡан яҡҡа баҡса ҡоймаһына кер, әйбер элһә, атайым шунда уҡ алдыра. Бал ҡорттары елдә елберләп торған нәмәне яратмай, саға. Әйткәндәй, умартаны ла елһеҙ көндә ҡарау хәйерле. Йәйҙең йылы, тымыҡ, матур бер мәлендә йорт эсендә уйнап йөрөгән дүрт йәшлек Әлфирә һеңлем күҙ асып йомған арала юғалды ла ҡуйҙы. Хафаланып эҙләйем, эй эҙләйем. Юҡ... Баҡһам, ҡарағат баҡсаһы ҡапҡаһы асыҡ тора. Ни күрәм - ҡурсаҡтай ғына ҡыҙыҡай ҡарағат ышығындағы умарта эргәһенә сүгәләгән дә, кейә алдына осоп килеп ҡунған бал ҡорттарын нескә бармағы менән этәп, иҫе китеп ҡарап ултыра. Ҡорттар иһә үҙ шөғөлдәре менән мәшғүл.

Ҡорт айырып, геү килеп күктә өйөрөлөп осоп, инә ҡорт ҡунған урынға (ҡарағатҡа, миләшкә, муйылға, имән ағасҡа...) һарығас, япраҡ менән һыу бөркөп, күсте тынысландырып, төтөн биреп, ағас ҡашыҡ менән ҡаяҙға һоҫабыҙ. Ике-өс көн баҙҙа тотоп, күсте яңы умартаға, йәки әүәлге ояға ябабыҙ. Эш рәтен, көйөн белеп эш итһәң - сағылмайһың. Ғөмүмән, ҡорт ҡарау асылын, серҙәрен белеү мөһим. Белмәйһең икән, үҙеңә үпкәлә, бал ҡорттары хатта баҫтырып тороп кәрәгеңде бирәсәк, ағыуҙарының зәһәрен татытасаҡ. Әйтеүҙәренсә, ҡорт ағыуына айыу, терпе, йылан, баҡа, ташбаҡа бирешмәй. Минең һынауымса, мал-тыуарҙан ҡорт сағыуына айырыуса ат сыҙамай. Шуны ла төшөндөм: эргәңдә ҡорт осҡанда һелтәнергә, сәбәләнергә ярамай, үҙеңде тыныс тотоу яҡшы. Ғәмәлдә, бәғзе кешеләрҙән башҡа, һирәк-мирәк ҡорт сағыуы бары файҙаға ғына.

Ата (әре, һоро) ҡорттар саҡмай, уларҙың ағыу эшләү биҙе лә, ҡаяуы (уғы ла тиҙәр) ла юҡ. Улар эшсе ҡорттарҙа һәм инә ҡортта ғына була. Ҡаяу - эшсе ҡорттарҙың ояны бур бөжәктәрҙән, ҡорттарҙан, дошмандарҙан һаҡлау ҡоралы. Инә ҡортҡа ул ояла яңы хасил булған көнәркәшенән ҡотолоу һәм йомортҡа һалыу өсөн кәрәк. Ғөмүмән, бал ҡорто ағыуы - баҫышыусыларҙы, тиктәҫкә бал татырға ынтылыусыларҙы ҡыуыу, ҡурҡытыу сараһы. Умартасыларҙың һөйләүенсә, атайымдың да әйтеүенсә, бал ҡорто ағыуы "хәүеф сигналы" бирергә һәм хәүеф-хәтәрҙән һаҡланырға бөтә эшсе ҡорттарҙы әүҙемләштерергә һәләтле. Ағыуҙан бүленгән тиҙ таралыусы матдәнең еҫенән күстең ҡуҙғыуы, ярһыуы көсәйә. Тикшеренеүселәрҙең фараз итеүенсә, осоусы ҡатмарлы эфирҙар (амил, изоамил, этил адетаттары) ҡорт ғаиләһендә "хәүеф сигналы" реакцияһын тыуҙыра. Был - үҙе бер мөғжизә!

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 1-17-се һандарҙа).**

*МӘҢГЕ ХӘТЕРҘӘ*

# ТЫУҒАН-ҮҪКӘН ИЛДӘРЕМӘ...

## ҡайтыр микән һөйәгем...

**Тыуған ил. Тыуған ауыл. Тыуған өй. Ошо һүҙҙәрҙе ишетеү менән күңеле тулмаған кеше һирәктер. Айырыуса, сит яҡтарҙа күпмелер ваҡыт ғүмер иткәндәр ошо хаҡта йышыраҡ уйланыусан. Төптәнерәк фекерләп ҡараһаҡ, беҙ, барыбыҙ ҙа тиерлек, тыуған өйөбөҙҙән ситтә йәшәйбеҙ, тыуған ауылыбыҙҙан да алыҫтабыҙ. Баш ҡалала йә иһә республикабыҙҙың бүтән ҡасабаларында йәшәһәк тә.**

Башҡортостаныбыҙҙан ҡырҙағылар инде Тыуған илдән киткәнгә һанала. Рәсәй тип аталған ҙур илдең төрлө өлкәләрендә ҡасандыр оҙаҡ йылдар хәрби хеҙмәттә йөрөгән кеше булараҡ, бына шундай уйҙар гел генә башымда әйләнә. Миндәйҙәр, әлбиттә, меңәрләгән. Кемдер иленә ҡайтып йәшәргә тигән теләк менән ғүмере буйы янһа, икенселәр, "Исмаһам, ҡайтып үлергә яҙһа ине", тип кенә хыяллана. Башҡа халыҡтарҙы яҡшы белеп етмәйем, бына милләттәштәрем хаҡында бәғзе ваҡыт ана шундай тәрән генә уйҙарға бирелеп алам. Ҡайҙарҙа ғына олағып йөрөмәгән икән башҡортом, ниндәй генә ерҙә ятып ҡалмаған башҡорт башы. Тик бына ошо фактҡа иғтибар итәйек: башҡа ҡайһы берәүҙәр һымаҡ, сит ерҙәрҙе баҫып алыу менән дә булышмаған бит беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ! Беҙгә башҡаларҙың бер ҡарыш ере лә кәрәкмәй. Һәр саҡ үҙ еренең именлеге өсөн генә көрәшкән ҡартатайҙарыбыҙ, шулай уҡ күрше, туғандаш халыҡҡа, уның сиктәрен яттарҙан һаҡларға ла ярҙам иткән.



*Юнысбаев Исхаҡ Мөхәммәтйән улы (1939 йыл).*

Борон-борондан күпме яҡташ, милләттәштәребеҙ, туғандарыбыҙҙың Европа илдәрендә ятып ҡалғанын, әлбиттә, бер кем дә һанамаған... Француздарға ҡаршы һуғышып, Парижғаса барып еткән утыҙлап полк составында булған боронғо халҡыбыҙ улдарының күпмеһе сит тупраҡты үҙ иткәнен дә бер Аллаһ ҡына белә (Сағыштырыу өсөн: һәр бер полкта бер мең тирәһе һалдат булған хәҙерге мото-уҡсыларҙың утыҙлаған полкы яҡынса алты дивизияны тәшкил итә. Был - бик ҙур һан!). Беренсе бөтә донъя һуғышы, шулай уҡ башҡа яуҙарҙа ҡатнашҡандарҙы ҡуша башлаһаҡ, уларҙың иҫәп-хисабының осона бер ҡасан да сыға алмаҫ инек. Бөгөнгө көндә Махсус операцияла һәләк булған егеттәребеҙҙе тыуған ҡасабаһына алып ҡайтып ерләһәләр, һикһән бер йыл элек кенә тамамланған, тарихыбыҙҙа булып үткән иң ҙур яуҙарҙың береһе - Бөйөк Ватан һуғышында юғалған бихисап яҡташтарыбыҙҙың, туғандарыбыҙҙың береһен дә илгә алып ҡайтып ерләмәгәндәр бит. Рәсәйҙең Алыҫ Көнсығыш сиктәрен азат итеүҙә ҡатнашып, япон самурайҙарына ҡаршы һуғышта, утыҙынсы йылдар Себер тайгалары тупрағында башын һалған ата-бабаларыбыҙ ҙа әллә күпмелер әле...

Баймаҡ районы Мәмбәт ауылынан Юнысбаев Исхаҡ исемле олатайым (әсәйемдең бер туған ағаһы) һуғыштан үҙенең хаттарында йыш ҡына бәйеттәр яҙып ебәрер булған. Әсәйемдән отоп алған шул бәйеттәрҙең бер аҙы хәтеремдә ҡалған.

*Ҡулымдағы мылтығымды*
*блиндажға һөйәнем.*
*Тыуған-үҫкән илдәремә*
*ҡайтыр микән һөйәгем?..*

Ошо юлдарҙы һағышланмай уҡыусы бер кеше лә табылмаҫтыр. Ҡайһы илдәрҙә генә йөрөүенә ҡарамаҫтан, тиҫтә быуаттар Ислам динендә булған ҡартатайҙарыбыҙҙың һәммәһе иманына тоғро булып ҡалырға тырышҡан. Иленә ҡайтып үлергә яҙмаған хәлдә лә, тик мосолмандарса ғына ерләүҙәре хаҡында хыялланыуын уларҙың бәйеттәрендә сағылған уй-хистәре аша беләбеҙ:

*Аҡҡош оса, йөнө түҙа,*
*уның йөнөн кем йыйыр?..*
*Сит илдәрҙә вафат булһаң -*
*йыназ(а) уҡып кем ҡуйыр?..*

Был шиғыр юлдары ла әлеге Исхаҡ олатайымдың фронттан яҙып ебәргән хаттарынан. Түшенә Ҡыҙыл йондоҙ ордены тағып, Аллаһ Тәғәлә ихтыяры менән тыуған иленә һау-сәләмәт ҡайтып, ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, күпмелер ғүмер кисереү бәхете тейгән олатайыма...

Һикһән бер йыл үтеп китеүенә ҡарамаҫтан, Бөйөк Ватан һуғышы ҡорбандары хаҡындағы хәтирәләр күптәребеҙҙең йөрәк түрендә кисәгеләй генә һаҡланып ҡалған. Атайымдың бер туған ҡустыһы Һөйөндөков Заһитулла ағайым - Балтик диңгеҙе буйы илдәренең береһендә, ә ағаһы Хәкимйән олатайым Сталинградта (хәҙерге Волгоград) ята... Хәкимйән олатайымдың исеме "туғандар ҡәберлеге"ндә табылған булһа, Заһитулла ағайымдың ҡайҙа ерләнгәнен дә белмәйбеҙ.

Бер генә булһа ла туғанын һуғышта юғалтмаған берәй ғаилә бармы икән илебеҙҙә? Юҡтыр. Бына шулар хаҡында - ил именлеге өсөн ҡорбан булғандар тураһында әленән-әле иҫләп алыу кәрәк. Мосолман булып был донъянан киткән яҡындарыбыҙ, милләттәштәребеҙ өсөн, уларҙың тереклектә ҡылған гонаһтарын ярлыҡауын һорап, изге ғәмәлдәрен, ғибәҙәттәрен ҡабул итеүен Аллаһы Тәғәләнән һәр саҡ үтенеп, ана шул әруахтарыбыҙ исеменән мохтаждарға саҙаҡа биреп тороу ҡушылған беҙгә. Уларҙың барыһының да ғәмәл дәфтәре ябылған, шуға күрә уларға беҙ - әлегә иҫән булғандар ана шулай ғына ярҙам итә алабыҙ. Үҙебеҙ йәшәгән илебеҙҙә генә түгел, бөтә Ер шарында һәр саҡ тыныслыҡ булыуын, яуҙа йөрөгән егеттәребеҙҙең һау-сәләмәт тыуған илгә әйләнеп ҡайтыуын Раббыбыҙҙан ялбарып һорап торорға ла онотмайыҡ, ҡәҙерле туғандар.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТЫҢЛАЙҘАР ӘЛЕ...



**Ошо көндәрҙә, йәғни 7 майҙа, Радио һәм бөтөн элемтә тармаҡтары хеҙмәткәрҙәре көнө билдәләнде. Шул айҡанлы бер кәлимә генә һүҙ әйтмәксемен.**

Радио тиһәләр, ниңәлер, һәр саҡ Левитандың үҙенә генә хас көр тауыш менән "Говорит Москва..." тигәне ҡолаҡта сыңлап киткәндәй. Юҡ, мин Бөйөк Ватан һуғышы осоронда күҙҙәре өмөт менән ауылдағы берҙән-бер "тәрилкә"гә төбәлгән быуындың балаһының балаһы ғынамын, әммә ошо һүҙҙәр мәңгелеккә хәтерҙә уйылып ҡалған. Мәктәп йылдарында һәр иртән һәр өйгә мотлаҡ индерелгән радионөктәләрҙән яңғыраған Наилә Ғәләүетдинова, Ғалинур Бикбулатовтар тауышы ла күңелгә һеңгән. Һуңынан яйлап һәр өйҙә тиерлек транзисторҙар, магнитолалар күренде һәм улар шуныһы менән уңайлы булды - транзисторҙарҙы теләгән ереңә үҙең менән алып барып, теләгән йышлыҡтарға көйләп, рәхәтләнеп тыңларға мөмкин ине. Әлбиттә, батареялары ултырғанға тиклем. Хәҙерге үҫмерҙәр һәм йәштәрҙең күбеһе, моғайын, радио тигән һүҙҙе лә, аппаратты ла иҫкелек ҡалдығы кеүек кенә күрәләр. Сөнки хәҙер радиоканалдар сайтына инеп, кәрәкле тапшырыуынды он-лайн режимында тыңларға мөмкин. Шуға ла хәҙер һәр радиоканал, беҙҙе шунда-шунда тыңлайҙар, тип, бик күп географик нөктәләрҙе атай.

Һәм, ысынлап та, беҙҙең "Юлдаш" радиоһы бөгөн тыңлаусыларҙың һөйөүөн тулыһынса яулап алған, тип әйтһәк, бер ҙә хата булмаҫ: ул тәүлек әйләнәһенә йыр-моң менән ҡыуандыра, республика, ил, донъя яңылыҡтары менән таныштыра, һауа торошондағы үҙгәрештәрҙе ваҡытында еткереп тора. Теләүселәргә тура эфирға сығырға мөмкинлек биргән төрлө тапшырыуҙар менән бер рәттән, фәһемле һәм ғәмәлдә файҙа алырлыҡтары ла бар "Юлдаш"та. Тыуған төйәгенән ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙ өсөн үҙ телен ишетеүҙең берҙән-бер сығанағы булып тап "Юлдаш" тора тиергә лә булалыр. Сөнки уны республикабыҙҙа һәм Башҡортостан менән сиктәш төбәктәрҙә генә түгел, Ер шарының төрлө мөйөштәрендә - Америкала, Австралияла, Мысырҙа һәм башҡа ҡитғаларҙа - тыңлайҙар.

Шулай итеп, һүҙебеҙ Башҡортостан "Юлдаш" радиоһында эшләүселәргә баһалау ҙа, ҡотлау ҙа булып яңғыраһын.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

# ЕҢЕҮСЕ БУЛҒАНБЫҘ. ЕҢЕҮСЕ БУЛЫРБЫҘ...



**Башҡорт милләтен тарихтың уникаль феномены тип атарға була: беҙҙә үҙ ырыуыңды белеү һәм уға хас булған сифаттарҙы һаҡлау хәҙерге көндәргә тиклем күҙәтелә. Бынан һис бер ғәйеп эҙләү кәрәкмәҫ: ырыуыңды, тарихи сығышыңды онотмау - башҡортлоҡтоң бер аҫыл сағылышы ул.**

Милләттәрҙең килеп сығышы, уларҙың боронғо тарихы тураһында фекер йөрөткәндә этностың төп нигеҙен тәшкил иткән ниндәйҙер ырыу-ҡәбиләләрҙең бергә уҡмашыуы, берҙәм халыҡ булып тупланыуы өсөн билдәле бер тарихи сәбәптәр булыуын иҫәпкә алырға кәрәк. Әлбиттә, ырыуҙарҙың иң көслөһө, абруйлыһы үҙе тирәһенә башҡаларын йыя алырға тейеш. Халҡыбыҙҙы мин даръя менән сағыштырыр инем: инештәре булмаһа, даръя ла булмаҫ ине. Башҡорттоң эреле-ваҡлы ырыуҙары бер нисә тиҫтәгә етә, ә әүәлерәк 12 оло ырыу булғанлығы тураһында мәғлүмәт бар. Ә ниндәйҙер айырым ырыуҙың башҡорт тип аталыуы тураһында беҙ бер ни ҙә белмәйбеҙ. Миңә ҡалһа, ***башҡорт әлмисаҡтан Урал тауҙары тирәләй таралып йәшәгән ҡәүемдәрҙең уртаҡ атамаһы булып, тора-бара ошо исем аҫтында тирәйүндә иң ҡеүәтле, ҡыйыу, ғәййәр һәм ғорур халыҡ, тип танылып, үҙе тирәләй башҡортлоҡто үҙҙәре теләп ҡабул иткән төрки телле ырыу-ҡәбиләләрҙе туплаусы һәм, З. Вәлиди яҙғанса, һис бер йыһангиргә баш бирмәүсе, еңеүсе этнос булып формалашҡан.***

Башҡорттар иҫкә алынған ниндәй генә боронғо тарихи сығанаҡтарҙы алма, уларҙа беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың яугирлығы, бойондороҡһоҙлоғо, саялығы кеүек сифаттары һаналып, донъя тарихында ҡалдырған эҙҙәре ярылып ята. Миләди йыл иҫәбенә тиклемге быуаттарҙа барлыҡҡа килгән риүәйәттәрҙе үҙ эсенә алған Уғыҙ дастанында, башҡа төрки ҡәүемдәре менән бер рәттән, иң ҡеүәтлеләре иҫәбендә башҡорттар ҙа телгә алына. Беҙҙең эраға тиклем үк төрки донъяһында башҡорттар тап үҙенең исеме аҫтында еңелеү белмәҫ бер ҡәүем була тороп, ошо данлы тарихҡа күҙ йомоп ҡарауҙы мин башҡорт тарихын күрәләтә боҙоп, ямап-ялғап күрһәтеүгә тиңләр инем. Ошо фекерҙе раҫлар өсөн X быуат башындағы ғәрәп хәлифе Моҡтадир тарафынан Булғар ханы Алмушҡа ебәрелгән илселек сәркәтибе ибн Фаҙландың башҡорттар тураһында тарих биттәренә үҙ ҡулдары менән яҙып ҡалдырған мәғлүмәтен иҫкә төшөрөү ҙә етерлектер.

922 йылдың йәй башында Яғынды йылғаһына (хәҙерге Ҡаҙағстандағы Явинди йылғаһы) етеп килгән ғәрәп ҡаруаны башлыҡтары, йөҙәрләгән ҡоралллы һаҡсылары булыуына ҡарамаҫтан, ҡаты ҡурҡыуға төшә. Ибн Фаҙлан яҙыуынса, уларҙы алдан уҡ былай тип иҫкәртеп ҡуйғандар икән: "Башҡорттарҙан ҡурҡығыҙ. Улар төрк ҡәбиләләре араһында иң уҫалы, иң көслөһө. Инсан үлтереүҙе һис бер нәмәгә ҡуймау яғынан иң алда йөрөүселәрҙән". Ғәрәп уҡымышлыһының был һүҙҙәрен нисек аңларға һуң? Ҡаҙағстандағы Моғажар тауҙарынан Яйыҡ йылғаһы аша үтеп, Соҡ, Кижлеү йылғаларынан арыраҡ ятҡан Һамар башҡорттары йәйләүҙәренә тиклем илселек ул замандағы башҡорт ерҙәренең көньяҡ сиген ашанан-аша үтеп сығыуына ҡарамаҫтан, ҡаруанға бер башҡорт та һөжүм итмәгән бит. ***Теләһәләр, шундай бай ҡаруанды ҡулға төшөрөү башҡорттарға бер ни ҙә тормаҫ ине. Тимәк, улар бер ҙә юҡҡа яуызлыҡ ҡылырға теләмәгән.***

Еренә ҡорал тотоп килгән илбаҫарға ысынлап та башҡорттан да аяу булмағаны хаҡтан-хаҡтыр. Йәнә бына нәмә иҫкә төшә: ибн Фаҙлан менән аралашҡан башҡорттар, үҙҙәренең торналарҙы изгеләштереүе айҡанлы, уға "Сыңрау торна" риүәйәтен һөйләп ишеттерә. Бынан мең йылдан ашыу элегерәк һөйләнгән легенда беҙҙең көндәргә килеп еткәне менән һүҙмә-һүҙ тап килә. Лев Толстой дөрөҫ яҙған бит: башҡорттарҙан ысынлап та Геродот еҫе аңҡый! Был риүәйәт килеп сығышы буйынса бик боронғолор, сөнки ул ата-бабаларыбыҙҙың тотемистик ҡараштары формалашҡан дәүерҙең бер сағылышы. "Сыңрау торна" исемле боронғо көйөбөҙ - еңеүселәр гимны. Эйе, эйе, гимны! Ҡурайҙа "Сыңрау торна" көйөн тыңлаған ҡайһы башҡорттоң йөрәге тетрәнмәһен дә, күңеле аңлатып та булмаҫлыҡ хистәр менән тулышып, илаһи йыһан һулышын тоймаһын! Хоҙай үҙе ҡурсалаған еңелеү белмәҫ башҡорт рухына бағышланған мәңгелек һәйкәлдер ул ошо сихри көй.

***Эйе, башҡорт тарихы - еңеүсән рух антологияһы, һәм уны тарих биттәренән һис кем юйып ташлай алмаҫ.*** Заманында тарихи яҙмыш башҡорттарҙың бер өлөшөн Дунай ярҙарына, алыҫ Паннония ерҙәренә алып килә. Ошо хаҡта киң мәғлүмәтле олуғ тарихсыбыҙ З. Вәлиди бына нисек яҙған: "Мысыр авторҙары Франция короле Луи IX етәкселегендә тәре йөрөтөүселәрҙең Тунис һәм Аҡаяға (1269-1270 йылдар) яһаған бөйөк походынан христиан башҡорттарҙың ғәйрәте һәм батырлығы тураһында һөйләй. Ошо хаҡта мәғлүмәт биреүсе Каратай Хазинадар христиан башҡорттарҙың барыһы ла төркисә һөйләшеүен, тәре йөрөтөүселәр араһында иң яуыз һәм уҫал булыуын, үҙҙәренең етди дәүләт тәшкиләте юҡлығын, бай сауҙагәр венецияндар ҡаршыһында фәҡир, әммә, аяуһыҙ һуғышсанлығы менән танылған милләт булыуҙары арҡаһында, ҡайһы падишаһҡа буйһонһалар, шул падишаһтың еңеү ҡаҙанғанлығын, изге ер өсөн үлемде донъяла йәшәүгә ҡарағанда хәйерле һәм сауаплы күреүҙәрен аңлата".

Тағы ла бер тарихи факт. Монгол-татар яуы осоронда башҡорттарҙың ошо бәрелештәрҙә ҡатнашыуы хаҡында мәғлүмәт бик наҡыҫ. Монголдарҙың "Йәшерен тарих"ына ҡарағанда, башҡорттар Сыңғыҙ ханға итәғәт итеп, уның союздашы булып киткән. Һәр хәлдә лә, "Сыңғыҙнамә" дастанына ярашлы, башҡорт ырыуҙары бейҙәре үҙ биләмәләре менән идара итеү мөмкинлеген бөйөк хандың үҙ ҡулынан алған. Тәүге монгол баҫҡынсылары, 1223 йылда Калка йылғаһы буйында урыҫ ғәскәрҙәрен тар-мар итеп, илдәренә кире ҡайтып барғанда башҡорт һәм булғарҙарҙың берләштерелгән көстәре тарафынан ҡыйратылыуы тураһында ла мәғлүмәт бар. Нисек кенә булмаһын, башҡорттар Алтын Урҙала еңелеүсе сифатында түгел, ә билдәле бер мөхтәриәтле ҡәүем рәүешендә көн иткән. Тимәк, ғәйрәтле йыһангирҙар ҙа, башҡортто үҙенә тиң күреп, еңеүселәр рәтенә ҡуйған түгелме һуң?

**(Дауамы 9-сы биттә).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



**Сергей РУДЕНКО**

## БАШҠОРТТАР

### Йорт производствоһы

Төрлө материалдарҙы эшкәртеүгә килгәндә, башҡорттар минераль матдәләрҙе эшкәртеү менән һирәк булышҡан. Башҡорттарҙан көньяҡ-көнсығышта йәшәүсе күсмә халыҡтар ҙа, төньяҡ-көнсығышта көн күргән Обь йылғаһы бассейнының ултыраҡ тормош алып барыусылары ла был осорҙа күптән балсыҡ һауыт-һаба менән ҡулланмаған, сөнки уны тимер алыштырған. Ауыр, тиҙ ватылып барыусан балсыҡ һауыттар күсенеп йөрөү өсөн бигерәк уңайһыҙ булған. Күсмә йәшәү рәүеше алып барыусылар - тире йәки металл, ярым күсмә тормошта йәшәүсе һунарсылар, балыҡсылар туҙ һәм металл һауыт менән ҡулланған. Кама буйындағы ерле халыҡта балсыҡ һауыт һаҡланып ҡалған, ә башҡорттар ағас һауытҡа өҫтөнлөк биргән. Шулай итеп, башҡорттар үҙҙәре менән бер төбәктә йәшәүсе рус һәм фин-уғыр халыҡтарынан көнкүрештәрендә керамика ҡулланмауҙары менән айырылып торған.

Бына металл эшкәртеү эше башҡорттар араһында киң таралған. Рус дәүләтенә ҡушылғанға тиклем әллә күпме ваҡыт алда улар тимер уҡ башаҡтары, һөңгөләр, бысаҡ һәм башҡа кәрәк-яраҡтар, һуңғараҡ иһә ҡорал да яһаған. Уларҙың мәғдәнлек менән шөғөлләнеүен раҫлауҙы материалдар ҙа бар. XVIII быуаттың аҙағында И.Г. Георги башҡорттарҙың мәғдәнде таныуы, уны ер аҫтынан таба белеүе тураһында яҙа. Ошо уҡ автор башҡорттарҙың мәғдән табыу урындары булыуы һәм уларҙың баҡыр мәғдәнен хаҡы буйынса файҙалыраҡ булған заводтарға алып барып тапшырыуҙарын билдәләп китә. Екатерина II батшабикәгә яҙылған докладтарға ҡарағанда, Башҡортостанда мәғдән эше менән шөғөлләнеүсе башҡорт сәнәғәтселәре лә була, мәҫәлән, "Исмәғил Тасимов үҙенең иптәштәре менән көньяҡта урынлашҡан баҡыр иретеүсе заводтарҙы мәғдән менән тәьмин итә".

XVIII быуаттың тәүге яртыһында башҡорт ауылдарында тимерлектәр иҫәбе шул тиклем күбәйә, хатта 1735-1736 йылдарҙағы ихтилал мәлендә 1736 йылдың 11 февралендә сыҡҡан махсус указ менән башҡорттарға үҙ тимерлектәрен тотоу тыйыла. Һөҙөмтәлә, тимерселек эше һүрелә һәм XIX быуаттың аҙағына башҡорт тимерлектәрен осратыуы ауыр була.

Шул уҡ ваҡытта, башҡорттарҙа тимер эшкәртеү эше ни тиклем таралған һәм ниндәй юғарылыҡта тороуын беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған әйберҙәр күрһәтә. Ябай көнкүреш әйберҙәренән тыш, тимергә көмөш биҙәктәр һалып эшләнгән ҡорал, ат сбруйы осратырға булған. Боронғо ағас уҡ-һаҙаҡтарҙы, йәйәләрҙе оҫта ҡулдар семәрле тимер биҙәктәр менән биҙәгән. XX быуат башына бындай оҫталар бөтөнләй ҡалмаған.

**(Дауамы бар).**

# "ҠЫҘЫЛ АТЛЫЛАР" һулар һауа,

**"Һуғыш мәлендә гәзит- һулар һауа. Кешеләр гәзитте яҡын кешеләренән килгән хаттан алдараҡ аса. Хәҙер гәзит мотлаҡ һиңә төбәлгән хат. Һинең яҙмышың унда яҙылғанға буйһона", - тип яҙа билдәле памфлет оҫтаһы Илья Эренбург һуғыш йылдарында. Ысынлап та, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ҡәләм яҙыу ҡоралы ғына түгел, бәлки, һуғыш ҡоралына әйләнә. 1942 йылдың аҙағына һуғыш майҙанында 4 үҙәк, 13 фронт, 60 армия, 33 корпус, 600 дивизия һәм бригада гәзите сығарыла. Милли дивизиялар шулай уҡ үҙ гәзиттәрен булдыра, шулар иҫәбендә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының башҡорт телендә нәшер ителгән "Ҡыҙыл атлылар" гәзите лә була.**

## Хәрби шарттарҙа гәзит сығарыу

"Ҡыҙыл атлылар" гәзитенең яҙмышы кавалерия дивизияһының һуғыштағы тәүге этабы менән тығыҙ бәйләнгән. Билдәле булыуынса, Башҡорт АССР-ында 112-се һәм 113-сө һанлы ике кавалерия дивизияһы төҙөлә. 113-сө кавалерия дивизияһы составы башҡа хәрби берекмәләргә таратып бирелә, ә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы 1942 йылдың апрелендә юлға сыға.


Ҡыҙыл атлылар
Приказ хәрәкәттә
БОЕВОЙ УСТАВ ТАЛАП ИТӘ
ЯУАПЛЫЛЫК БУЛМАҒАС
ВАТАН ҺУҒЫШЫ ГЕРОЙҘАРЫНА ДАН!

Ошо көндән алып, билдәле булған бөйөк һәм трагик рейдҡа тиклем (рейдта дивизияның күп өлөшө ҡырыла һәм һуңынан уның составы СССР-ҙың төрлө төбәктәренән килгән кешеләр менән тулыландырыла, башҡорттар нисбәте кәмей), "Ҡыҙыл атлылар" гәзитендә башҡорт атлыларының легендар юлы яҡтыртыла. Редакция хеҙмәткәрҙәре ҡойоп ямғыр яуғанда ла, ел-дауыллы буран ҡоторғанда ла, сатлама һыуыҡта ла - ниндәй шарттарҙа ла гәзиттең һәр һанын үҙ ваҡытында фронттағы яугирҙарға еткереп тора. Гәзит һуғышсыларҙың рухын күтәрә. Уның биттәрендә яңынан-яңы мәғлүмәттәр, тыуған яҡтан килгән хаттар, һуғышсыларҙың ҡаһарманлыҡтары тураһындағы яҙмалар донъя күрә. Гәзит һуғышсыларҙы батырлыҡҡа, дошмандан үс алырға өндәй.

Хәрби шарттарҙа гәзит сығарыу еңелдән булмай. Ҡайһы саҡта мөхәррир русса килгән мәҡәләләрҙе наборщиктарға туранан-тура башҡортсаға тәржемә итеп йыйҙыра. Ҡағыҙ етешмәгән саҡтар ҙа була. Әммә ниндәй генә ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, мөхәррир Али Карнай гәзиттең бер һаны ла сыҡмай ҡалмаһын тип тырыша.

## Хөршиҙә Хәирова иҫтәлектәренән

"Хәтеремдә, Башҡорт атлы дивизияһы гәзитенең беренсе һанын 1942 йылдың апрелендә сығарғайныҡ. Тирә-яҡта тынлыҡ, һалдаттар шаяра-көлә, беҙгә эшләргә ҡамасаулаусы юҡ. Шуға күрәләр инде, ул саҡта минә дивизия гәзите типографияһында эшләү артабан да бына шулай еңел генә үҙ ыңғайына барыр төҫлө тойолғайны. Тәүге һанды сығарған ваҡытта уҡ мин йыйған һәр бер бәләкәй генә ҡурғаш хәрефтең немец фашистары йөрәгенә пуля булып ҡаҙалыуын теләнем. Артабан ошо теләк көсәйгәндән-көсәйә барҙы... Бына беҙ фронттың алғы һыҙығында, Елецк ҡалаһы эргәһендәге бер ауылда. Ҡала яна, тирә-яҡты һуғыш һөрөмө ҡаплап алған. Ошонда беҙ дивизия гәзитенең икенсе һанын сығарҙыҡ, һуғыш шарттарында гәзит сығарыуҙың ауырлыҡтарын мин тәүге тапҡыр ошонда татыным. Бынан һуң беҙ шундай ауырлыҡтар менән йөҙәрләгән гәзит һандары, листовкалар баҫтырҙыҡ. Бармаҡтарым, хәрефтәр сокоп, ҡанап бөтә торғайны. Эшебеҙ бик күп - үҙебеҙ йыйыбыҙ, үҙебеҙ уҡып төҙәтәбеҙ (корректор ҡаралмаған), гәзит баҫа торған машинаны ла йыш ҡына үҙебеҙгә әйләндерергә тура килә. Хатта ҡайһы саҡта гәзиттәрҙе полктарға үҙебеҙ алып барып тарата торғайныҡ. Төндә типографияла эшләүселәр алмашлап, ҡулға карабин тотоп, үҙ мөлкәтебеҙҙе һаҡлайбыҙ - поста торабыҙ. Ләкин беҙ, теш ҡыҫып, бирешмәҫкә, һыр бирмәҫкә тырыштыҡ. Шулай итмәй булмай. Беренсенән, ир-егеттәр ҡан ҡойоп һуғышҡанда, нинә беҙ, ҡыҙҙарбыҙ, тип, иҙерел төшөргә тейеш? Килешмәй. Икенсенән, үҙебеҙ сығарған гәзитте уҡығас, һуғышсыларҙың дәрте күтәрелеп, батырлыҡтары артып киткәнен күреү беҙгә яңынан-яңы көс өҫтәй ине.

Һуғыштар ҡыҙыу барған көндәрҙә гәзит сығарып өлгөрөп булмай. Шундай саҡтарҙа "Ҡыҙыл атлылар" гәзите редакцияһы иң мөһим хәбәрҙәр менән листовкалар баҫтыра. Редакция хеҙмәткәрҙәренә шәмде снаряд гильзаһынан эшләп алырға тура килә ине. Шинель итәгенән филтәлек бер-ике иле буҫтау ҡырҡып алып, шуны яндырып, тоноҡ яҡтылыҡта хәреф йыйып, корректура уҡып, листовкалар әҙерләйбеҙ. Гәзиттең наборщик ҡыҙҙарына көслө һуғыштар мәлендә санитар булып эшләргә лә тура килде. Улар төнө буйы эшләп арыуҙарын онотоп, һуғыш яланынан яралыларҙы алып сығып, яраларын бәйләргә тотона ине .

Бер тапҡыр алыҫ юлға сыҡҡанда гәзит сығарыу өсөн кәрәк булған типография материалдары - линейкалар, бабашкалар, башҡа пробельный материалдар ҡойолоп ҡалды. Билдәләнгән урынға барып еткәс, "Ҡыҙыл атлылар" хеҙмәткәрҙәре, нисек итеп гәзит сығарабыҙ инде, тип аптырап ҡалды. Бәхеткә күрә, разведчиктар яҡында ғына немецтарҙың типография тейәлгән бер машинаһы ҡыйралып ятҡанын килеп әйтә. Редакция хеҙмәткәрҙәре унда барып, байтаҡ техник материалдар йыйып алып ҡайтты. Гәзит ваҡытында сыҡты..."

## Али Карнай тураһында

"Ҡыҙыл атлылар" гәзитендә танылған өс әҙип эшләй. Мөхәррир вазифаһын күренекле яҙыусы Али Карнай (Имамғали Мөхәмәтдин улы Зөлҡәрнәев) башҡара. Редакцияның яуаплы сәркәтибе икенсе бер ҙур әҙип Шакир Насиров була. Шағир Әхтәм Ихсан штаттағы хәбәрсе сифатында алғы позиция менән редакция араһында йөрөп, гәзитте мәҡәләләр менән тәьмин итә. Яу яланынан репортаждар яҙа, һалдаттарҙың мәҡәләләрен ойоштора.

Али Карнай башҡорт яҙыусыларынан иң тәүгеләрҙән булып, һуғыштың тәүге көндәрендә үк фронтҡа китеү теләген белдерһә лә, уның теләге 1942 йылда ғына бойомға аша. Ошо йылдың мартында партияның Өлкә комитеты тәҡдиме буйынса ул яңы ойошторолған Башҡорт атлылар дивизияһы эргәһендә сыға башлаясаҡ "Ҡыҙыл атлылар" гәзитенә мөхәррир итеп тәғәйенләнә. Али Карнайға бер юлы яуаплы ла, үҙенсәлекле лә вазифа йөкмәтелә. Ул Бөйөк Ватан һуғышы фронтында сыҡҡан берҙән-бер башҡорт телендәге гәзиттең мөхәррире була. Яҙыусы-журналист фашистарға ҡаршы ҡылысҡа-ҡылыс килеп һуғышҡан совет һалдаттары менән яҡындан аралаша. Улар менән бер блиндажда йәшәй, тиһәң дә була. Фронт гәзитендә "Ҡыҙылармеец Х. Мансуров" имзаһы менән ул ошо ҡыйыу көрәшселәр тураһында һөйләүсе тиҫтәнән артыҡ бәләкәй-бәләкәй очерк-һүрәтләмәләр, хикәйәләр урынлаштыра. Күләм яғынан ҙур булмаһалар ҙа, оҫта яҙыусы-журналист тарафынан яҙылған был мәҡәләләр фронт ысынбарлығының күп яғын яҡтырта. Яҙыусы Ватан һуғышы күренештәрен һүрәтләмә-мәҡәләләр аша һүрәтләү менән генә сикләнеп ҡалмай. Ул башҡорт дивизияһының һуғышсан юлын, уның батырлыҡтарын ныҡлап өйрәнә. Ҙурыраҡ әҫәр өсөн материалдар туплай. Бәрелеш булған урындарҙы характерлаған һәм ваҡиғаларҙы тәфсирләп яҙған көндәлек алып бара. Ләкин алыҫ Дон далаларында, әҫкә пуля ямғыры һибеп торған шарттарҙа, башҡорт телендә гәзит сығарыуҙы ойоштороу, уны һуғышсыларҙы яңынан-яңы еңеүҙәргә рухландырырҙай йәнле материалдар менән тәьмин итеү яҙыусының бөтә иғтибарын ялмай. Тәүҙәрәк уға ҙурыраҡ әҫәр яҙырға форсат та ҡалмай. Был хаҡта Карнай үҙе лә: "Яҙып булмай! Ваҡыт юҡ. Ә яҙаһы нәмәләр страшно күп! Шулай ҙа тырышып ҡарарға иҫәп юҡ түгел", - тип яҙа Баязит Бикбайға ебәргән хатында.

"Ҡыҙыл атлылар"ҙың ҡыйыу мөхәррире тураһында иҫтәлегендә Кирәй Мәргән түбәндәгеләрҙе яҙа: "Али Карнай һәр ваҡыт һалдаттар, һуғышсан командирҙар, политработниктар араһында булды. Уның полевой сумкаһы һәр төрлө иҫтәлектәр, һуғышсан эпизодтарҙы сағылдырған яҙмалар менән тулы була торғайны. Көн һайын тиерлек ул яңы ҡуйын дәфтәре башлай. Уны

# ГӘЗИТЕ...
## тылдан килгән хат һымаҡ була

тултырғас, серияға бүлеп, номерлап, тәртипкә килтерә лә, йыйып, Өфөгә туғандарына ебәрә: "Материал ҡайта торһон әле. Бында юғалыуы бар бит. Иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, берәй роман һымаҡ нәмә яҙырға тура килер бит инде, ә? Кем яҙырға тейеш уны? Беҙ бит!" - тип яҙа ул. Али Карнайға тыуған иленә әйләнеп ҡайтырға насип булмай. 1943 йылдың 16 июнендә ул яу ҡырында һәләк була. Яҙырға хыялланған роман-эпопеяһы ла яҙылмай ҡала. Уның ебәргән көндәлектәренең бер өлөшө тыуған иленә килеп етмәй, килеп еткәндәре бөгөнгә көндәрҙә архивтарҙа һаҡлана".

### Мәҡәләләр тематикаһы

Гәзит биттәрендәге нәфрәт һәм үс менән һуғарылған мәҡәләләр башҡорт атлыларын дошманды аямайынса көрәшергә саҡыра. Уралдан йыраҡта булһа ла, яугирҙың үҙ өйөн, ауылын, туғандарын яҡлап һуғышыуын билдәләй. Сөнки һуғыш яланында шәхси яҙмыш юҡ. Ил яҙмышы - һинең шәхси яҙмышың, ғаиләң яҙмышы.

"Беҙҙең менән халыҡ" мәҡәләһендә гәзит яугирға: "Алдыбыҙҙа һуғыш яланы ята. Дошман алыҫ түгел. Ул беҙҙең һөйөклө аталарыбыҙҙың һәм әсәләребеҙҙең, йөрәк өләшебеҙ булған ҡатындарыбыҙҙың һәм балаларыбыҙҙың хоҡуҡтарын тапарға, сал Уралды, алтын Башҡортостанды, бай илебеҙҙе баҫып алып, бәхетле тормошобоҙҙо емерергә теләй... Башҡорт воины! Һин Украина яландарында алыҫтағы ҡатыныңды, балаңды, атаңды, әсәңде яҡлап һуғышаһың. Улар һинең гвардеец исемеңә тап төшөрмәүҙе талап итә", - тип өндәшә. Немецты үлтерергә, көрәштә арыҫлан булырға, рубежды ныҡ тоторға, дошманды үткәрмәҫкә, бер аҙым да артҡа сигенмәҫкә саҡыра. "Уҡы, өйрән, ҡоралыңды отличноға үҙләштер", тигән көңәштәр бирә һәм "Еңеү беҙҙең яҡта булыр!" тип һуғышсыны тынысландыра.

Агитацион йүнәлеш һәр мәҡәләлә тойомлана. Ошо мәҡәләнең аҙағында автор уҡыусыһына: "... Үҙеңдең Ватаның, халҡың өсөн көрәшеү - был ҙур дан. Ә Ватаның, халҡың өсөн һөйөклө полководец, Верховный Главнокомандующий, Маршал иптәш Сталин етәкселегендә көрәшеү - был икеләтә дан, был воин өсөн бәхет. Был бөйөк данға достойн булайыҡ, гвардеец иптәштәр!" - тип өндәшә. Нәфрәт һәм үс алыу тойғоһо менән һуғарылған мәҡәләләр гәзиттең һәр һанында осрай һәм төп өлөштө биләй.

Агитация маҡсатында әҙәби әҫәрҙәр ҙә ҡулланыла. Улар башлыса был гәзиттең мөхәррире Али Карнайҙың бәләкәй әҫәрҙәре була. "Нисә фрицте үлтерҙең?" исемле хикәйәһендә Али Карнай икенсе эшелонда, йәғни фронт һыҙығынан арттараҡ хеҙмәт итеүсе һалдаттың Уралдан, ҡатынынан хат алыуын һүрәтләй. Ә унда шундай һүҙҙәр бар: "Нисә фрицте үлтерҙең? Шуны айырып яҙ. Балалар ҙа ҡыҙыҡһыналар, һинең батырлығыңды белеп, беҙ шатланырбыҙ, ғорурланырбыҙ..." Ошо хат һалдаттың тыныслығын юғалта. Ул военкомға барып, үҙен тиҙерәк алғы һыҙыҡҡа ебәреүҙәрен үтенә. Уның бында ла мөһим эш эшләүе, барыбер фронтта булыуы тураһында һөйләүҙәренә ҡаршы: "Шулай ҙа, әгәр бер нисә фрицте үҙ ҡулым менән дөмөктөрмәһәм, нисек итеп мин Ватан һуғышында ҡатнаштым, тип һөйләрмен?" - ти ул. Был бәләкәй генә әҫәрҙә яҡын кешеһенән килгән хаттың һалдатҡа ни тиклем ныҡ тәьҫир итеүе һүрәтләнә.

Ә.Кирәйҙең (Кирәй Мәргәндең) "Мыйыҡ" хикәйәһе ике дуҫ боец тураһында. Бикбулатов менән Ишбулатов дуҫ ҡына түгел, улар бер райондан, бер колхоздан, ә һуғышҡа килгәс, икеһе лә олоғайып китә. Бер юлы мыйыҡ ебәрәләр. Шулай бер саҡ блиндажда ултырғанда Ишбулатов иптәшенең мыйығына ҡарап тороп: "Шул мыйығыңдың бер бөртөгө өсөн күпме һорайһың?" - тип һорап ҡуя. Иптәше: "Ана шул ҡаршыла йөрөгән немецтарҙың береһен бер атыуҙа үлтерә алһаң, ошо затлы мыйыҡтың бер бөртөгөн йолҡоп алыу шәрәфенә ирешә алырһың", - тип яуап бирә. Шулай итеп, улар араһында ярыш башланып китә. Бер нисә көндән уларҙың мыйыҡтары шул хәтле һирәгәйә, йәмһеҙ булып тормаһын, тип, икеһе лә уны ҡырып ташлай...

Кавалерия дивизияһы булғас, гәзит биттәренән ат темаһы ла ситтә ҡалмай. Атты тәрбиәләүгә, ашатыуға, яуға әҙерләүгә арналған мәҡәләләргә ҙур урын бирелә. Аттарын насар ҡарағандар тәнҡитләнә. Айырым һандарҙа был темаға берәр бит урын бүленеүе мәғлүмәттең ни тиклем мөһим булыуы тураһында һөйләй. Хатта "Һин аҡһаҡ булһаң да һуғышҡа бар, һинең атыңдың дүрт аяғы бар бит", тигән башҡорт халыҡ мәҡәле килтерелә 1943 йылдың 4 июль һанында. "Ат - боевой ҡорал" мәҡәләһендә гвардия кесе лейтенанты Сергеев взводының ат ҡарау буйынса беренсе урын алып килеүе тураһында һөйләнә. Был взводта атҡа һәр кем боевой ҡорал итеп ҡарай. Ат ҡараусы Ҡолгәрәевтың "Яҡшы аттан башҡа яҡшы кавалерия юҡ", тигән һүҙҙәре взводтың көрәш девизы булып тора.

### Агитация нисек атҡарыла?

Агитация эшенә айырым урын бирелә. Ошо темаға арналған махсус һандар ҙа сыға. Уларҙа агитация нисек алып барылырға тейешлеге хаҡында һүҙ бара. "Агитация яугирҙың психологияһына һәм шартҡа ҡарап, аныҡ, йөкмәткеле, идея яғынан тотанаҡлы булырға тейеш. Агитаторҙар был бурыстарын һәйбәт үтәһен өсөн уларға ярҙам кәрәк. Семинарҙарҙа, политработниктың агитатор менән осрашыуы мәлендә уға бөтә мәсьәләләрҙе аңлатырға, теге йәки был хәлдә дөрөҫ баһаларға өйрәтергә кәрәк... Беҙ агитаторҙың үҙ бурыстарына яуап бирә алыуына, үҙенең ялҡынлы большевистик һүҙе менән боецтарҙы иптәш Сталиндың бойороғон үтәүгә, немец-фашист бандиттарын йәһәтерәк юҡ итеүгә мобилизациялауына өлгәшергә тейешбеҙ", - тиелә гәзит мәҡәләһендә.

Гәзит бойороҡтарҙың үтәлеүенә ҙур әһәмиәт бирә. 1943 йылдың май айында Сталиндың 195-се бойороғо сыҡҡандан һуң гәзит биттәрендә уның үтәлеше төп урынды ала. Һәр частән бойороҡтоң үтәлеше тураһында хәбәрҙәр килә. Бойороҡто теүәл үтәүселәр өлгө итеп ҡуйыла, уға битараф ҡарағандар ҡаты тәнҡитләнә. Гәзиттең 150-се һанындағы баш мәҡәләлә "Хәҙерге ваҡытта бойороҡто унда ҡуйылған мәсьәләләр буйынса айырым рәүештә ентекләп өйрәнеү бара. Бойороҡто ныҡлап өйрәнергә, яҡшы хәтерҙә ҡалдырырға кәрәк. Ләкин, иң мөһиме, уны ғәмәли яҡтан тормошҡа ашыра башлау", - тип яҙыла. Мәҡәлә аҙағында һалдат алдында торған бурыс аңлатыла: ул, уҡырға, өйрәнергә, бойороҡто тормошҡа ашырырға, тип яңғырай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҡыҙыл атлылар" гәзите редакцияһы коллективы һуғыш ваҡытында Башҡорт атлылары кеүек үк данлыҡлы юл үтә. Дивизияның фронтҡа ебәрелгән көнөнән алып, дивизияның 1943 йылда эшләйәсәк бөйөк рейдына тиклем, гәзит дивизияны тоғро юлдаш булып оҙата бара. Дивизия рейдҡа ингәс, редакция бүленеп ҡала. Ошо осор эсендә Полевая почта 35710 адресы буйынса урынлашҡан редакция дивизияның данлыҡлы юлында төп агитатор, рухи ҡорал булып ҡала. Али Карнай, Шакир Насиров, Әхтәм Ихсан кеүек әҙиптәр, Хөршиҙә Хәирова кеүек йыйыусы ҡыҙҙар гәзиттең һәр һанын ваҡытында сығарыуҙы тәьмин итә. Уларҙың тырышлығы менән күпселеге башҡорттарҙан торған милли дивизия тыуған телендә гәзит уҡыу бәхетенә өлгәшә.**

**Азамат САЛАУАТОВ**
**әҙерләне.**

---

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

# ЕҢЕҮСЕ БУЛҒАНБЫҘ. ЕҢЕҮСЕ БУЛЫРБЫҘ...

**(Башы 7-се биттә).**

***Әгәр халҡыбыҙҙа еңеүселек ҡото булмаһа, лидерлыҡ тәрбиәләнмәһә, йыраҡ-йыраҡ илдәргә барып көн иткән башҡорттар араһынан күренекле хәрби етәкселәр, дәүләт эшмәкәрҙәре сыҡмаҫ ине.*** XIII быуат аҙағында Иранда илһанизар хеҙмәтендә булған башҡорт генералы Ғазан хан бөйөк әмирҙәрҙән һаналһа, XIV быуатта Олжайту хан ғәскәрендә Джучи улусынан килгән башҡорт генералы Сыраҡан Башҡурт телгә алына. Мысырҙа һәм Сирияла мәмлүктәр хеҙмәтендә булған башҡорттарҙан Насретдин әл-Насыри әл-Башҡурди, Сәнжәр әб-Рукны әл-Башҡурди, Алаитдин Башҡурд әл-Насыри, Ғилметдин Башҡурд әл-Насыри, Ғилметдин әл-Башҡурди Беркундар бөйөк әмирҙәр булып танылған. 1322 йылда Дамаскта вафат булған әмир һәм ғалим Насретдин әл-Насыри ғәрәпсә гүзәл шиғырҙар һөйләп дан ҡаҙанһа, мәмлүктәрҙең падишаһы Каратай Хазинадар Ғилметдин әл-Башҡурдиҙы ғәйәт аҡыллы дәүләт кешеһе, ғалим һәм әхлаҡи йәһәттән өлгө булырлыҡ шәхес, тип баһалай.

Башҡорттарҙың Рәсәй батшалығына саҡырылып, үҙ теләктәре менән урыҫ хакимлығын таныуы ата-бабаларыбыҙҙың көсһөҙлөгө йә ҡурҡаҡлығы һөҙөмтәһе түгелдәр. Был тарихи ваҡиға ул замандағы Рәсәй хакимдарының башҡорттарҙың рухи ныҡлығын, бойондороҡһоҙлоҡҡа ынтылышын иҫәпкә алыуын күрһәтә. Рәсәй батшалары ла тәүҙәрәк башҡорттар менән яулашып түгел, ә килешеп йәшәү юлын һайлаған, сөнки артыҡ күп һанлы булмаған ошо ҡәүемдең яугирлыҡ кеүәте менән улар кенәзлектәр осоронан уҡ таныш булған бит.

Ысынлап та, башҡорттарҙың түләгән яһағынан бигерәк, айырым ғәскәр ойоштороулоҡ хәрби көс рәүешендә Рәсәйгә ҡиммәт булғаны раҫ. Тиҫтәләгән башҡорт полктары Рәсәй империяһы армияһының тос ҡына йөҙроғо булып, уның дошмандары өсөн хәүеф-хәтәр сығанағына әүерелгән. Болалы XVII быуат башында башҡорт һыбайлылары, Минин һәм Пожарский ғәскәрҙәре менән бергәләп, Мәскәүҙе поляк хакимлығынан азат итһә, уларҙың ейәндәре 1813 йылда Париж урамдарынан еңеүселәр сифатында уҙған. XVII-XVIII быуаттарҙағы халыҡ ихтилалдары башҡорттоң һис тә баҫылырға, кәмһетелергә, еңелеү халәтенә төшөргә теләмәгән рухының сағыу балҡышы ул.

XX быуат башындағы инҡилабта әүҙем ҡатнашҡан халҡыбыҙ милли мөхтәриәткә өлгәшеү ниәтендә яңы рухи күтәрелеш кисереп, ҡанлы граждандар һуғышы йылдарында иҫ китмәле ҡаһарманлыҡ өлгөләрен күрһәтте. Башҡортостандың Рәсәй Федерацияһы составында автономия ялауы башҡорт рухының еңеүе рәүешендә ҡабул ителде. 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышын да башҡорт халҡы өсөн етди һынау тотоу, тип баһаларға була. Был ҡырылыш осоронда халҡыбыҙ, күп юғалтыуҙар кисерһә лә, фашизмды еңеүгә булған ышаныс, рух ныҡлығы фронтта ла, тылда ла тиңһеҙ сыҙамлылыҡ һәм ҡаһарманлыҡ өлгөләре булып көүҙәләнде. Дошман менән батырҙарса алышҡан тиҫтәләрсә мең башҡорт яугиры СССР орден һәм миҙалдарына лайыҡ булды, 261 яҡташыбыҙға Советтар Союзы Геройы тигән иң юғары исем бирелде.

Халҡыбыҙ тарихы - быуаттар дауамында барған көрәш тарихы. Ул - азатлыҡ өсөн, киләсәк быуындарҙың имен-аман көн итә алыуы өсөн барған көрәш. Азат рухлы ҡәүемдәр генә заманаларҙың ҡанлы бәрелеш-ҡыйралыштарына, сәйәси катастрофаларына бирешмәйенсә, ҙур юғалтыуҙарға дусар ителһә лә, үҙаллы милләт булып йәшәүен дауам итә. Кешелек өсөн һуғыштарҙан да ҡәһәрлерәк башҡа нәмә юҡтыр ул. Әммә, нисек кенә парадоксаль булмаһын, яуҙарҙа, һуғыштарҙа ҡатнашыу - халыҡ рухын нығытыусы фактор. Байтаҡ йылдар дауамында тыныс хеҙмәт шарттарында йәшәгән халҡыбыҙ күп ҡорбандар килтерелеп яуланған Бөйөк Еңеү рухын быуындан-быуынға тапшыра килде. Үҙенең ерҙә йәшәүенең мәғәнәһен тапмай, ҡыҫҡа ғүмерен маҡсатһыҙ һәм файҙаһыҙ уҙғарған әҙәм балаһы үҙен-үҙе юғалтһа, кәсле, еңеүсән рухынан яҙған йәмғиәттең дә киләсәге ҡараңғылыр. ***Еңеүсе - хужа, азат һәм хоҡуҡлы кеше булһа, еңелеүсенең ҡолға әйләнеүен тормош ҡануны итеп ҡабул итеү зарур.*** Тап ошо ҡанунды яҡшы үҙләштергәне һәм ҡуллана белгәне өсөн башҡорт атлы халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ данлы тарихы бар. Киләсәгебеҙ ҙә өмөтлө булһын, тиһәк, йәш быуындарҙы еңеүселәр рухында тәрбиәләү фарыз.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

***✓ Бейектә, йыһанда - тыныс, ер йөҙөндә генә - үлемесле ҡыйралыш. Иң юғары аҡыл көсөнә эйә йән эйәләре, ниңә ваҡыты-ваҡыты менән әҙәм аҡтығына, асыуы үә үсе күп дейеү пәрейҙәренә әйләнә, яһиллыҡ ҡыла икән?..***

**Бөйөк Еңеүгә - 81 йыл**

*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# ҺУҒЫШ ӨЙӨРМӘҺЕНДӘ



*Хикәйә*

Арып-талып бер украин ауылына, артиллерия батареялары урынлашҡан ергә етеп туҡтанылар. Дәүләтбай артиллеристарҙан ярты буханка икмәк һорап алды, уларға алмашҡа сөгөлдөрмө, бәрәңгеме бирҙе. Тамаҡ ялғап, асығыуҙарын баҫтылар. Саман йорт һымаҡ балсыҡтан һалынған, һалам менән ябылған өйҙәр ышығында ултырып, серем итеп тә алдылар. Кисен аш, йөҙәр грамм араҡы өләштеләр. Бығаса араҡының нимә икәнен белмәгәс, ауыҙға ла алмағас, Фуат та, Дәүләтбай ҙа эсмәне. Һуңынан да татып та ҡараманылар. Шул саҡ ер һелкенгәндәй, донъя ҡуҙғалғандай булды, тирә-йүнде ҡып-ҡыҙыл ут солғаны. Кемдер яр һалып ҡысҡырҙы:

- Ахырызаман!.. Тамуҡ!..

Ултырған урындарынан ергә йығылдылар, котелоктарҙан аштар түгелде. Мәхшәр баҫылғас, ҡурҡып, алан-йолан ҡаранып ҡына баштарын ҡалҡыттылар. Бөтәһе лә иҫән, бер кем дә йәһәннәмгә осмаған. Бары уларҙан йөҙ метр арттараҡ "Катюша"лар залп биргән икән. Фронтҡа барып кереүҙәре, тәүге һынау үтеүҙәре бына шулай мәрәкәле булды.

Иртәгәһенә барыһын да сафтарға теҙҙеләр. Офицерҙар батальондар туплай башланы. Дәүләтбайҙы ла сығарып баҫтырҙылар. Фуат иптәшемдән айырылам инде тип, аптырап тора ине, тәүәккәл дуҫы ымлап, уны үҙ янына саҡырҙы. Йылт итеп йәнәшенә килеп торғас, афарин, айырылманыҡ, йәнә бергәбеҙ тигәндәй, ҡулын ҡыҫты.

Нығытмалар һыҙатына килгәндә лә, төндә лә атыштар тынманы. Уларға ҡарап, дошман туҡтауһыҙ ата төҫлө тойолдо. Шуға ла баштарын ҡалҡытып ҡарарға ла ҡыймаһылар. Артиллериянан утҡа тотҡандан һуң, немецтар танктары һәм йәйәүле ғәскәре менән һөжүм яһаны. Оборона тотҡан, бығаса күпте күргән яугирҙар һис кенә лә ҡаушап ҡалманы: туптарҙан снаряд осорҙо, пулеметтарҙан пуля сәсте. Уң фланг һөҙәк ине. Ошо юҫыҡта "аждаһа" оборонаны өҙҙө, әммә йән аямай ҡаршы тороуҙан алға бара алмай туҡтап ҡалды. Бер кем дә артҡа сигенмәне.

Рота командиры Фуат менән Дәүләтбайҙы 82 миллиметрлы миномет расчетына тәүҙә мина ташыусы, шунан яһаусы итеп тәғәйенләне. Артабан, баллистиканы өйрәтеп, тоҫҡаусы итеп ҡуйҙылар. Егеттәр аңламағандарын нығышып һорашып, яңы һөнәрҙәрен бөтә нескәлектәренә тиклем төшөнөргә, үҙҙәрен мәргән итеп танытырға тырышты.

Һалдаттар туҡтауһыҙ окоптар, траншеялар ҡаҙый. Мөмкин ҡәҙәр ергә нығыраҡ ҡаҙынып, снаряд, мина ярсыҡтарынан, пуляларҙан ышыҡланалар. Тик Украина ерендә ҡышын окоп ҡаҙыу ғәйәт ауыр. Кәйлә, көрәк ни тиклем осло, үткер булмаһын, ҡара көрән үҙле балсыҡ шәкәр киҫәгенән дә ҙурыраҡ сыҡмай, соҡой торғас, үҙенден йәнең сыға яҙа. Өҫтәүенә, ҡар ҡатыш ямғыр яуа. Һыуланған шинелдәр туңа, кейгеһеҙ була. Шуға ла ололар икешәр шинель йөрөтә.

Декабрь аҙағында һәм яңы йыл башында һөжүм итешеүҙәр булманы. Шулай ҙа алыҫҡа атыусы туптар көнөнә бер сәғәткә яҡын атыша. Беҙҙең "Ильюша"лар килеп сығып, дошман өҫтөнә бомбалар бырағыта. Төндәрен күкте ракеталар балҡыта, яҡтыртҡыс пулялар үлем көҫәп оса. Оборонала торһалар ҙа, юҡ-юҡта яраланыусылар, үлеүселәр булып тора. Ай ярым эсендә ротала һигеҙ кеше яраланды, өс кеше үлде. Йәл, бик йәл, әлбиттә, тик торғанда яуҙаштарҙың баҡыйлыҡҡа китеүе.

Яу серен яу белмәҫ, тигәндәй, ваҡыты һуҡмайынса, һөжүм көнөн, сәғәтен белмәнеләр. Ниһайәт, әйттеләр. Башланды алыш, көс һынаш. Тәүге биш көндә ул һөҙөмтәле генә барһа ла, артабан аҡрынайҙы. Йылытты. Юлдар - йәбешеп торған ҡуйы батҡаҡ, аяҡтарҙы һурып алып булмай. Һуғыш кәрәк-яраҡтары, артиллерия артта ҡалды. Фуат менән Дәүләтбай, лысма тиргә төшөп, миналарҙы йөкмәп ташый.

Таң алдынан батальон тимер юл станцияһына яҡынлашты. Йөҙләгән немец автомашинаһы батҡаҡлы юлдан үтә алмай, хәрәкәтһеҙ ҡалған. "Әһә, баттығыҙмы, дуңғыҙҙар! Беҙҙең юлдар батҡыл ул", - тип, Дәүләтбай ныҡ ҡоһорланды. Китте атыш. Фуат дүрт "пәрей"ҙе дөмөктөрҙө. Әммә... Әммә... "Атыш кәрәкме, алыш кәрәкме?" - тип үкергән дейеүҙәй, бронепоезд пәйҙә булып, ут бөрктө. Уның артынса, төтөн шаршауы ҡуйып, немецтар атакаға ташланды. Роталар сигенде. Был хәлдән ғәрләнеп, командирҙар бойроҡ артынан бойроҡ яуҙырҙы:

- Вперед! Только вперед!
- За Сталина!
- За Родину!..

Һынылыш яһап, айбарланған егеттәр Ингулец йылғаһы буйындағы район үҙәгенә яҡынлашты. Көтмәгәндә немец танкылары һырттан килеп сығып, дәһшәтле, һәләкәтле ялҡынға күмде. Шаулы көс, утлы өйөрмә донъяның аҫтын өҫкә әйләндерҙе. Кемдер һуңғы һулышын ала, кемдер инрәй... Юғалтыу хәтһеҙ. Ярай әле ҡыҙыл йондоҙло танктар күренде...

Икенсе көндө туҙҙырылған полк ҡайтанан бәрелешкә әҙер хәлгә килтерелде. Ул, тереһыу йотҡандай, ғәййәрләнеп, район үҙәген штурм менән алды. Фуат, минометтан тура тоҫҡап атып, тиҫтәнән ашыу "ғифрит"те тамуҡҡа оҙатты.

"Катюша"лар дошман өҫтөндә ҡойон уйната. Алыша-тартыша торғас, дошмандың ҡаршы тороусанлығы кәмене. Ул сигенә, беҙҙең ғәскәр эҙәрлекләй. Ауыл ситендә автоматтарҙан атышҡан мәлдә Фуаттың һул яҡ ҡабырғаһын нәмәлер өтөп алды. Ҡараһа, фуфайкаһының мамығы теткеләнгән, ҡан килә. Санитарҙар санбатҡа алып китте. Шартлағыс пуля ҡабырғаһын һындырған. Айҙан ашыу дауаланып ятты. Арыу булғас, үҙенең хәрби часын ҡыуып етте. Инде 1944 йылдың май айы тыуғайны.

Полк Днестр йылғаһының уң яғында Тирасполь ҡалаһынан төньяҡтағы һуғыш ҡырында урын биләне. Был урын - бик мөһим, Румынияға һикереү өсөн трамплин! Шуға ла немецтар бер-нисә дивизия, танктар менән ябырыла, самолеттары боҙло ямғырҙай бомба ҡоя. Тәүге көндө дүрт тапҡыр ырғыуҙары таш ҡаяға бәрелеп ҡаҡсыған һымаҡ булды. Иртәгәһенә тағы ла ҙурыраҡ өйөр ажарланып өҫкә ташланды һәм алдағы линияны өҙөп, ажғырып, нығытмаларға яҡынлашты. Беҙҙең минометтарҙың тауышы һис тынманы, Фуат осорған миналар ҙа һыҙғырышып барып шартлап, өйөрҙө һирәкләндерҙе. Әммә ҡалғандары ныҡ ҡына яҡынайғас, миномет менән эш итеү ҡыйынлашты. Фуат яраланған сержанттың танкка ата торған ҡоралын йәһәт кенә алып, тоҫҡап, немецтың үҙйөрөшлө орудиеһын сафтан сығарҙы. Икенселәр пушкаларҙан снарядтар тондорҙо. Танктары яна. Яна!.. Яйы сығып, Фуат, Дәүләтбай, йәнә күрше расчеттар тура прицел менән мина яуҙырырға тотондо. Немецтар сыҙаманы, сигенде. Быны күреп, полк атакаға күтәрелде. Минометсылар ҙа "ур-ра-а!" ҡысҡырып, алға ынтылды. Әүәлге позиция яуланды. Днестр плацдармында немецтарҙың ун бишләгән ҡоторонҡо һөжүмен кире ҡағыуҙа күрһәткән ҡыйыулығы өсөн Фуат Әсәҙуллин III дәрәжә Дан ордены менән наградланды.

Бер ниндәй алыш, атыш, йән ҡыйыш булмағандай, ҡояш йылмая, арҡаларҙы йылыта. Бейектә, йыһанда - тыныс, ер йөҙөндә генә - һәләкәтле, үлемесле ҡыйралыш. Иң юғары аҡыл көсөнә эйә йән эйәләре, әҙәми зат, ниңә ваҡыты-ваҡыты менән әҙәм аҡтығына, асыуы үә үсе күп дейеү пәрейҙәренә әйләнә, яһиллыҡ ҡыла икән?.. 18 май көндө йәшел сирәмгә ятып, сәстәре уҡмашҡан, өҫтәре ҡатҡан ике дуҫ, Фуат менән Дәүләтбай, ошо хаҡта уйланды. Төнөн уларҙы алмаштырырға яңы көс килде.

Тылға сығып, ләззәтләнеп мунса керҙеләр, май япрағы менән танһыҡтары ҡанғанса сабындылар, йәйге кейемдәр кейҙеләр. Июнь уртаһына хәтлем ял иттеләр, туйғанса йоҡланылар, өйҙәренә оҙон-оҙон хаттар яҙҙылар. Был көндәр йәннәттәй тойолдо. Шундай рәхәт, шундай хөрриәт!.. Күкрәктәренә орден-миҙалдар таҡҡан һөләктәй егеттәрен күрһә, ауылдарының иң һылыу ҡыҙҙары ла һушын юйыр ине, моғайын. Хыялда булһа ла тыуған яҡтарына ҡайтып урағандай хис иттеләр үҙҙәрен...

Тәндәренә ҡөҙрәт ҡайтарған, һулыштарын иркенәйткән Молдавияның тылсымлы төйәге менән 16 июндә хушлаштылар. Вагондарға тейәнеп, дүрт көн барып, Төньяҡ Украинаның Сарны станцияһына килеп төштөләр. Бында, урманлы-һаҙлыҡлы ерҙәрҙә һуғыш алымдарын өйрәтеп, тактик күнегеүҙәр үткәрҙеләр.

Илбаҫар һис кенә лә тынмай, һаман ҡаныға, һөжүм итә. Йыртҡыс өйөрө, ҡан көҫәп, үҙ ил-йортон һаҡлаусыларҙы ҡорбан ҡылырға, ботарлап ташларға ырғыла. Уның бер төркөмөн аңдып, Фуат, Дәүләтбайҙар Көнбайыш Буг йүнәлешендә ҡурғауылда тора. Йәмле июль көндәрендә самолеттары шыҡыйып, тапҡыр уларға ҡарай осоп килә лә ҡап-ҡара бомбалар ырғыта. Бомба тоноҡ ҡына һыҙғырып өҫтөнә килгәндә бик ҡурҡыныс. Береһе яҡында ярылып, Фуатты ла балсыҡ менән күмде. Шөкөр, иҫән әле, иҫән...

Әммә әжәл, эҙләнеп, эргәлә генә йөрөй. Фуаттың алдында баҫып торған һалдат, һушынан яҙғандай, ҡапыл уға һөйәлде. Ҡараһа, осраҡлы пуля нәҡ маңлайына тейгән. Бахыр, шундуҡ йән бирҙе. Бындай хәлдәр һирәкләп булып тора, һөжүмгә бармаған саҡта ла һалдаттар ҡазаға тарый. Әллә һаҡһыҙлыҡ, әллә күрәсәк... Арала төрлө әҙәм бар: аҡыллыһы, аҡылһыҙы, һармағы; ауырлыҡҡа, яраланыуға сыҙағаны, сыҙамағаны... Берәүҙең беләгенең йомшаҡ ерен саҡ ҡына ярсыҡ һыйпап үтте. Шуға ла ах та ух килеп, тылға тайҙы. Шул уҡ сәғәттә ярсыҡ Фуаттың да уң ботоноң итен өҙөп алды. Ләкин ул түҙҙе, яуҙаштарынан айырылманы. Ә яраһы егерме көн тирәһендә төҙәлде. Ауылда йыраусылар: "Һөйләгән дә ғәләм, ай, һөйләһен, тәҡдир етмәй, әҙәм үләме?" - тип йырлай торғайны. Фуат быға ышанып та ҡуя, ниндәйҙер илаһи көс уны ҡурсалай кеүек.

Дошман менән уларҙы айырып торған аралағы ерҙә үҫеп ултырған бәрәңге күренә. Иҫке ауыҙға яңы аш, тигәндәй, шул тиклем яңы бәрәңге ашағыһы килә. Взвод командирынан рөхсәт һорап, Фуат шул тирәгә шыуышты. Йөҙтүбән килеш биҙрәнән ашыу бәрәңге йыйҙы ла тоҡҡа, емерелеп бөткән траншеяға төштө. Алдында немец снарядының ялтырап торған еҙ гильзаһы ята. Капсюле юҡ, өс тишеге генә йылтырап тора. Ниндәй шайтан ҡотортҡандыр, соҡорҙан сыға биреп, гильзаны күҙенә ҡуйып, өс тишек аша немецтар яғын күҙәтә башланы. Ҡулында күҙәтеү торбаһы, йәнәһе. Шул саҡ тегеләр снаряд яуҙырырға тотонмаһынмы! Тирә-йүндә өҙлөкһөҙ шартлау, соҡолмаған урын ҡалмағандыр... Күрәһең, гильза ҡояшта ялтырап, немецтар уны күҙәтеүсе тип уйлаған. Ҡырҡ килограмлыҡ снаряд өҫтөнә,

✓ ***Ошо мәхшәр ҡойон эсендә Фуат менән Дәүләтбай ҡалай ғына иҫән ҡалғандыр, ҡотолғоһоҙ үлемдән уларҙы кем ярлыҡағандыр, ниндәй мөғжизә аралағандыр?.. Ике дуҫ күҙҙәренән йәш атылып, ҡосаҡлашты.***



йәиһә йәнәшенә төшөп шартлаһа, иптәштәре һөйәк-һаяҡтарын да тапмаҫ, ошо соҡор уның ҡәбере булыр ине. Ҡомһоу тупраҡҡа күмелгән көйө байтаҡ ятты Фуат. Бәрәңге ҡайғыһы китте. Ергә һырығып, һырышып, аҡрын ғына, шым ғына үҙенекеләргә табан шылышты. Траншеяға килеп төшкәс, яуҙаштары уның тере ҡалыуына бер килке ышанмай торҙо:

- Анауындай ҡойондан һуң һине вафаттыр тип, амин әйткәйнек инде.

- Тыуғанда уҡ бәхетең менән тыуғанһыңдыр ул?

- Бер үҙеңә немецтың күпме снарядын әрәм иттерҙең, афарин!..

Иртән иртүк, ике сәғәтлек артиллерия утынан һуң, дивизия ғәййәрләнеп, ташҡын һымаҡ күтәрелеп, дошмандың оборона һыҙығын өҙҙө. Бындай көслө ынтылышты көтмәгән немецтар тәртипһеҙ рәүештә сигенде. Ике көндән Көнбайыш Буг йылғаһын кисеп сыҡтылар. Фуатҡа ул Байрамғол эргәһенән аҡҡан Яйыҡ ҙурлыҡтай ғына тойолдо. Ҡыҙыл ғәскәр, ужар сәсеп, көн һайын утыҙ-ҡырҡ, бөтәһе дүрт йөҙ саҡырым юл үтеп, Вислаға яҡынлашты. Инде еңеү ҡомары менән сәмләнгәндәрҙе ошо ҙур йылғаның арьяғына үткәрмәү өсөн немецтар теше-тырнағы менән ҡаршылашты. Шуға ҡарамаҫтан, автоматсылар Висла аша сығып, плацдарм яулауға һәм уны киңәйтеүгә, хатта бер ауылды алыуға өлгәште. Төнөн башҡалар, миномётсылар ҙа Висланың арғы ярына аяҡ баҫып, теге ауылға барып урынлашты.

Ауыл бик ҙур, оҙонса, халҡы ҡасып бөткән. Эргәлә генә түбәһе ялпаҡ яланғас тау. Таң менән ошо тау башынан һис көтмәгәндә әллә нисә батарея, эре калибрлы пулемет тура төҙәп атырға тотондо. Шул уҡ мәлдә унлап танк өйҙәрҙе емереп-ҡырып, донъя туҙҙырып, кисәңге батырҙарға ябырылды. Улар ауылды ҡалдырып, Висла яғына сигенде. Ығы-зығы, шау-шыу... Йылғаға ҡарай бер генә юл, ә ике яғы ла - һөрөлгән ер. Ямғырҙан һуң тубыҡтан батҡаҡ, батҡыл. Ғәскәр юлға килеп тығылды. Пулеметтар пуля яуҙыра, танктар терәп тиерлек ата, "Мессер"ҙар түбәндән генә осоп, бомба ҡоя. Юл мәйет менән ҡапланды. Ыңғырашыу, ялбарыу, ҡысҡырыу, аҡырыу, ирешеү, һүгенеү - бөтәһе бергә буталды. Ошолай булалыр, күрәһең, йәндәрҙе язалай торған йәһәннәм, тамуҡ уты... Вислаға етергә бернисә йөҙ метр ҡалғас, штаб офицерҙары, полковниктар, майорҙар сигенеүселәрҙе пистолеттарын тоҫҡап, өҫкә атып, яман аҡырып ҡаршыланы:

- Ни шагу назад!

- Стоять насмерть!..

Әмәл юҡ, боролдолар, ҡаршы торҙолар. Авиация, артиллерия ярҙамға ашыҡты, миналар һыҙғырып осто. Һөжүм баҫыла төштө. Дивизияның яртыһынан күбеһе ҡырылған. Фуаттарҙың ротаһындағы илле бер һалдаттың ун бере генә иҫән ҡалған. Йән тетрәткес юғалтыу!.. Был инде һиҙгерлекте юйған, тик еңеүгә генә ышанған штаб офицерҙарының, дивизия һәм полк разведкаларының үҙ бурыстарын аныҡ үтәмәүенең үтә лә аяныслы күренеше ине. Ошо мәхшәр ҡойон эсендә Фуат менән Дәүләтбай ҡалай ғына иҫән ҡалғандыр, ҡотолғоһоҙ үлемдән уларҙы кем ярлыҡағандыр, ниндәй мөғжизә аралағандыр?.. Ике дуҫ иҫтәре китеп, телһеҙ ҡалып, бер-береһенә ҡарап торҙо ла, күҙҙәренән йәш атылып, ҡосаҡлашты.

Висла өҫтөндә "ҡоҙғон"дар ҡомһоҙланып үлем көҫәһә лә, йәнфарман алышҡа ашығыусылар түңкәрелһәләр, батһалар ҙа, дивизия яңы көс менән тулыланды. Асыуҙары ҡабарған яугирҙарҙың нәфрәттәре "аждаһа"ларға алмас ҡылыс булып ялтланы, уҡ булып ҡаҙалды, плацдарм фронт буйынса егерме, тәрәнлеккә унун биш саҡырымға киңәйҙе, ҙурайҙы. Әлбиттә, утта көйрәп, баштары өҙөлә барған "дейеү" тағы ла яһилланды. Китте ҡәһәр орош. Ғазраилдар ҡыҫырыҡларға маташып, көнөнә дүртәр-бишәр тапҡыр өҫкә ташлана, мәгәр ҡанһырап ауа, сигенә. Фуат: "Дәүләтбай, мәрхүм яуҙаштарҙың ҡонон алайыҡ, рухтарын ризалайыҡ!" - тип, мина осорҙо ла осорҙо, яуыздарҙы байтаҡ ҡына ҡорбан ҡылды. Күп юғалтыуҙарға дусар булып, ниһайәт, тындылар.

Ҡыҙыл ғәскәр башҡаса алға ынтылмаһын өсөн немецтар нығытмалар, ДОТ, ДЗОТ-тар ҡорҙо, танктар үтә алмаҫлыҡ йырындар ҡаҙыны, һөжүм юлдарын сәнскеле тимер сыбыҡ менән сырманы, миналар менән тултырҙы, ашамлыҡтарҙы һәм эсәр һыуҙарҙы ағыуланы... Үҙҙәренсә Висланан Одерғаса араны үтә алмаҫлыҡ рубежға әйләндерҙе. Мәгәр дошмандың аҫтыртынлығын, мәкерлеген төшөнөп, юғары командование нығытылған һыҙатты тәүҙә авиация, артиллерия, "Катюша"лар, танктар менән йырҙыртып, ғәйәт дәһшәтле көс ҡулланды.

Фуат, Дәүләтбай инде мең ҡыйынлыҡты бергә кисергән яуҙаштары менән Польшаның Варта йылғаһы буйына етеп туҡтаны. Егерме һигеҙенсе февраль көнө уны аша сығыу бурысы ҡуйылды. Был урында Вартаның ярҙары бейек, текә, ағымы көслө. Өҫтәүенә, кисәк-кисәк туҡтауһыҙ боҙ аға. Бер ярҙан икенсе ярға арҡан тартылды. Ялғашҡа ултырып, арҡанға тотоноп, Фуат та йөҙә башланы. Йөгө лә етерлек: карабин, патрондар, ун туғыҙ килограмлыҡ көбәк, ике тәүлеклек аҙыҡ. Иҫкәрмәҫтән боҙ киҫәге килеп һуғылды ла ялғашты ағыҙып алып китте. Бәхетенә күрә, арҡан ҡултыҡ аҫтына тура килде. Уға аҫылынып, муйынынан һыуға сумып тороп ҡалды. Һыу үтә лә һыуыҡ, үҙәккә үтә. Бер ҡулын арҡан буйлап шыуҙырып, алға ынтылды. Икенсе ҡулда көбәк, уны һис кенә лә төшөрөп ебәрергә ярамай. Хәле бөтһә лә үҙен дарманландырҙы: "Бирешмә, егет, бирешмә, һине атаң-инәң, йәшәлмәгән тормош көтә!" Аҙапланып, ғазапланып, көс-хәл менән ярға сыҡты. Взвод командиры Бедритский: "Молодец!" - тип, флягаһынан ауыҙына спирт ҡойҙо. Сәсәй-сәсәй эсте, әммә донъя шундуҡ томаланып, уның күҙ алдынан юғалды. Дәүләтбай: "Он раньше никогда водку не пил, поэтому сразу опьянел", - тип, яуҙаштары менән уны поляктарҙың мамыҡ юрғанына урап, йөн яҫтығын түшәп, повозкаға һалды. Бер нәмә белмәй күпме ятҡандыр, дуҫының: "Фуат! Фуат!" - тигәненә уянып, бер нәмә булмағандай килеп торҙо.

Одер йылғаһына яҡынлашҡан һайын немецтар йәнәсыҡҡа ҡаршылыҡ күрһәтте, үлем күбәйҙе. Яу зәһәрен татыған ир-уҙамандар, үс-нәфрәттәре йәшендәй йәшнәп, ҡан дарьяһы түккән дошманға ҡан ялатты. Висла арьяғындағы ҡырылышты күреп ҡәһәтләнгән танкистар тимер табанлы "айғыр"ҙарында дошман тулы ауылға йәнфарман барып кергән. Тегеләр иҫ-һуш алырға ла өлгөрмәгән. Ауылдың тирә-яғы, тыҡрыҡтар тулы ҡара ҡандары йәйелгән немец һалдаттарының мәйеттәре. Бигерәк тә оло урам уларҙың кәүҙәләре - ит йәймәләре менән түшәлгән. Ҡурҡыныс та, ифрат имәнес тә ине был күренеш. Фуат менән Дәүләтбай уҡшып, оҙаҡ ҡына күңелдәре болғанып йөрөнө. Вислала уларҙың дивизияһының ҡот осҡос ҡырылыу ҡоно ҡайтарылғайны.

Яйыҡ йорт егеттәре лә, Одерҙы кисеп, фельдмаршал Паулюстың имениеһына барып сыҡты. Кирбестән һалынған ат һарайының ҙур ҡапҡаһын асып кереп, уңайлыраҡ урын һайлап урынлаштылар. Артиллерия һәм танктар йылғаның теге яғынан сығып өлгөрмәгәндән файҙаланып, немец танктары текәп атырға тотондо. Көн уртаһында береһе бик яҡын килеп, һарайҙың стенаһын иләк кеүек тишкеләп бөттө. Бер снарядболванка эргәлә торған ике аттың арт һандарын, янбаштарын туҙҙыра һуғып, икенсе стенаны тишеп сығып осто. Ат ҡунып, егеп, һыбай йөрөп үҫкән егеттәр, арғымаҡтарҙы үҙҙәренекеләй йәлләп, болоҡһоно. Ниндәй һомғол малҡайҙар әрәм... Улар ҙа - һуғыш ҡорбаны!

Көс өҫтәлеп, билгән майҙан ҙурайҙы. Әйтеүҙәренсә, Берлинға тиклем һикһән саҡырым ғына ара ҡалған. Көнө-төнө атыш, һөжүм. Америка, Бөйөк Британия ғәскәрҙәре немецтарҙың баш ҡалаһына яҡынлаша, тиҙәр. Оло һалдаттар, бигерәк тә офицерҙар борсола:

- Беҙ нишләйбеҙ, егеттәр?.. Һуғыштыҡ, һуғыштыҡ та, инде Берлинды уларға бирәбеҙме?

Ниһайәт, егерме дүрт сәғәт эсендә Берлинға инеү тураһында Жуковтың ҡәтғи бойороғо булды. Ун алтынсы апрель төнөндә, әйтерһең, бөтә ергә ут ҡапты. Бихисап прожектор, автомашина, танк фаралары немецтарҙың күҙен сағылдырҙы. Һауала ут өйөрмәһе хасил итеп, У-2 самолеттары фосфор ҡоя. Туптар, "Катюша"лар атыуы, танктар, самолеттар геүләүе бергә ҡушылып, ҡолаҡ тондорғос тауыш барлыҡҡа килде, донъя тамуҡҡа әйләнгәндәй тойолдо. Туптарҙан, миномёттарҙан атыу өсөн команда биреү юҡ, булһа ла тауыш ишетелмәй. Шуға ла Фуат менән Дәүләтбай ҙа, башҡа миномётсылар ҙа билдәле ваҡыттан һуң, прицелды үҙгәртә биреп һәм зарядты арттыра барып, ата. Шау-шыуҙа мина атылып сыҡтымы-юҡмы икәнен белеү өсөн терәк плитаға баҫып торалар. Атылһа, плитала тибеү, һелкенеү һиҙелә. Фуат ярты сәғәт эсендә немец өҫтөнә илле мина осорҙо.

Ут яуһа ла, һуңғы көндәре еткәнен тойһа ла, дошман йәнтәслим ҡаршы тора. Көндөҙ ни бары биш-алты саҡрым ғына һынылыш яһалды. Ергә ҡаҙынған танктарҙы, ДОТтарҙы юҡ итеүе, ай-һай, ауыр. Әммә ҡаһарманлыҡ артынан ҡаһарманлыҡ ҡылып, алға ынтылыу дауам итте. Ун етенсе апрелдә танк корпусы фронтты өҙөп, Зеелов ҡалҡыулығына сыҡты. Кискә табан ул ҡыйыу йөрәкле яуҙаштар ҡарамағында ине.

Һуғыш аҙағы яҡынлашҡанғамы, рота командиры капитан Хлопочков һис тә һаҡланмай башланы. Минән пуля ла, мина ла яҙа оса, тип уйлаймы икән?.. Атаһы Фуатҡа һуғышта һаҡланыу зарурлығы, минминләнмәү тураһында ҡат-ҡат туҡығайны. Тәкәбберҙәр, именлеген уйламағандар тик торғанда ла бер һүҙ әйтә алмай йән биргеләй. Фуат ярты метр тәрәнлектәге окопта ултыра, ә капитан өс-дүрт метр ситтәрәк үҫкән ағас эргәһендә биноклдән күҙәтә ине. Шул саҡ немец танкыһынан атылған снаряд нәҡ башына тейҙе, баш һөйәге ярсығы сәсрәп, Фуаттың окобына килеп төштө. Йөрәге дерелдәп, ныҡ аптырап, күҙҙәре шарҙай булып, егет инәһе кеүек көрһөнөп: "Эй, Илаһым!" - тип ҡуйҙы.

Хлопочков урынына шул уҡ көндө рота командиры итеп өлкән лейтенантты тәғәйенләнеләр. Госпиталдән генә сыҡҡан, бик йәш, төҫкә матур, тап-таҙа кейемдә. Капитандың мәғәнәһеҙ үлеменән ул да һабаҡ алманы. Немец яғына аяғөҫтө ҡарап торғанында, ҙур снаряд ярсығы уның да башын өҙҙө. Бығаса ҡаты яраланған һалдаттарҙың ыңғырашыуы, үлә алмай ятып ҡысҡырыуҙары, атып китеүҙе үтенеүҙәре инде күнегелгән ғәҙәти хәл кеүек ине. Мәгәр ниңәлер ике офицерҙың үтә лә аянұслы үлеме гелән Фуаттың күҙ алдына килде лә торҙо. Шул саҡ, күңелен шом биләп, был йән ҡыйғыс һуғыш ҡотто алырлыҡ яман дәһшәт, пәрей, өрәк, нәғәләт-ләғнәт, ун ике башлы дейеү һымаҡ күренде.

Йөрәк әрнеткес юғалтыуҙар менән хәрәкәтләнеп, бер урындан икенсе урынға күсеп, ялан ергә килеп сыҡтылар. Алда, һул яҡтараҡ урманлыҡ күренә. Көндөҙгө ун икеләр тирәһендә йөҙләгән немец һалдаты окоптарынан сығып, урманға ҡарай шыла башланы. Фуат йәһәт кенә алыҫлыҡты тоҫмаллап, бер ниндәй команда көтмәйенсә, тегеләрҙе ярсыҡлы миналар менән ҡойондорорға кереште. Йәнәштәге расчеттар ҙа ут асты. Өрәк заттары урманға инеп йәшеренергә өлгөрмәне, егермеләгәне, ҡулдарын күтәреп, әсир төштө. Саялығы, тәүәккәллеге, мәргәнлеге өсөн Фуаттың II дәрәжә Дан орденына лайыҡ икәнен әйттеләр.

Яуҙаштары менән бергә, йән аямай алыша-алыша, Берлин урамдарына ла барып керҙеләр. Танктар алдан тегеләй ҙә былай туҡтауһыҙ атып бара. Немецтар тәҙрәләрҙән дә, өй баштарынан да пуля яуҙыра. Танктарға ҡаршы фаустпатрон ҡулланып, кумулятив граната елгәрәләр. Уларҙан ҡотолоу өсөн имен урында туҡтап, тимер рәшәткәләр йәбештереп, дошманды өңөндә дөмбәҫләнеләр. Урамдар кирбес, бетон ватыҡтары, мәйеттәр менән тулды. Һәр йорт тиерлек яулап алынды. Ҡарт-ҡоро, бала-саға подвалдарға йәшеренгән, йәш ҡатын-ҡыҙ американдар яғына ҡасҡан. Беренсе майҙан икенсе майға ҡараған төндө атыштар кәмегәндән кәмене һәм иртәнге ундарҙа бөтөнләй тынды.

- Берлин бирелде, немец баш һалды! Урра! Урра! - тигән шатлыҡлы ауаздар яңғыраны.

Ҡыуаныстан ҡосаҡлаштылар, ҡотлаштылар, хатта ки илаштылар... Оло һалдаттар, офицерҙар спирт эсеп иҫерҙе. Әсир төшкән Берлин гарнизоны автоматсылар ҡамауында кискә ҡәҙәр урамдар буйлап ағылды. Иртәгәһенә Фуат менән Дәүләтбай Рейхстагты ҡарарға барҙы. Башында ҡыҙыл байраҡ елберҙәүе күңелдәрендә әйтеп бирә алмаҫлыҡ ғорурлыҡ уятты. Йыраҡ та түгел ҙур ресторан булған. Үтә затлы йыһаздар ҡыйралған, иҙән тулы көҙгө, люстра ватыҡтары... Рейхстаг тирәләй йөрөнөләр. Бер урында немецтарҙың яуһуғыш ҡоралдары тау кеүек өйөлөп ята.

- Уларҙы ҡабаттан ил баҫыу, талау, кеше үлтереү өсөн ҡулланмаһындар инде, Хоҙайым үҙе һаҡлаһын инде, - тине Дәүләтбай етдиләнеп.

- Эйе, дуҫҡайым, мәрхәмәтһеҙ ҙә, аяуһыҙ ҙа, фажиғәле лә шул һуғыш, ҡан ҡойош! Күпме әҙәм түҙмәҫлек ғазап сиктек, михнәт йотtоҡ, йән тетрәткес яфа, көсөргәнеш кисерҙек.

- Үлем сигендә, үлемдән бер аҙымда торҙоҡ, түҙҙек, сыҙаныҡ...

- Шулай... Беҙ, ике ябай ауыл егете, ватандаштарыбыҙ менән илбаҫарҙарҙы илебеҙҙән ҡыуҙыҡ, Берлин тиклем Берлинды алдыҡ, күкрәктәребеҙгә орден-миҙалдар таҡтыҡ!..

Ике дуҫ, әлдә бергә булдыҡ, айырылышманыҡ, тип бер үк мәлдә уйлап, ҡолас йәйеп ҡосаҡлашты. Ун ете ай һуғыш өйөрмәһендә йөрөп, иҫән ҡалыуҙарына, Еңеү көнөн күреү бәхетенә ирешеүҙәренә сикһеҙ шат ине улар...

**(Аҙағы. Башы 17-се һанда).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҒҮМЕР ОҘАЙЛЫҒЫНА...
## холҡоң да йоғонто яһай

■ Кешенең ғүмер оҙайлығы төрлө факторҙарға: йәшәү рәүешенә, генетикаға, йәрәхәттәр һәм ауырыуҙарға бәйле. Ғалимдарҙың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, кемдең күпме йәшәүенә уның холҡо ла йоғонто яһай. Даими күңел төшөнкөлөгө, стрестар йәшәү оҙайлығын ҡыҫҡартыусы төп сәбәптәр булып тора. Һөҙөмтәһенә йоғонто яһай алмаған хәл-ваҡиғалар тураһында бөтөнләй борсолорға ярамай. Эргә-тирәләге кешеләргә ышанмау, уларға шикләнеп ҡарау, уларҙы хөкөм итергә ынтылыу ҙа кешенең ғүмерен ҡыҫҡарта. Белгестәр раҫлауынса, асыҡ кешеләр оҙағыраҡ йәшәй.

■ Йәшәү кимәле юғары булған илдәрҙә йәшәүселәрҙең ғүмер оҙайлығы күберәк, һаулығы ла яҡшыраҡ, әммә иң бай илдең дә оло кешеләре хәтер насарайыуы менән яфалана. Ғалимдар раҫлауынса, өлкән йәштә лә теүәл аҡыллы булып ҡалыуға кешенең йәмғиәттәге статусы, байлығы түгел, ә даими рәүештә уйлау, фекерләү талап ителгән эштә эшләүе ярҙам итә. Эше стандарт булмаған мәсьәләләрҙе хәл итеү менән бәйле булғандар хаҡлы ялға сыҡҡас та юғары менталь статусын һаҡлап ҡала. Колорадо университеты ғалимдары төрлө һөнәр эйәләрен тикшергән, уларҙың барыһы ла бер генә эш урынында оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән. "Аҡыллы" һөнәр эйәләре иң яҡшы һөҙөмтә күрһәткән. Баш мейеһе ҡартайыуын әкренәйткән һөнәрҙәр исемлегендә тәүге биш урынды авиадиспетчерҙар, табиптар, финанс аналитиктары, ғалимдар, педагогтар биләй.

■ Белгестәр хәтер насарайыуының йәштәрҙә лә йыш осрай башлауы хәүефен белдерә. Бигерәк тә 30 йәште үткәндәрҙә был күҙәтелә. Башлыса кешеләр өйҙән сығып киткәндә ойоҡ кейергә, күҙлек йәки асҡыс алырға, дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһен, ПИН-кодтарҙы онота. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы кешеләрҙең 6 проценты йәш кеше була. Шулай уҡ күптәр хәтер насарайыуынан, уны юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡып йәшәй икән. Уларҙың һаны 31 процентты тәшкил иткән.

■ Эрл Грей - бергамотлы сәй йөрәк һәм ҡан тамырҙары эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай. Ғалимдар билдәләүенсә, ул холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бергамоттың составындағы энзимдар йөрәк ауырыуҙарына килтерә торған аҡһымдарҙы юҡҡа сығара. Гидрокси метилглутарил флавоноидар атамаһы аҫтында билдәле булған был энзимдар "насар" холестеринға ҡаршы көрәшә, етмәһә, уларҙың кире һөҙөмтәһе юҡ. Билдәле булыуынса, көнөнә 5 сынаяҡ ҡара сәй эсеү яман шеш үҫешен түбәнәйтә. Быға сәйҙәге флаваноидтар булышлыҡ итә.

■ Йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә, ти белгестәр. Европа университеттары ғалимдары йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут буйына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып дауалау һәләтенә лә эйә.

ЯУГИР ХӘТИРӘҺЕ

**Бәҙри Мөжәүир улы Мәмбәтҡолов 1911 йылдың 1 майында Ырымбур губернаһы Орск өйәҙенең (хәҙерге Баймаҡ районының) Темәс ауылында тыуған. Ул ике һуғышта, совет-фин һәм Бөйөк Ватан һуғыштарында, ҡатнаша. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 275-се кавалерия полкының 2-се эскадроны командиры булып хеҙмәт итә. Ленин, өс Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, бер нисә миҙал менән бүләкләнгән. "РСФСР мәктәбенең атҡаҙанған уҡытыусыһы", "БАССР мәктәбенең атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ була.**
**Мәмбәтҡолов Б.М. - Сибай педагогия училищеһына нигеҙ һалыусы, уның беренсе директоры. 1964 йылда мин шул уҡыу йортона уҡырға индем һәм 1968 йылда тамамланым. Сибайҙа эшләгән осоромда Бәҙри Мөжәүир улы миңә һәр ваҡыт кәңәштәре менән ярҙам итеп торҙо. 1981 йылда ул миңә һуғыш йылдарының ауырлыҡтарын һүрәтләгән иҫтәлектәрен биргәйне. Машинкала баҫылған ҡағыҙ биттәрен уҡып ултырғанда, Бәҙри Мөжәүир улының иҫ киткес ябай, түҙемле һәм ысын мәғәнәһендәге һуғышсы булыуын аңланым. Беҙҙең аранан ул 1999 йылда китте.**
**Утыҙ биш йыл ғүмеремдә күренекле уҡытыусымдың ҡанаты аҫтында үткәрҙем. Уның иҫтәлектәрен беренсе затта, ул яҙғанса, биреү отошло булыр, тип уйланым. Йөкмәтке урыҫ теленән тәржемә ителде.**

# ЙӘШӘҮГӘ ЫНТЫЛЫШ БУЛҒАС...

"Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында совет кавалеристары күберәк йәйәүле һалдат рәүешендә йөрөнө. Бер ат йөрөтөүсе (коновод) ун атҡа яуап бирҙе, ә һыбайлылар һуғышҡа инде. Улар мылтыҡ, автомат менән генә һуғышманылар - кавалерия частарының артиллерияһы ла, минометтары ла, танкыға ҡаршы пушкалары ла булды.

Атлы ғәскәрҙе яҙлы-көҙлө, юлдар ныҡ боҙолған саҡта, һуғышҡа индереү отошло булды. Урманлы, соҡор-саҡырлы, тау-ташлы урындарҙа ла атлыларға йыш мөрәжәғәт иттеләр. Илебеҙҙә 40-сы йылдарҙа шоссе, асфальт түшәлгән юлдар күп булманы. Европа илдәрен баҫып алғанда, немец танкылары шундай юлдарҙы файҙаланғанлыҡтан, Германияның фашист генералдары СССР-ҙағы хәлде тулыһынса иҫәпкә алмаған булып сыҡты. Юлдар яҡшы саҡта енеүгә иҫәп тотҡанлыҡтан, көҙгө һуғыштар башланғас ҡына, аңланы улар үҙ хаталарын.

Сталинград фронтындағы һуғыштар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы өсөн ысын мәғәнәһендәге һынау мәктәбе булды. Блиновский утары йүнәлешендәге бәрелештәрҙән башланды дошман менән көс һынашыу. Беҙҙең 275-се полк дивизияның иң башында барҙы, ә полктың алғы һыҙатында мин етәкселек иткән эскадрон хәрәкәт итте. Беҙ аттарҙы тылда ҡалдырып киткәйнек, әлбиттә.

Утарҙың тирә-яғында дошмандың яҡшылап ҡоролған ныҒытмаһы булдырылғайны. Тышҡы траншеяның ҡулсаһы эсендә икенсеһе урынлашҡайны. Һуғышсыларым тышҡы окоптар теҙмәһенә яҡынлашыу менән дошман көслө ут асты. Уңайлы позицияны һайлап алып, беҙ ҙә ҡаршылыҡ күрһәтә башланыҡ. Тәнгә алыш башланып китте. Беҙгә тиклем ошо йүнәлештә һуғышҡан 4-се эскадрон ниндәйҙер сәбәп арҡаһында алға бара алмаған икән.

Саҡырып алып, полк командиры Ҡусимов, бойороҡ бирҙе: "Эскадроның менән алға бар һәм яулап алған бейеклекте төп көстәр килгәнсе ҡалдырма!" Үҙе бейеклекте картала күрһәтте. Эскадроным, бөтәһе 120 кеше, төнө буйы туҡтауһыҙ һуғышып, Блиновский утарына ике-өс саҡрымға яҡынлаша алды. Әммә немецтәр көслө ут асҡанлыҡтан, беҙҙең һөжүм тотҡарланып ҡалды. Яугирҙар ергә ятырға мәжбүр булды.

Мин шуны яҡшы аңлай инем: бурысты мотлаҡ үтәргә кәрәк. "Ергә һырынып, дошман траншеялары яғына шыуышығыҙ", - тип бойороҡ бирҙем. Ҡараңғы төн беҙгә ярҙамға килде. Немецтарҙың позицияһына граната ташлау мөмкинлеге тыуыу менән мин: "Атакаға!" - тип һөрәнләнем. "Ура-а-а" ҡысҡырып, һуғышсыларым алға ташланды. Атыш оҙаҡҡа барманы, сөнки бәрелеш траншеялардағы ҡул һуғышына күсте. Пистолет тауыштары, ялт та-йолт итеп бысаҡ уйнағаны, йыртҡыс кеүек ҡысҡырып һуғышҡан ирҙәрҙең тауышына күмелде окоптар. Бәрелеш ҡыҫҡа, әммә ҡан ҡойошло булды. Гитлерсылар түҙмәне - сигенә башланы. Беҙ уларҙың артынан төштөк. Тик уңышлы һөжүм оҙаҡ дауам итмәне, сөнки оборонаның икенсе һыҙатындағы дошман ғәскәре беҙҙе ут менән ҡаршыланы. Вәғәҙә ителгән ярҙам, шулай уҡ төп көстәр иһә һаман күренмәне.

Төндөң икенсе яртыһында ғына Фитрат Абдуллин етәселегендәге ике тиҫтә автоматсы ярҙамға килеп етте.



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ТӘКӘББЕРЛЕК...
## йән ауырыуы ул



**Йән ауырыуҙарының береһе булып тәкәбберлек хисе тора. Шәриғәт закондары буйынса кешелә был ауырыу башҡалар менән иҫәпләшмәгән саҡта барлыҡҡа килә.**

Тәкәбберлектең башланғысы үҙендә икенсе кешеләрҙән өҫтөн күреү тойғоһонда ята. Был хаҡта Бәйғәмбәребеҙ шулай тигән: "Йөрәгендә бөләкәй генә миҡдарҙа булһа ла тәкәбберлек, эрелек хисе булған кеше бер ҡасан да ожмаҡҡа эләкмәйәсәк". Тәкәбберлек менән ауырыған мосолман ожмахҡа бер ҡасан да эләкмәйәсәк, тигән һүҙ өмөттө өҙөргә кәрәк, тигәнде аңлатмай, был сифаттан арынырға, таҙарынырға бер ҡасан да һуң түгел.

Тәкәбберлек менән ауырыу бик ҡурҡыныс күренеш һәм кешелек донъяһына әллә күпме хәсрәт килтереүе ихтимал. Шуның иң сағыу миҫалы - фашизм әҙемтәләре.

Тәкәбберлек кешенең нәфсеһенә йоғонто яһай. Ул Бәйғәмбәрҙең һүҙҙәрен, Ҡөрьән аяттарын дөрөҫ аңламай башлай. Аллаһ тәкәбберлекте яратмай һәм, бындай йән ауырыуы булған кешене Хәҡиҡәттән ситтә йө-

Беҙ шунда уҡ һөжүмгә күстек. Икенсе һыҙаттағы бәрелеш тә тиҙ арала ҡул һуғышына күсте. Ҡараңғы булыуға ҡарамаҫтан, беҙгә ҡаршы немецтар түгел, ә румындар һуғышыуын белдек.

Таң атыуға хәрби бурысты үтәнек: бейеклекте алып, окоптар ҡаҙа башланыҡ. Һөжүмде дауам итерлек көс ҡалмағайны. 140 һуғышсының тик яртыһы ғына сафта ине. Төп көстәрҙең килеүен көтөргә кәрәк, тигән ҡарарға килдем.

Ҡан ҡойошло төнгә һуғыштан һуң старшина Ғафаровты, рядовой Сәлихйән Хоҙайғоловты (Күгәрсен районының Юлдыбай ауылынан), лейтенант Минниәхмәт Хәйруллинды (ТАССР-ҙың Саба районы Килдебәк ауылынан) һәм башҡа күптәрҙе эргәмдә күрмәнем. Улар һәләк булғайны. Ауыр йәрәхәт алғандар ҙа күп ине. Йөҙ ҙә ҡырҡ кешенең тик яртыһы ғына имен ҡалғайны.

Иртәнсәк фашистар атакаға күсте. Беҙ яулап алған бейеклекте кире ҡайтарыу ине уларҙың ниәте. Уң яҡтан танкылар яҡынлашты. Һул яҡтағы үҙәктән, туҡтауһыҙ ата-ата, пехота килгәне күренде. Сигенмәскә, һуңғы тынысыбыҙға саҡлы һуғышырға, тигән бойороҡ биреп, дошманды ҡаршыларға әҙерләнергә ҡуштым.

Һуғыштың ҡыҙған мәлендә бәләгә тарыным: шартлағыс пуля һул билем аҫтындағы һөйәкте онтаны. Эскадронымдың ҡалған һуғышсыларын һаҡлап ҡалыу маҡсатында политрук Әхмәтовҡа кисекмәҫтән сигенергә ҡуштым. Политрук минә һораулы ҡараш ташланы: һине алып китергәме? Юҡ, тигәндә аңлатып, башымды сайҡаным.

Һуғыш майҙанында мин яңғыҙым ятып ҡалдым. Һуңғы көсөмдө йыйып, наганымды ҡуйыныма тыҡтым. Дошманға тереләй бирелмәскә ҡарар иттем.

Күп тә үтмәне, эргәмдән фашистарҙың тәүге төркөмө үтеп китте. Шунан икенсеһе. Өсөнсөһө... Бер-бер артлы үтте лә үтте улар. Миңә берәүһе лә иғтибар итмәне. Һуғыштың барышын атыш, шартлау тауыштары аша ғына белеп яттым.

Көндөң тәүге яртыһы үтте, шунан - икенсеһе. Сигенеү ҡапыл булғанлыҡтан, миңә тәүге ярҙам күрһәтеп өлгөрмәгәйнеләр. Ҡанһырау, яраның түҙеп торғоһоҙ һыҙлауы арҡаһында көсөм кәмегәндән кәмене. Өҫтәүенә, тәүге ҡар яуҙы. Ныҡ ҡына һыуытты, өшөй башланым. Ваҡыты-ваҡыты менән аңымды юғалттым. Өҙөк-өҙөк булып, һөйөклө әсәйем, балаларым тураһындағы уйҙар килде башыма. Яраланыуыма ун бер сәғәт самаһы ваҡыт үтеп киткәйне инде.

Иҫемде инде юғалттым тигәндә, һуғыштың үҙемә яҡынлашыуын аңланым. Немецтар, төркөм булып, эргәмдән кире яҡҡа үтә башланы. Бер нисә һалдат, эргәмдә туҡтап, ҡолаҡсын бүркемде, йөндән бәйләнгән бирсәткемде үҙләштерҙе. Портупеямды ҡырҡып, сумкамды һәм ҡайышымды алды. Итегемде систереп торманылар, сөнки ҡышҡыһын уның файҙаһы булмаç, тип уйланылар, ахырыһы.

Мин һәләк булманым. Артиллеристар ярҙамында полкым мин ятҡан бейеклектән фашистарҙы ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Күп тә үтмәне, иптәштәрем эргәмә килеп етте - политрук Әхмәтов ятып ҡалған урынымды иҫләп ҡуйған икән. Һаҡ ҡына плащ-палаткаға һалып, тылға алып киттеләр. Аҙаҡ еңел арбаға күсереп, санчаска килтерҙеләр. Юлда аңымды юғалттым.

Санчастә иҫемә килдем. Баш өҫтөмдә полк комиссары Әлибаевтың йөҙөн күрҙем. Унын эргәһендә полк табибы Хомяков тора ине. Хәлем насар булғанлыҡтан, иреҡһеҙҙән күҙҙәремде йомдом. Әлибаев табибҡа: "Эскадрон командирына нисек ярҙам итергә була?" - тип өндәште. "Ни бары 15-20 минут гүмере ҡалған унын, - тип яуапланы ул. - Артығына өмөт юҡ".

Был һүҙҙәрҙе мин дә ишеттем. Булған ғына көсөмдө йыйып: "Минең йәшәгем килә," - тип әйтә алдым. Минең һүҙҙәрем тәьҫир итте Хомяковҡа. Бер нисә мәртәбә энә ҡаҙап, мине һәм полк табибын дивизияның санитар эскадронына оҙаттылар.

Барып еткәс, мине хирургия өҫтәленә һалдылар - өмөтләнеүемсә, операция яһау өсөн. Әммә дивизияның баш врачы ризалашманы: "Яралы операцияны кисерә алмаясаҡ, сөнки 20-30 минуттан йән бирәсәк", - тине. Хомяков баш врачҡа ҡаршы төштө: "Мотлаҡ дауаларға кәрәк", - тине ул. Ысынлап та, дауалауҙың һөҙөмтәһе булды: сәғәт самаһы ваҡыт үткәйне, минең хәлем бер аҙ яҡшырҙы.

Шул уҡ көндөң кисендә ауыр яралыларҙы - мине, Кусимовты, Макеевты һәм тағы бер нисә кешене - машинаға һалып, тылға оҙаттылар. Тимер юл станцияһына туғыҙ тәүлектән һуң ғына барып еттек, сөнки төнөн генә хәрәкәт иттек.

Бөтә яралыларҙы, тауар вагондарына тейәп, Балашов ҡалаһына ебәрҙеләр. Унда йәрәхәт алған һуғышсыларҙы, яраларының еңел-ауыр булыуын иҫәпкә алып, төркөмдәргә бүлделәр, ялан госпиталенең вагондарына урынлаштырҙылар. Яралыларҙы һәм ауырыуҙарҙы Балашовта оҙаҡ тотмауҙары хаҡында белдек. Көн һайын госпиталь меңләгән кешене ҡабул иткән булып сыҡты.

Шул дауахананың табибы, ярамды ҡарағандан һуң, күрһәтмә бирҙе: "Яраһын эшкәртегеҙ ҙә етенсе палатаға һалығыҙ". Был палатаның үҙенсәлеген мин, әлбиттә, белмәй инем. Барып ятҡас ҡына уның тәғәйенләнешенә төшөндөм - өмөтһөҙ яралыларҙы ғына ебәрәләр икән шул бүлмәгә. Уларҙы тылға ебәреүҙең фәтеүәһе юҡ икәнде белгәндәр инде табиптар. Ун өс кешегә иҫәпләнгән палатала көн һайын ике-өс кеше йән бирҙе, уларҙың урынына шунда уҡ икенселәрен һалдылар. Һуғыштың ҡанундары ҡаты - уларға ҡаршы барып булмай.

Тәүҙә миңә иғтибар булманы тиерлек - әйтерһең, үлеүемде көттөләр. Әммә ауыр һынауҙы үтеп сыҡтым: көндәрҙең береһендә табип мине иғтибар менән ҡарап сыҡҡандан һуң, ярҙам күрһәтегеҙ, яҡшыраҡ ашатығыҙ, тип күрһәтмә бирҙе. Етенсе палатала тағы бер ай яттым. Түҙҙем, үлмәнем. Хушлашыр алдынан шул уҡ хирург ярамды ҡарап сыҡты ла: "Йөрәгең ныҡ булып сыҡты һинең. Йәшһең бит. Түҙемлеһең дә. Тылға оҙатасаҡбыҙ", - тине.

Алыҫтағы тылға оҙаҡ барҙыҡ. Тәүҙә состав Ташкентҡа йүнәлеш аласаҡ, тинеләр. Бәхетемә күрә, ул Өфөгә юлланды. Мине баш ҡалабыҙҙың Ленин урамындағы 2575-се эвакогоспиталенә урынлаштырҙылар.

Госпиталгә ингәнемдә яраланыуыма ай ярым ваҡыт үтеп киткәйне. Ҡырҡ биш көн эсендә әсәйем, туғандарым минән бер генә хат та алманылар. Мин, әлбиттә, уларҙың борсолоуы, хәүефләнеүе хаҡында белеп йөрөнөм. Тик үҙем тураһында хәбәр ебәрергә мөмкинлегем булманы. Мине белгән ҡайһы бер яҡташтарым, Бәҙри һәләк булды, тип, ҡайһылары, ул дошман тылында ҡалды, тип яҙған булған икән.

Өфөгә килеү менән өйгә, именмен, Өфөлә дауаханала ятам, тигән телеграмма ебәрҙем. Әсәйем, Баймаҡ районы етәкселәре хәлемде белергә килделәр.

Туғыҙ ай эсендә ике госпиталдә дауаландым: бер ай Балашовола, һигеҙ ай - Өфөлә. Ярты йыл ҡыбырламай, бүлмәнең бер мөйөшөнә ҡарап ятырға тура килде, сөнки аяғыма 14 килолыҡ ауыртмаҡ элеп ҡуйғайнылар. 1943 йылдың августында, ниһайәт, ике ҡултыҡ таяғына таянып, өйгә ҡайтып индем.

Госпиталдән сыҡҡас, бер аҙнаға ҡалып, Өфөләге балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, завод-фабрикаларында сығыш яһаным.

Районыма ҡайтҡас, һаулығым бик яҡшы булмаһа ла, партияның район комитетына эшкә урынлаштым".

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ**
**әҙерләне.**

---

рөтөрмөн, тигән. Бындай кешеләрҙең һәр саҡ хәл ителмәгән проблемалары күп була һәм улар үҙҙәрен тынысыҙ тота. Бындай кешеләр башҡаларҙан ихтирам көтә һәм, көтөп тә, моратына ирешә алмаһа, башҡаларға асыу менән ҡарай.

Тәкәббер кеше үҙенең кәмселектәрен күрмәй һәм улар тураһында ишетергә лә теләмәй. Хәҙистә әйтелгән: "Эштәре файҙаһыҙ кешеләр кем икәнлеген әйтәйемме? Тәкәбберлек ауырыуы йоҡҡан кешеләр". Бындай сир менән ауырыусылар Аллаһы Тәғәләнең ярҙамына өмөт итә алмай.

Тәкәбберлек барлыҡҡа килеүҙең сәбәптәре төрлөсә:

- Ата-әсәләре тәкәббер булған балалар шулай уҡ тәкәббер була.
- Урынһыҙ маҡтау ҙа кешегә бик насар тәьҫир итә һәм тәкәбберлек хисен уята.
- Тәкәббер кешеләр менән аралашыуҙан да был сифатты йоҡтороп була. Хәҙистә әйтелгән: "Һин аралашҡан кешеңә оҡшағанһың".
- Билдәле бер кимәлгә еткән кеше Кем арҡаһында был ниғмәттәргә эйә булыуын онотһа.
- Әле аҡылы өлгөрөп етмәгән кеше үҙен аҡыллы тип һанаһа.
- Әгәр ҙә кеше үҙенең был донъяға ниңә тыуғанлығын онотһа, йәки бөтөнләй белмәһә.
- Башҡа кешеләрҙең артыҡ иғтибарынан тәкәбберлек тойғоһо тыуа.
- Кеше үҙен башҡалар менән сағыштырғандан һуң, үҙен бөйөк тип һанаһа.
- Кеше Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булмаһа.
- Тәкәбберлек хисенең ни сәбәптән барлыҡҡа килгәнен белмәһә.

Бер хәҙис бар: бер ҡатын урамда китеп барған Ғүмәрҙе туҡтатҡан да былай тип әйткән: "Һин элек баҙарҙа балалар менән уйнаған Ғүмәр инең. Хәҙер һин - мосолмандарҙың идара итеүсеһе. Тәкәбберләнмә һәм маһайыуға юл ҡуйма!" Ғүмәрҙе уратып алыусыларҙың иҫе китә: "Ниңә тыңлайһың һин был ҡатынды?" Ғүмәр иһә ҡатынды аҙағына тиклем тыңлап бөтөп, былай тип әйтә: "Был ҡатынды Аллаһ үҙе тыңлай".

---

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Кәрлә турғай

**(Желтоголовый королек)**



Кәрлә турғайҙар ғаиләһенә ҡарай. Бик ваҡ (ауырлығы 5-7 грамм), йәшкелтһоро төҫтәге ҡош, йөнө бик матур булып ҡабарып тора. Баш түбәһендә - һары табы, ҡанатында ике аҡ буй һыҙаты бар.

Урмандарҙа оя ҡора, айырыуса ылыҫлыларын ярата. Ағас олононда йөрөй, ояһы ла шунда була. Ояһы - тәрән бер сынаяҡ, эсендә 7-12 алһыу йомортҡаһы ла булыр. Ҡышты урманда үткәрә, һарытүштәргә ҡушылып китеүе лә ихтимал. Йәш ылыҫлы ағастар ҡуйы булып үҫкән урында уны осратырға мөмкин.

Йыры - тыныс, "ци-фли-хии...ци-флихии", ҡыҫҡырыуы "ци-ци-ци" тип ишетелә.

Беҙ кәрлә турғайҙы Аҫҡын, Нефтекама, Нуриман урмандарында күрҙек. Хатта бер йылы ноябрь айында Өфө фән һәм технологиялар университетының биология факультетындағы бер аудиторияға ла осоп килеп ингәйне.

## Себен турғайы

**(Серая мухоловка)**



Артабан һүҙ барасаҡ ҡоштар себен турғайы ғаиләһенә ҡарай. Бәжәк менән туҡланыусы бик ваҡ был ҡоштарҙың суҡышы киң, аяҡтары ҡыҫҡа. Ҡороған ботаҡтарҙа ултыралар һәм осоп китеп барған бәжәкте тотоп ашағандан һуң, урындарына кире әйләнеп ҡайталар. Себен турғайы иһә өҫкө яҡтан ҡарағанда бер төҫлө - һорғолт-көрән, ә аҫтан көлһыуыраҡ. Маңлайында, баш түбәһендә, түшендә тулҡын кеүек һыҙаттары бар.

Баҡсаларҙа, парктарҙа, урмандарҙа йәшәй. Ояһын ағас олонона ҡора. Сыйырсыҡ ояларын үҙләштерә. Ябай, ғәҙәти ҡош.

## Ала себен турғайы

**(Мухоловка-пеструшка)**



Ата ҡоштоң өҫкө яғы ҡара, маңлайында, ҡанатында аҡ буй һыҙаттары бар, аҫтан - аҡ. Инә ҡош көлһыу-һоро.

Ҡуйы булмаған урмандарҙа, парктарҙа оя ҡора. Ҡайын, ҡарт имән, йүкә үҫкән ерҙе үҙ итә. 1986 йылда "Янғантау" санаторийы территорияһындағы барлыҡ сыйырсыҡ ояларын да ала себен турғайы баҫып алғайны. Өфө парктарында һирәк осрай. Йыры - сағыу, "ци-кру, ци-кру-цикру-цикру". "Пии" тип өҙөп ҡыҫҡыра.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 11 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Золотая мина". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 Т/с "Диверсант. Конец войны". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с "Противостояние". [16+]
22.30 "Большая игра". [16+]
23.45 Д/ф Премьера. "И Звезда Героя на груди". [12+]
0.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

4.00 Х/ф "Кстати, о бабочках". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
8.40, 14.40, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
8.55 Х/ф "Пальма". [6+]
11.40 Х/ф "Пальма-2". [6+]
15.10 Х/ф "Каруза". [6+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.30 Х/ф "Восьмой участок". [16+]
1.35 Х/ф "Врачебная ошибка". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 8.15, 23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45, 19.00 Генералы Башҡортостана. [12+]**
**9.15 Сәләм представляет… [12+]**
**9.30 "День Победы". Детский концерт. [6+]**
**10.00 Гора новостей.**
**10.15 Д/ф "Соловецкие юнги". [6+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Навигатор истории. [12+]**
**12.15 Спектакль "Ульмасбай". [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Башҡорттар. [6+]**
**15.15 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.45 Д/с "Города-герои". [16+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**0.15 Х/ф "Прощаться не будем". [12+]**
**2.00 Спектакль "Необычная история в обычной деревне". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 12 МАЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.40, 14.20, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Противостояние". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Х/ф "Каруза". [6+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Восьмой участок. Продолжение". [16+]
0.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.35, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Внимание, говорит Москва!" [16+]**
**10.45 Материнство и детство. [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Генералы Башҡортостана. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Соната для горничной". [16+]**
**1.45 Спектакль "Ездили мы на Макарскую ярмарку". [12+]**
**3.45 Специальный репортаж. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 13 МАЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Противостояние". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Восьмой участок. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Внимание, говорит Москва!" [16+]**
**10.45 Полезные новости. [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Материнство и детство. [12+]**
**17.00 Башҡортостан#вместе. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Ниша". [12+]**
**1.45 Спектакль "Ой, кто там лежит?" [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 14 МАЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Противостояние". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Восьмой участок. Продолжение". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Внимание, говорит Москва!" [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Навигатор истории. [12+]**
**16.15 Уралым. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Территория женского счастья. [12+]**
**17.15 Полезные новости. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Шопоголики". [16+]**
**1.45 Спекталь "Девушка с веснушками". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 15 МАЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 "Давай поженимся!" [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Сегодня вечером". [16+]
22.55 Премьера. "Команды". [16+]
23.55 Д/ф "История рок-фестиваля Revival 69". [18+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Поймай меня, если сможешь. [12+]
23.35 Х/ф "Море. Солнце. Склифосовский". [12+]
3.15 Х/ф "Хочу замуж". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Внимание, говорит Москва!" [16+]**
**10.45 Полезные новости. [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Хазина. [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 Формула здоровья. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30, 3.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Буран". [12+]**
**1.45 Спектакль "Шауракай". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 16 МАЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Иван Лубенников: Жизнь продолжается". К 75-летию со дня рождения художника". [16+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 Т/с "Шифр". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб веселых и находчивых". [16+]
23.55 Х/ф "Поцелуй". [16+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башҡортостан.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Кормилица". [16+]
0.35 Х/ф "Через беды и печали". [12+]
3.50 Х/ф "Мой чужой ребёнок". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 8.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 Хазина. [6+]**
**9.15 Сәләм представляет… [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Преград. Net. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**0.45 "Подарок". [12+]**
**2.45 Спектакль "Салават". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 17 МАЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.05 Д/ф "Крым Юлиана Семенова". [16+]
15.15 Д/ф "Владимир Вдовиченков. Готов отдать себя на растерзание". [12+]
16.05 Д/ф "Алексей Гуськов. Противостояние звезд". [12+]
17.00 "Команды". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "До Ре". [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.25, 2.35 Х/ф "Невезучая". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50, 1.35 Д/ф "Рассказы из русской истории. Кутузов. "Северный лис". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башҡортостан.
15.00 "Весёлые ребята". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асык. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Честно говоря. [12+]**
**16.00 Формула здоровья. [12+]**
**16.30 Д/с "Вопрос науки". [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Д/с "Города-герои". [16+]**
**18.15 Материнство и детство. [12+]**
**18.30 Д/ф "Предательство". [16+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 4.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Концерт "Любовь и жизнь женщины". [12+]**
**0.15 Х/ф "Высоко над страхом". [12+]**
**1.45 Спектакль "Дачники". [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Май (Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (24) дүшәмбе | 3:42 | 5:17 | 13:30 | 18:34 | 21:07 | 22:37 |
| 12 (25) шишәмбе | 3:41 | 5:15 | 13:30 | 18:35 | 21:09 | 22:39 |
| 13 (26) шаршамбы | 3:40 | 5:14 | 13:30 | 18:36 | 21:11 | 22:41 |
| 14 (27) кесе йома | 3:39 | 5:12 | 13:30 | 18:37 | 21:12 | 22:42 |
| 15 (28) йома | 3:38 | 5:10 | 13:30 | 18:38 | 21:14 | 22:44 |
| 16 (29) шәмбе | 3:37 | 5:08 | 13:30 | 18:39 | 21:16 | 22:46 |
| 17 (30) йәкшәмбе | 3:35 | 5:07 | 13:30 | 18:40 | 21:18 | 23:48 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# ҮЛӘНДЕ ҮРТӘҮ ҘӘ ТЫЙЫЛА!



**Башҡортостанда янғынға ҡаршы махсус режим ғәмәлдә. Ул 12 июнгә тиклем дауам итә.**

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итеүенсә, йыл башынан республикала 1700-гә яҡын янғын сыҡҡан, утта 70-тән ашыу кешенең ғүмере өҙөлгән. 55 гектар майҙанда 6 урман янғыны, шулай уҡ 178 гектарҙан ашыу майҙанда кипкән үлән яныуҙың 104 осрағы теркәлгән. "Шуға күрә әле усаҡ яғыу, сүп-сар һәм ҡоро үлән үртәү тыйыла. Законды боҙған өсөн ҙур штраф янай, һәм мин быны дөрөҫ тип иҫәпләйем. Әгәр кемдәндер вайымһыҙлығы арҡаһында бәлә була ҡалһа, уны енәйәт яуаплылығы көтә. Барығыҙҙы ла быға етди ҡарауығыҙҙы һорайым. Шашлыкты мангалда ғына ҡыҙҙырабыҙ. Тәмәке төпсөктәре ташламайбыҙ. Үҙегеҙҙең һәм башҡаларҙың ғүмерен, сит йорттарҙы, урманды хәүеф аҫтына ҡуйырға ярамай, - тип билдәләне Андрей Назаров. - Янғын хеҙмәттәренә ҡотҡарылған ғүмерҙәр, ауыр, намыҫлы һәм үтә кәрәкле хеҙмәте өсөн айырым рәхмәт".

Бөтә республика территорияһында янғынға ҡаршы махсус режим иғланы ғәмәлдә булған ваҡытта ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге, запас ерҙәрҙә, юл эргәләрендә, йылға һәм күл буйҙарында, ҡала һәм ауыл биләмәләрендә коммерция булмаған баҡсасылыҡ ширҡәттәрендә, ойоштороу-хоҡуҡи формаһы һәм милекселек формаһы ниндәй генә булыуға ҡарамаҫтан, предприятие һәм ойошмаларҙа, сүплектәрҙә усаҡ яғыу, янғын хәүефлеге тыуҙырған эштәр үткәреү тыйылғанлығы хаҡында тағы бер иҫкә төшөрөп китеүе артыҡ булмаҫ. Шулай уҡ урындағы үҙидара органдары тарафынан махсус билдәләнгән урындарҙан тыш пиротехник әйберҙәр ҡулланыу ярамай. Әгәр хеҙмәт эшмәкәрлеге менән бәйле булмаһа, граждандарға шулай уҡ урманда йөрөүгә лә сикләүҙәр индерелә. Был талаптарҙы боҙған осраҡта штрафтар ҡаралған:

- граждандарға 10 меңдән 20 мең һумға тиклем;
- вазифалы кешеләргә - 30 меңдән 60 мең һумға тиклем;
- юридик докуметтарһыҙ эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеген башҡарған кешеләргә - 60 меңдән 80 мең һумға тиклем;
- юридик шәхестәргә - 400 меңдән 800 мең һумға тиклем.

Быйылғы йәй республикабыҙҙа ғәҙәттәгенән аномаль рәүештә эйылы һәм дымлы булыуы көтөлә, сентябргә тиклем һаua температураһы норманан юғары буласаҡ, көньяҡ райондар бөтөнләй ямғырһыҙ ҡалыуы ихтимал, тип фаразлай синоптиктар. Шуға күрә, ҡоролоҡҡа һәм урман янғындарына әҙер булыр өсөн республика Хөкүмәте иҫкәртеү саралары алдан күрә башланы.

Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов билдәләүенсә, иң хәүефле урындар исемлеге төҙөлгән: уға 214 тораҡ пункт, 48 балалар лагеры һәм 69 баҡсасылыҡ ширҡәте ингән. Һәр объект өсөн, янғын сыға ҡалһа, кем, ҡайҙан һәм ниндәй көстәр менән утты һүндерәсәге хаҡында аныҡ план төҙөлгән. "Беҙҙә аныҡ алгоритм бар: ауылда янғын сыҡһа, урындағы хеҙмәттәр эшләй, хәл контролдан сыға башлаһа - региональ резервтар ҡушыла. Барыһы ла минутына ҡәҙәр яҙылған, - ти ведомство башлығы. - Ҡотҡарыусылар үҙ көстәрен бөтә Рәсәй уҡыуҙарында һәм Өфө районында үткән Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы һәм урман һаҡсылары менән берлектә үткән күнекмәләрҙә һынап ҡараған да инде. Май айында күнекмәләр башҡа райондарҙа ла үтәсәк. Утҡа ҡаршы тороп өсөн ҙур резерв булдырылған, техника һатып алынған. Ә Ка-32 янғын һүндереү-ҡотҡарыу вертолеты тәүлек әйләнәһенә дежурҙа, уның экипажы ландшафт янғындарын һүндереүгә һәр саҡ әҙер тора. Беҙҙең төп көсөбөҙ - кешеләр. 2000 ашыу волонтер ландшафт янғындарын һүндереүгә өйрәтелгән, тағы ла 400 кеше май айында күнекмәләр үтәсәк. Улар профессионалдарға ҙур ярҙам. Йәмғеһе ландшафт янғындары менән көрәшкә 9 мең кеше һәм ике меңгә яҡын дана техника әҙер".

"Быйыл урман янғындары 8 апрелдә уҡ - былтырғынан ике аҙнаға алдан башланған. Республика урмандарында биш янғын осрағы теркәлгән. Улар барыһы ла Бөрйән, Белорет, Йылайыр һәм Баймаҡ районларында булған. Урман хужалығы министрлығының янғын һүндереү хеҙмәткәрҙәре бер тәүлектә бар янғын усаҡтарын һүндереп өлгөргән, - тине БР урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов. - Беҙ алдан билдәләнгән план буйынса эшләйбеҙ. Ҙур янғын осрағы була ҡалһа, уны һүндереүгә 12 300 кеше сығырға әҙер һәм төрлө ойошмаларҙан 3500 дана техника йәлеп ителәсәк".

Билдәләнеүенсә, янғын осраҡтарын алдан күреү өсөн күп кимәлле күҙәтеү системаһын ҡулланалар.

Күктән: Иҫке Собханғол, Белорет һәм Өфө маршруттарында, барыһы 4.1 млн гектар ерҙә самолеттар патруллек итә.

Йыһандан: махсус юлдашлы мониторинг системаһы эшләй.

Ерҙән: урмансылар маршруттарҙы йәйәү һәм транспортта патруллек итә (1.6 млн гектар), ә быйыл уларға дрондар ярҙам итә.

Камералар: 10 районға 22 "Урман һаҡсыһы" камералары ҡуйылған. Улар төшөргән һүрәт Урман хужалығы министрлығына һәм Республика менән идара итеү үҙәгенә генә түгел, шулай уҡ туранан-тура райондарҙың диспетчер хеҙмәттәренә лә еткерелә.

БАҠСА

# ХӘЙЛӘЛӘРЕ ЛӘ БАР



❖ Кишерҙең сығышы күренгәнгә тиклем даими рәүештә һыу һибеп торалар. Һуынан үҫентеһе күренгәс тә, көндәр үтә эҫе тормаған осраҡта, 12-15 көн тирәһе һыу һипмәҫкә кәрәк, был уның тамырҙарына ергә тәрәнгәрәк китеп үҫергә мөмкинлек бирә.

❖ Әгәр борсаҡ эргәһенә гәрсис сәсһәң, унан ике тапҡырға күберәк уңыш алырға мөмкин.

❖ Укропты ҡояш нурҙары төшкән урынға сәсергә кәрәк, юғиһә, күләгәлә үҫкән япраҡтарҙан хуш еҫ аңҡымай. Шулай уҡ укроп сәселгән тупраҡҡа көл һәм эзбиз таш һипмәйҙәр.

❖ Ҡабаҡ яҡшы өлгөрһөн өсөн ҡабаҡ елеһен ергә ҡаҙап, тамырландыралар.

❖ Һоҡот борсағы, борсаҡ, һуған, һарымһаҡ, фасоль үҫентеләрен кесерткән төнәтмәһе менән туҡландырмағыҙ.

❖ Көн һайын үрсетмәнең башын 1-2 минут дауамында һыйпап торһаң, ул оҙонайып китеп үҫмәй. Сөнки ҡул менән тейгән саҡта үҫемлектә этилен матдәһе бүленеп сыға, ул үҫеү процесын тотҡарлай.

❖ Кесерткән үҙе эргәһендә үҫкән үҫемлектең төрлө ауырыуҙарға ҡаршы тороусанлыһын арттыра. Шуға күрә, рәт араларына вәҡланған кесерткән йәйеү файҙалы.

❖ Гәрсис сидераттары тупраҡты фосфор һәм көкөрт менән байыта, айыуғорт һәм ҡаты ҡортто (проволочник) бөтөрә.

❖ Алдан гәрсис үҫкән урында һуған яҡшы үҫә.

❖ Люпин, сөйәл үләне, настурция, Бәйғәмбәр тырнағы, бәрхәт сәскәһе, һуған, ҡәнәфер, гөлбаҙран, әрем - төрлө ҡороҡҡостарҙы ҡурҡытыусы үҫемлектәр.

❖ Ҡайын еләге төптәре араһына ылыҫлы ағастарҙың ҡойолған энәләрен һибеү файҙалы. Был емештәрҙең тәмен яҡшырта, сереүҙән һаҡлай, оҙонморон, талпан һәм ҡаты ҡортто бөтөрөргә ярҙам итә. Ә бына абаға йоморо ҡорттарҙан һәм сереүҙән һаҡлай.

❖ Ҡапыл һыуыҡтар төшкәндән һуң үҫемлектәргә һуған ҡабығы төнәтмәһе һибәләр. Бының өсөн 0.5 литр һуған ҡабығына 10 литр һыу ҡойоп ҡайнатып, 12 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөп алырға. Һипкәндә 2/10 нисбәтендә һыу ҡатыштырырға кәрәк.

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**9 май "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+
**12 май "Ах, был мөхәббәт!.."** (А. Чехов, А. Абушахманов, А. Әмиров). 12+
**13 май "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+
**14 май "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 май "Синяя-синяя речка"** (Б. Вахтин, М. Күлбаев). 18:00. 12+
**9 май "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 18:00. 12+
**10 май "Всё могло бы быть иначе..."** (И. Губач, М.Күлбаев), 18:00. 16+
**12 май "Антоний. Клеопатра"** (У. Шекспир, И. Ҡаҙаҡбаев), 19:00. 16+
**13 май "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев). 12:00. 12+
**14 май "Брат Чичиков"** (Н.Гоголь, М. Күлбаев). 19:00. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8 май "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+
**8 май "Живи!"** (Р. Сванидзе). 19:00. 6+
**9 май "Живи!"** (Р. Сванидзе). 15:00. 6+
**9 мая "О героях былых времен"** (М. Батурин). 18:00. 12+
**10 май "Коза - дереза"** (М. Супонин). 12:00 һәм 15:00. 0+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 май "Магия барокко"** (А. Крутько/контратенор, В. Мортазин/орган, филармонияның камер оркестры). 12+
**14 май 87-се концерт миҙгелен ябыу.** 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 май "С чего начинается Родина"** әҙәби-музыкаль лекторийы. 6+
**14 май "Беҙҙең өйҙөң әйәме"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), иҫтәлектәр. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**8 май "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миннуллин), комедия. 12+
**9 май "Рядовойҙар"** (А. Дударев), драма. 12+
**10 май "Алдар и царевна Несмеяна"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12:00. 0+
**12 май "Кукарача "путешествие в прошлое"** Өфө сәнғәт институты студенттарының диплом спектакле.

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**8 май "Гөлдәр"** бейеү ансамбленең отчет концерты. 6+
**12 май "Эдельвейс"** эстрада бейеүҙәре ансамбле концерты. 6+

### БР Милли музейы

**8 һәм 9 май "Еңеү көнө"** программаһы. 11:00 - 16:00. 6+
**10 май "Сыуаш сигеүе"** оҫталыҡ дәресе. 11:00. 6+
**12 май "Үҙ ағасыңды ултырт"** оҫталыҡ дәресе.15:00. 6+
**14 май "Урал батыр" ҡобайыры".** Башҡортостан халыҡ рәссамы З.Г. Ғаяновтың күргәҙмәһен асыу. 12:00. 0+

ИҪКӘ АЛЫП...

# КАВАЛЕРИСТ ЯҠТАШЫМ

**Улар икеһе лә - Ишембай районында тыуып үҫкән шағирҙар Яҡуп Ҡолмой ҙа, Риф Мифтахов та яҡты донъяларҙа юҡ инде хәҙер. Ә бына яҡташтары күңелендә лә, республика халҡы хәтерендә лә улар иң ихлас әҙиптәр булараҡ һаҡлана. Риф ағай Мифтахов бер ваҡыт беҙҙең гәзиткә Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, кавалерист ағайыбыҙ Яҡуп Ҡолмой тураһында яҙма алып килгәйне. Беҙ уны баҫып та сығаргайныҡ. Хәҙер гәзиттәрҙә бындай иҫтәлектәр бик үк күренеп бармай, иҫтәлек яҙыусы авторҙар ҙа юҡ кимәлендә, тип уйлап, уны гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тағы тәҡдим итмәксе булдыҡ әле.**



"Ихласлыҡ һәм алсаҡлыҡ - Яҡуп Ҡолмойҙоң үҙенә лә, йыр-шиғырҙарына иң характерлы сифаттар булды, шулай булып ҡала. Ошо хаҡта уйлаһам, бер ваҡиға иҫкә төшә.

"Башҡортостан" китап нәшриәтендә хеҙмәт итеп йөрөгән саҡ ине. Бергә эшләгән шағир Ғәлим Дәүләтовтың ғаиләһенә Өфөнөң Достоевский урамынан ике бүлмәле фатир бирҙеләр. Беҙ, нәшриәттәге дуҫтары, уларҙы яңы урынға күсерешеп ҡуйҙыҡ. Эш бөткәс, уйнарға ярай, тигән йола буйынса, кисен фатирҙы "йыуырға" ултырҙыҡ. Беҙҙең менән Яҡуп ағай ҙа бар ине. Бәхетиһеҙ, ул Ғәлимдәрҙә күрше генә йортта йәшәй икән. Бер ни тиклем "ҡыҙып" алғас, мин яҡташыма шундайыраҡ һүҙҙәр менән өндәштем:

- Хөрмәтле Яҡуп ағай, мин шиғырҙарығыҙ аша һеҙҙе бик күптән беләм, теләйһегеҙме, уларҙы яттан һөйләйем?

Яҡуп ағай, үтә ныҡ аптырауҙан, ахырыһы, аяғөҫтө тороп:

- Кит анан, булмаҫ! - тине.

Мин уңайлыраҡ урынға баҫтым да мөхәббәт хаҡындағы бер шиғырҙы яттан һөйләй башланым:

*Мөхәббәтем ҡасан тыуғандыр ул,*
*Һиҙмәй ҡалдым хатта үҙем дә.*
*Йөрәгемдә елкендереп бер ҡыҙ*
*Урын алды минең күңелдә.*
*Һиҙмәй ҡалдым, әллә тәүге тапкыр*
*Ҡыймай һүҙ әйткәндә тыуҙы ул.*
*Һис тә тынғы бирмәй, хыялымда*
*Көләмһерәп һаман торҙо ул...*

Яҡуп ағай, ике ҡулын да күкрәгенә ҡуйып, шаҡкатып торҙо ла, ҡапыл ғына:

- Етте! - тине.

Мин аптырап туҡтап ҡалдым. Шул саҡ ағайыбыҙ салбар кеҫәһенән шыптырҙап торған биш һумды тартып сығарҙы ла:

- Мә, магазинға йүгер! - тип аҡсаны миңә һуҙҙы.

Ағайым әйткәненән кире сигенерлек түгел ине - йүгерергә тура килде.

Беҙ "ҡыҙа" барҙыҡ. Бына бер саҡ бергә эшләгән Фәнил Йомағужин менән икәүләп, минең яҡташтың һүҙҙәренә яҙылған, киң билдәле "Былбылым"ын һуҙып ебәрҙек. Был юлы ла ағайыбыҙ, йөрәгенә түҙә алмай, бүлмәлә йөрөй башланы ла, беҙ йырлап бөтәр-бөтмәҫтән, тағы ла яңы "бишлек"те тартып сығарып, беҙҙе магазинға йүгертте...

Яҡуп ағайҙың ихласлығы, йомартлығы, ғәжәп бер үҙенсәлекле кеше булыуын мин ошо кисәлә беренсе тапҡыр күрҙем. Әммә Яҡуп ағайҙың ғүмер һуҡмағы, үҙе яҙғанса, "оҙон да, бормалы ла һәм янар утлы ла, текә таулы ла. Уны үткәндә, тирең генә түгел, күҙ йәшең дә түгелә".

Эйе, Яҡуп ағайға был тормошта, күҙ йәше генә түгел, яу яланында ҡан ҡойорға, ут-дауылдар аша үтергә лә тура килә. Шуға ла уның шиғриәтендә һуғыш темаһының төп урын биләүе бик тәбиғи хәл. Был хаҡта ла оҙонолаҡ һөйләргә булыр ине. Шуны ғына әйтке килә. 1939 йылда Яҡуп Ҡолмой Ҡыҙыл Армия сафына саҡырыла. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, тәүҙә Мәскәүҙе һаҡлауҙа, унан Әрмәнстанда ойошҡан атлылар дивизияһына эләгеп, ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Йәш шағир 1944 йылда Яҙыусылар союзы ағзаһы итеп ҡабул ителә. Ҡыйыу кавалерист күрһәткән батырлыҡтары өсөн II дәрәжә Дан ордены, һиреҙ миҙал менән наградлана. Уны белгән кешеләр, бигерәк тә ҡәләмдәштәре, яратып, "кавалерист" тип шаяртырҙар ине. Мин дә ҡыҫҡа ғына иҫтәлегемде шиғри етди шаяртыу менән тамамлайым:

*Кәмһетмәйем һис,*
*Арттырмайым һис:*
*Һин булдың һәр саҡ*
*Ҡыйыу кавалерист.*
*Яу туҡтағанда*
*Һиндә - тойғо-хис.*
*Ут кисеп тыуған*
*Шағир-кавалерист.*
*Булманы һиндә*
*Алдау, нәфрәт, үс:*
*Ҡалдың саф килеш,*
*Яҡташ, кавалерист.*
*"Атлы Яҡуп" һин -*
*Ихласлыҡ һәм хис.*
*Күңелдән китмәҫ*
*Шағир-кавалерист!"*

**Риф МИФТАХОВ.**

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

# СЫҢРАЙ-СЫҢРАЙ ОСА ТОРНАЛАР



*Ерҙән бара кеше, күккә баға -*
*Унда - ҡөҙрәт, аҡ өмөт, хыял.*
*Төпһөҙ күккә, йондоҙло асманға*
*Сыңлап торған донъябыҙ һыя -*
*Йәшел генә түңәрәк оя.*

*Шундай камил яратылған донъя -*
*Сүп тиклем дә артыҡ нәмә юҡ.*
*Аяҡ аҫты - бәрәкәтле тупраҡ,*
*Баш осонда - көмбәҙле ҡыйыҡ.*
*Тик сама бел, һикермә түйып.*

*...Ҡара эсле, ҡара үсле бәндә!*
*Кемдән тыуҙың, әҙәм аҡтығы!*
*Вәхшилеккә кертә булалмайны*
*Сабыйың күҙ йәше паклығы,*
*Әсәң һөткәйеңең аҡлығы?*

*Күпме әсә бөгөн күккә баҡҡан,*
*Мөлдөрәмә хәсрәт күҙҙәре.*
*Кейек ҡаҙҙар булып осоп үтте*
*Шәһит киткәндәрҙең шәүләһе.*
*Юҡ шул донъяларҙа үҙҙәре...*

*Сыңрай-сыңрай оса аҡ торналар:*
*- Афәт башы ерҙә - кешелә.*
*Күбәләктәй йәндәрҙең күк көлө,*
*Йырып та сыҡҡыһыҙ ҡайғы булып,*
*Тыуған еребеҙгә төшәлә.*

**Таңһылыу ВӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯМАН ҺҮҘ...

## ҡәбергә керетер

Яман күҙ хайуанды ҡаҙанға керетер, яман һүҙ әҙәмде ҡәбергә керетер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙе уҡырға һәләтле булмаған башҡаларҙы уҡытыр.

**(Оскар Уайльд).**

Шәхси яуаплылыҡ тойғоһо булмағандарҙа яман инстинкттар өҫтөнлөк итер.

**(Сара Бернар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер маҡтанырға яратҡан әҙәм үҙенең дуҫтары алдында, бер ниндәй ауырлыҡһыҙ һәм бер һүҙ әйтмәйенсә лә теләһә кем менән уртаҡ тел таба алам, тип ысҡындырған. Дуҫтары уның был ғәжәйеп һәләтлеген тикшерергә, үҙ күҙҙәре менән күрергә ҡарар иткән. Бына улар бергәләп юл буйлап атлап киләләр. Ҡаршыларына бер көтөүсе осраған. Дуҫтарының беренсе маҡтансыҡҡа: "Һин ошо көтөүсе менән уртаҡ тел табып ҡара әле", - тигән. Бер һүҙ ҙә әйтеп тормайынса, маҡтансыҡ көтөүсе эргәһендә туҡтап, уға уҡталған. Ҡулын күтәреп, көтөүсегә һуҡ бармағын күрһәткән. Көтөүсе уға яуап итеп ике бармағын өҫкә күтәргән. Шунан маҡтансыҡ бер ҡулындағы бармаҡтарын яҙып ебәреп, көтөүсегә устарын йәйеп күрһәткән. Уға яуап итеп көтөүсе йоҙроҡ төйнәгән.**

**- Әйттем бит мин һеҙгә!- тип ҡысҡырып ебәргән маҡтансыҡ. - Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, мин көтөүсе менән уртаҡ тел таптым! Беҙ бер-беребеҙҙе аңланыҡ. Ҡулымды күтәреп, бер бармаҡ күрһәткәндә, көтөүсенән: "Һин Хоҙайҙың берҙән-бер булыуына ышанаһыңмы?" - тип һораным. Көтөүсе миңә ике бармағын күрһәтте һәм: "Эйе, Хоҙайҙың берҙән-бер булыуын һәм уның бәйғәмбәре Мөхәммәт икәнен таныйым", - тине. Устарымды күрһәтеп, мин уға: "Ә һин көнөнә биш ваҡыт намаҙ уҡырға кәрәк, тигән талапты үтәйһеңме?" - тип һораным. Ул миңә йоҙроҡҡа төйөлгән ҡулын күрһәтеп: "Эйе, Ислам ҡануңдарын бына ошолай, йоҙроҡҡа төйнәлгән һымаҡ ныҡлы тотам", - тип әйтте...**

**Маҡтансыҡтың дуҫтары уның был һәләтлегенә һис кенә лә шикләнмәҫтән, көтөүсене тикшерергә була һәм уға һорау бирә.**

**"Эйе, мин был кешене бик яҡшы аңланым, - ти көтөүсе. - Һуҡ бармағын күрһәткәндә ул минең күҙемде соҡорға теләгәнен аңланым. Шуға ла мин, ә мин һинең ике күҙеңде лә соҡоясаҡмын, тип, ике бармағымды күрһәттем. Ул, моғайын, асыуланғандыр һәм минең яңағыма сабырға теләп, миңә усын күрһәткәндер. Шунан иһә мин, ә мин ошо йоҙроҡтарым менән башыңды төйәсәкмен, тип, уға йоҙроҡ төйнәнем. Эйе, беҙ бер-беребеҙҙе бик яҡшы аңланыҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 26018

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 7.05.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 7.05.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 8.05.2026 й.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 800

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.